*Ваҡытлыса ғына булһа ла тереләрҙең үлгәндәр тураһында яҙғандарын уҡыуҙан туҡтағыҙ ҙа, күптән үлгән кешеләрҙең тереләр тураһында яҙғандарын уҡығыҙ әле.*

*(Г. Честертон).*


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

19 - 25 ФЕВРАЛЬ (ШАҠАЙ) 2011 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№9 (427)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Иң яҡшы уҡытыусы...**

Дим районында



4

**Иҫерektәр ҙә...**

әҙәм балаһы, имеш



5

**Комбриг Мортазин**

Данлыҡлы сардар һәм дәүләт эшмәкәренең тыуыуына 120 йыл



6-7

**Ел аулаусылар ҙа...**

ҡасан да булһа бәхеткә өлгәшә ул



11

14 **ТВ-программа**


ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## *Һуңғы ваҡыт Рәсәй Федерацияһында милләт-ара мөнәсәбәттәр ҡырҡыулығы хаҡында һүҙ алып баралар. Әйтәйек, бына беҙҙең Башҡортостанда бармы һуң ундай мәсьәлә ҡырҡыулығы?*

*Рәшит ШӘКУР, шағир, филология фәндәре докторы, профессор:* Милләт-ара мәсьәлә бик төптән уйлап, барлыҡ нескәлектәрен белеп, аңлап эш итеүҙе талап итә. Бөгөн иһә был мәсьәлә ҡырҡыулығы уйлап сығарыла һәм уның аҫтында аҙ һанлы халыҡтарҙың көнүҙәк проблемаларын аңламау, күрергә теләмәү ята. Милләт-ара мөнәсәбәттәр ҡырҡыулығы мәсьәләһен күтәреүселәр ошо шауҡымда беҙҙең илдә меңәр йыл һуҙымында формалашҡан халыҡ атамалары урынына яңыларын уйлап сығармаҡсы. Бында инде уларҙың төп маҡсаты ла асыҡлана төшә. Милләттәрҙең яңы этнонимдары - яһалмалыҡ, ә яһалма төшөнсә тәбиғәткә йәбешмәй, оҙаҡ йәшәмәй, тарих арбаһынан төшөп ҡала. "Совет халҡы" тигән атама менән дә шул уҡ хәл ҡабатланды. Улай ғына ла түгел, был сәйәсәт һуңғы сиратта СССР-ҙы тарҡатты. Ҡөрьәндә Хоҙай Тәғәләнең халыҡтарҙы һәм телдәрҙе яралтыуы хаҡында әйтелә икән, яңы этнонимды уйлап сығарыусыларҙы Хоҙай ихтыярына ҡаршы барыусы атеистар тип тә атарға булалыр.

Бөгөн милләт-ара мөнәсәбәт тураһында һүҙ алып барыусылар иң беренсе нәүбәттә күп һанлы милләттәр баҫымы аҫтында ҡалған аҙ һанлы милләттәрҙең үҙ-үҙен һаҡлауы тураһында әйтергә тейеш ине. Икенсенән, бында тел мәсьәләһе лә үҙенән-үҙе килеп сыға. Туған тел - изге төшөнсә. Уны өйрәнеү мәсьәләһе һәр кем өсөн намыҫ эше булыу урынына беҙҙә ата-әсәләрҙең ризалығы кимәлендә хәл ителә. Ә бит мәсьәләне икенсе төрлө лә ҡуйып була: әйтәйек, һәр кем үҙ туған телен өйрәнергә бурыслы, тип. Ә инде мәсьәләне беҙҙең илдәгесә итеп ҡуйыу аҙ һанлы халыҡтарҙың ҡәҙерен белмәүҙән килә.

*Фирҙәүес ХИСАМЕТДИНОВА, Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты директоры, филология фәндәре докторы, профессор:* Мин бар яҡтан да республикабыҙҙа милләт-ара татыулыҡ яҡлы, әммә был "татыулыҡ"башҡорт милләтенең күңелен китеү иҫәбенә башҡарылмаһын ине. Ваҡытында мин, дәүләт теле булараҡ башҡорт телен уҡытыу телебеҙҙең абруйын күтәреү өсөн кәрәк, тип яҙғайным. Әле лә шулай уйлайым. Урыҫ, татар, башҡа милләт балаларын башҡортса уҡытыуҙы уларҙың үҙ иркенә ҡуйырға була, әммә урыҫ телле мәктәптәрҙә уҡыусы башҡорт балалары 2 сәғәт булһа ла үҙ туған телендә уҡыуҙан мәхрүм ҡалырға тейеш түгел. Мәктәп үҙендә уҡыған башҡорт балаһына туған телендә уҡыр өсөн шарттар тыуҙырырға бурыслы. Тик, әйтәйек, башҡорт теле дәресен һуңғы дәрес итеп ҡуйып, башҡаларҙы ҡайтарып ебәреп, башҡорт балаларын алып ҡалып түгел.

Беҙҙең республикала милләт-ара мөнәсәбәттәр, Рәсәйҙең башҡа төбәктәре менән сағыштырғанда, шөкөр итерлек. Бының нигеҙендә, әлбиттә, башҡорт милләтенең башҡаларға толерантлы була алыуы ята, тик ошо хаҡта фекер йөрөтөүселәрҙең береһенең дә был фактты танырға теләмәүе аптырата. Эйе, беҙ үтә толерантлы, шул уҡ ваҡытта хәүефле толерантлы, үҙебеҙгә зыян килтереп булһа ла, иң тәүҙә башҡаларҙың күңелен уйлайбыҙ.


**(Дауамы 2-се биттә).**


ИҒТИБАР!

# КЕМ АЛЫҠ "КИСКЕ ӨФӨ"НӨ?

**Баҫма матбуғат саралары журналистарының, шулай уҡ почта хеҙмәткәрҙәренең йыл әйләнәһенә дауам иткән тынғыһыҙ ғәмәле шул инде: халыҡты гәзит-журналдарға яҙҙырыу. 2011 йылдың тәүге яртыһына матбуғат баҫмаларына яҙҙырыу кампанияһы тамамланып бөтөүгә, бына, икенсе ярты йыллыҡ өсөн дә башланды был кампания. Йәғни һеҙ әле март аҙағына тиклем 2011 йылдың тәүге ярты йыллығы хаҡтары менән 2011 йылдың икенсе ярты йыллығына гәзитебеҙгә яҙылып ҡала алаһығыҙ. Артабан беҙгә бәйле булмаған сәбәптәр менән яҙылыу хаҡының бер аҙ артыуы ихтимал.**



Гәзитебеҙҙең ихлас дуҫтары был мәғлүмәтте ҡолағына элеп тә алған, яҙылып, беҙгә квитанцияларын ебәрә лә һалған. "Бала саҡта "Кем алыҡ?" тигән уйын уйнай торғайныҡ, - тип яҙа, мәҫәлән, Баймаҡ районынан Әкрәм Ҡәйепҡолов тигән уҡыусыбыҙ. - 50-60 метр алыҫлыҡҡа берәй әйбер һалабыҙ ҙа, кем беренсе йүгереп барып етә, уны шул ала. Әле лә ауылда беренсе булып "Киске Өфө"гә яҙыла һалдым да, үҙ-үҙемә "Кем алыҡ?" тип ҡысҡырҙым. Шулай уҡ гәзит аша республикала йәшәүсе башҡа милләттәштәремә лә оран һалам:"Кем алыҡ "Киске Өфө"нө?"

Әкрәм ағайыбыҙҙың был һүҙҙәрен редакциябыҙға йомош менән килеп ингән тағы бер дуҫыбыҙ (исемен әйтмәүҙе үтенде) күңеленә яҡын алды һәм: "Уйын булғас, уйын булһын: мин финишҡа сығыусылар йүгереп барып етә торған урынға бер **микротулҡынлы мейес** ултыртам. Март айында 2011 йылдың икенсе ярты йыллығына "Киске Өфө"гә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан берәүһе отһон әйҙә был бүләкте", - тине. Идея беҙгә оҡшаны. Ул һеҙгә лә оҡшар, тип уйлайбыҙ. Уйын апрелдә лә дауам итер һәм, моғайын, ҡатнашыусыларҙы дәртләндерер тағы берәй бағыусы дуҫыбыҙ редакциябыҙға килеп инер, үҙенән бүләк тәҡдим итер, тигән өмөттә ҡалабыҙ.

Шулай итеп, әйҙәгеҙ, стартҡа! Беҙҙең индекстар: 50665 - алты айға 330 һум 24 тин, 50673 (предприятие һәм ойошмалар өсөн) - 360 һум 24 тин.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә кәңәш ҡорайыҡ, бергә уйлайыҡ, бергә һығымталар яһайыҡ!**

✓ *Ғүмерҙең, уның һәр миҙгеленең ҡәҙерен белеп йәшәү һәр кемдең үҙ ихтыярында. Бында шулай уҡ "Һау булыу - аҡыллы булыу", "Оҙаҡ йәшәү - дөрөҫ йәшәү" тигән тормош программаһы ла ята.*



БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР

# ОҘАҠ ЙӘШӘҮ - ДӨРӨҪ ЙӘШӘҮ

**...боронғо Египетта бары тик 110 йәшкә тиклем йәшәгән кеше генә аҡыллы булып иҫәпләнгән. Ә инде ошо йәшкә тиклем үҙ үлеме менән донъялыҡтан китҡән кеше ахмаҡ булып һаналған.**

Әлбиттә, был исемлеккә тыумыштан зәғифтәр, яуҙарҙа, кешеләрҙең үҙенә бәйле булмаған башҡа төрлө ҡырғындарҙа, тәбиғәт катаклизмдарында ҡорбан булғандар инмәгән. Египеттар был мәсьәләгә дөрөҫ ҡараған бит: һау булыу, сәләмәтлегеңә зарарлы кире йоғонтоларҙан ҡотолоу, ваҡытыңды, Хоҙай тарафынан бүләк ителгән башҡа мөмкинлектәреңде, һәләтеңде әләф-тәләф итмәү, бер һүҙ менән әйткәндә, ғүмерҙең, уның һәр миҙгеленең ҡәҙерен белеп йәшәү һәр кемдең үҙ ихтыярында. Бында шулай уҡ "Һау булыу - аҡыллы булыу", "Оҙаҡ йәшәү - дөрөҫ йәшәү" тигән тормош программаһы ла ята.

Кешене нимә иртә ҡартайта һәм ҡәбергә алып бара? Әлбиттә, насар уй, төшөнкө кәйеф, шомланыу, көнләшеү, кенә ҡыуыу, сифатһыҙ ризыҡ, бысраҡ һыу, спиртлы эсемлектәр, тәмәке, наркотик, һ.б. Ә ошо үҙеңде иртә ҡартайтыусы йоғонтоларҙан ҡотолоу өсөн, моғайын да, иң тәүҙә насар уйҙан, заманса атама менән әйткәндә, негативтан ҡотолорға кәрәктер ул. Әгәр ҙә негативтан ҡотолһаң, кәйефең дә күтәренке булыр, шомланыуың юҡҡа сығыр, көнләшеүең сәм, һоҡланыу менән алмашыныр, кенә ҡыуыусың дуҫыңа әүерелер, ризығың татланыр, сылтырап аҡҡан шишмәләрҙән һыу эскең килер, спиртлы шешәләрҙе ғүмерлеккә оноторһоң, тәмәкене "сабаҡы" тип атарһың, кәйефең наркотик йоғонтоһонан түгел, яҡты уйыңдан күтәрелер һ.б.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Был программала шулай уҡ Хоҙай, тәбиғәт тарафынан кешегә һалынған көстө, энергияны уятыу, хәрәкәткә килтереү, рациональ файҙаланыу механизмы ла ята. Нимә генә тимә, беҙ үҙебеҙгә һалынған 3 процент интеллектуаль, 10 процент физик потенциалды ғына файҙаланып, 97 процент баш мейеһе, 90 процент тән энергияһы менән ҡәбергә китәбеҙ. Кешенең, милләттең, дәүләттең бына ниндәй потенциалы файҙаланылмай ҡала.**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## *Һуңғы ваҡыт Рәсәй Федерацияһында милләт-ара мөнәсәбәттәр ҡырҡыулығы хаҡында һүҙ алып баралар. Әйтәйек, бына беҙҙең Башҡортостанда бармы һуң ундай мәсьәлә ҡырҡыулығы?*

**(Башы 1-се биттә).**

***Ғәлим ХИСАМОВ, яҙыусы:*** Милләт-ара мөнәсәбәттә ниндәйҙер ҡытыршылыҡтар аша аңлашыуҙарҙы мин тәбиғи күренеш тип ҡарайым. Ҡапма-ҡаршылыҡһыҙ, ғөмүмән, үҫеш тә юҡ. Әммә глобаль кимәлдә илдәге милләттәр араһында дошманлыҡ тойғоһо тыуҙырырға теләүсе көстәр бар икән, бының аҫтында уларҙың алыҫҡа төбәлгән маҡсатын төҫмөрләп була. Ул көстәр беҙҙең республикала ла тотороҡһоҙлоҡто теләй. Аҙаҡ улар ошо һылтауҙы сәбәп итеп, милләттәрҙең хоҡуғын юҡҡа сығарыу йүнәлешендә эшмәкәрлек итмәкселәр. Беҙҙә милләт-ара ҡырҡыу проблемаларҙы уйлап сығарҙылар. Уларҙы уйлап сығарырға түгел, ә үҙенән-үҙе тыуған проблемаларҙы хәл итергә кәрәк. Дәүләт бит шуның өсөн төҙөлгән. Уның төп маҡсаты: кешене һәм милләтте яҡшы тормош менән тәьмин итеү. Ә беҙҙә нисек? Беҙҙә - киреһенсә. Яңыраҡ бер ҡыҙыҡ һәм ҡыҙғаныс статистикаға юлыҡтым: газ һәм нефть урғылып сыҡҡан илебеҙҙә һуңғы ун йыл эсендә газға хаҡ 550 процентҡа артҡан. Был нимә һуң? Ни өсөн беҙ ер аҫтынан бушҡа сыҡҡан газды үҙебеҙҙең халыҡҡа ошо рәүешле һатабыҙ һуң? Әгәр ҙә дәүләт үҙенең гражданларына йәшәргә бирмәй икән, ҡаршылыҡтар һәр саҡ буласаҡ. Баҡаның да башына баҫһаң, ҡысҡыра. Тик уларҙы милләт-ара мөнәсәбәт менән бутарға ярамай.

***Азамат ТАЖЕТДИНОВ, Рәсәй Федерацияһының халыҡ мәғарифы отличнигы:*** Халыҡтар араһындағы татыулыҡ быуаттар буйына килә. Быны берәү ҙә инҡар итә алмай. Шул уҡ ваҡытта Рәсәй империяһының башҡорттарға һәм башҡа халыҡтарға ҡарата мөнәсәбәтенең ыңғай яҡтары ла, кире яҡтары ла булған. Әммә нисек кенә булмаһын, властарҙың бындай мөнәсәбәте халыҡтарҙың үҙ-ара аңлашып йәшәүен юҡҡа сығара алмаған. Шуға күрә хәҙерге ваҡытта халыҡтар мөнәсәбәтендәге ниндәйҙер проблемаларҙы табырға тырышыуҙы һүҙ ҡуйыртыу тип кенә баһаларға була. Беҙгә артабан да милләттәр араһындағы татыулыҡты һаҡларға кәрәк. Беҙҙә ниндәйҙер экстремистарҙы табырға тырышалар. Имеш, Белорет районында йә ҡайҙалыр ниндәйҙер китап, ҡорал тапҡандар, әммә бындай имеш-мимештәр береһе лә факттар менән дәлилләнмәй.

***Фәрит ИШБУЛДИН, Ишембай районы Скворчиха ауылы ир-уҙаманы:*** Юҡ ундай милләт-ара мөнәсәбәттәр ҡырҡыулығы беҙҙә. Мин бына үҙем асылда урыҫтар көн күргән Скворчиха ауылында йәшәйем. Ҡасандыр бында Ҡолан тигән башҡорт ауылы булып, уның янында Пенза сауҙагәре Скворцова Татьяна тигән ҡатын килеп, Татьяновка ауылына нигеҙ һала. Скворчиха тигән ауыл атамаһы шул сауҙагәрҙең фамилияһынан килеп сыҡҡан. Бөгөн был ауылда күпселеген урыҫтар, украиндар, 8 - башҡорт, 2-шәр татар һәм үзбәк ғаиләләре йәшәй. Ошо ауылда күпме йәшәп, әле бер ҡасан да милләт-ара мөнәсәбәт мәсьәләһе буйынса ниндәйҙер ыҙғыш йә аңлашылмаусанлыҡ килеп сыҡҡаны булманы. Мин йыш ҡына ауыл сходтарында башҡорт милләте мәсьәләләрен күтәреп сығыш яһайым, бер ваҡытта ла мине туҡтатҡандары йә ҡаршы сыҡҡандары юҡ. Һәр хәлдә, ауылыбыҙҙа йәшәүсе башҡа милләт вәкилдәре беҙҙең проблемаларға аңлап ҡарай.

Дөрөҫөн әйткәндә, милләт-ара мөнәсәбәт беҙҙең республикала бик яҡшы тора. Әгәр ҙә кемдер был мәсьәләлә ҡырҡыулыҡ күрергә теләй икән, уның маҡсаты бөтөнләй икенсе нәмәләлер тип уйлайым. Әгәр ҙә ҡайҙалыр милләт-ара ҡырҡыулыҡ килеп тыуа икән, башҡа барлыҡ проблемаларға ла күҙ йомола. Юҡмы ни беҙҙә ҡырҡыу проблемалар: ауыл хужалығы емерек хәлдә, берәүҙәр әкиәттәге һымаҡ байыған саҡта, меңдәр хәйерселәнә, иман, әхлаҡ урынын аҡса яулай, үҫмерҙәр, мәктәп йәшендәге балалар эскелеккә, наркоманлыҡҡа, фәхишәлеккә бата бара һ.б. Бына бит ҡайҙа мәсьәлә ҡырҡыулығы!

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Кешелектең XX быуат аҙағы, XXI быуат башы донъя тарихында, моғайын, "ҡыҙғылтһары инҡилаптар" ("оранжевые революции") дәүере, тип теркәлер ул. Шуныһы аяныслы: бер дәүләттә йәшәүсе бер үк ҡәүем вәкилдәре бер-береһенә ҡул күтәрә, мылтыҡ тоҫҡай, йәнен ҡыя. Әммә быларҙың артында, асылда, донъяның бөтөнләй башҡа көстәре тора һәм быларҙың барыһы ла улар ҡорған сценарий буйынса башҡарыла. Спектакль "режиссерҙары" ның төп ҡоралы - мәғлүмәт технологиялары. Улар, ошондай ҡоралға таянып, миллионлаған кешеләрҙең аңы менән манипуляция яһай. Белгестәр фаразлауынса, әле Египетта башланған янъялдар уты, Африканың башҡа мосолман дәүләттәренә таралып, Ҡыҙыл диңгеҙ аша Ғәрәп илдәренә, аҙаҡ Урта Азияға килеп етәсәк икән. Илебеҙ сәйәсмәндәре "хәнәүәт инҡилаптар"ҙың барыһында ла Америка Ҡушма Штаттарын ғәйепләй. Улар фекеренсә, Ҡырғыҙстанда барған күңелһеҙ хәлдәр ҙә был державаның махсус хеҙмәттәре тарафынан ойошторолған. Һөҙөмтәһен үҙегеҙ беләһегеҙ: был дәүләттәге күңелһеҙ ваҡиғаларҙан һуң ярты миллиондан ашыу ҡырғыҙ милләте вәкилдәре үҙ илдәрен ташлап китергә мәжбүр булды. Мәскәү урамдарында ғына ла һәр өсөнсө кеше ҡырғыҙ милләте вәкиле. Шулай булғас, хәҙерге ваҡытта күп милләт вәкилдәре һыйышып татыу йәшәгән беҙҙең республикала ла кемдер берәү милләт-ара мөнәсәбәт ҡырҡыулығын күрергә теләй һәм ошо хаҡта һүҙ ҡуйырта икән, уларҙың кемдең тирмәненә һыу ҡойғаны көн кеүек асыҡ.**

**Әмир ҒҮМӘРОВ яҙып алды.**




## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Парламенты үҙенең сираттағы ултырышында "БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай тураһында"ғы республика законына үҙгәрештәр индерҙе. Уның буйынса хәҙер даими нигеҙҙә эшләүсе депутаттар һаны 17 кеше тәшкил итәсәк. Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай рәйесенең урынбаҫары ла хәҙер икәү буласаҡ.

✓Татарстандың Зәй районында башҡорт мәҙәниәте көндәре булып үтте. Унда Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе урынбаҫары Румил Аҙнабаев ҡатнашты. Нефтекама ҡалаһының "Ҡәрҙәштәр" башҡорт ансамбле концерт программаһы менән сығыш яһаны. З. Биишева исемендәге "Китап" нәшриәте башҡорт телендә китаптар һатыу ойошторҙо. Тантаналы өлөштән һуң "Хәҙерге заман шарттарында туған телде һәм мәҙәниәтте һаҡлау мәсьәләләре" тигән темаға арналған түңәрәк ҡор һөйләшеүе булды.

✓РФ Пенсия фондының Башҡортостан бүлексәһендә 2010 йылдың 1 октябренән 2010 йылдың 31 декабренә тиклем тыуған балалар өсөн алынған әсәлек капиталы сертификаты эйәләренә бер тапҡыр бирелә торған 12-шәр мең һум аҡса - пособие түләү башланды. Ғаризалар 31 мартҡа тиклем ҡабул ителә. Ғариза биргәндә паспорт, әсәлек капиталы сертификаты, аҡса күсерелә торған банк реквизиттары кәрәк була. Был бер тапҡыр бирелә торған пособие алыуға ике йыл эсендә 134123 кеше ғариза биргән, шуларҙың 133400-ө уны алған да инде. Әсәлек капиталы тураһында закон сыҡҡандан, йәғни 2007 йылдан бирле Башҡортостанда барлығы 98 мең әсәлек капиталы сертификаты бирелгән. Уның күләме быйыл 365698 һум тәшкил итә.

✓"Хәүефһеҙ транспорт" операцияһы ваҡытында наркоконтроль хеҙмәткәрҙәре врач-наркологтар менән берлектә 180 водителде тикшерҙе. Уларҙың 9-ының эш ваҡытында наркотик иҫереү хәлендә булыуы асыҡланды. Мәҫәлән, Өфө таксисы дезоморфин тәьҫире аҫтында кешеләрҙе хеҙмәтләндергән. Октябрьский, Бәләбәй, Ишембай һәм Сибай ҡалаларынан килгән таксистар ҙа наркотиктар менән бәйле булған. Ғөмүмән, граждандарға юлда йөрөгәндә иғтибарлы булырға һәм водителдәрҙә алкоголь йә наркотик иҫереклеген шәйләгәндә 8-800-347-20-30 номерын йыйып, наркоконтроль хеҙмәтенә хәбәр итергә кәңәш бирәбеҙ. Быltыр наркотик иҫереү хәлендә руль артына ултырған 107 водитель яуаплылыҡҡа тарттырылған.

АЙЫҒАЙЫҠ, ЙӘМӘҒӘТ!

# СӘЛӘМӘТЛЕК ДӘРЕСТӘРЕНДӘ...

## өйрәнергә була айыҡлыҡҡа

**Тиҙҙән Өфөгә яңы дәреслектәр киләсәген ишеттегеҙме әле? Юҡмы? Улайһа, бер нисә минутығыҙҙы бүлеп, ошо мәҡәләне сабыр ғына уҡып сығығыҙ.**

Эйе, мартта Башҡортостанға яңы дәреслектәр киләсәк. Улар мәктәптәрҙең 1-11-се синыфтары өсөн тәғәйенләнәсәк. "Был предмет буйынса дәреслектәр Рәсәйҙең иң юғары педагогик наградаһына - Януш Корчак миҙалына лайыҡ булды, - ти профессор Александр Маюров. - Был предметты һәр уҡытыусы уҡыта ала, әммә ул эсмәҫкә һәм тәмәке тартмаҫҡа тейеш". Әлеге ваҡытта сәләмәтлек мәҙәниәте дәрестәре Ҡаҙағстанда, Литвала, Ярославль өлкәһендә уҡытыу процесына индерелгән дә инде. Дәреслектәр немец, инглиз телдәренә тәржемә ителә. Ә инде 2-3 мартта баш ҡалала үтәсәк өс көнлөк семинарға килеүселәр, моғайын да, дәреслектең тәүге биттәрен асасаҡ һәм был насар ғәҙәттәр менән хушлашырға үҙендә көс табасаҡ.

БР Мәғариф, Йәштәр сәйәсәте һәм спорт министрлыҡтары, Өфө ҡала округы хакимиәте, Халыҡ-ара Айыҡлыҡ академияһы, "Айыҡ Башҡортостан" төбәк йәмәғәт ойошмаһы ойошторған лекцияларҙа һәм практик дәрестәрҙә 300-ҙән ашыу кешенең: педагогтарҙың, социаль хеҙмәткәрҙәрҙең, психологтарҙың, йәмәғәт ойошмалары етәкселәренең, мәҙәниәт һәм спорт, медицина хеҙмәткәрҙәренең, һ.б. ҡатнашыуы көтөлә. Йыйылыусылар алдында Халыҡ-ара айыҡлыҡ академияһы президенты, РФ Дәүләт Думаһы эксперты, Наркотикһыҙ тәрбиә интернациональ берлеге вице-президенты, педагогия фәндәре докторы, профессор Александр Николаевич Маюров менән Халыҡ-ара айыҡлыҡ академияһының вице-президенты, Халыҡ айыҡлығы өсөн көрәш берлеге рәйесе, профессор, хәҙер инде республика халҡына яҡшы таныш Владимир Георгиевич Жданов сығыш яһаясаҡ.

"Наркотиклаштырыу менән көрәш мәсьәләһе - ул педагогик та, психологик та, юридик та, иҡтисади ҙа мәсьәлә түгел, тәү сиратта, ул сәйәси мәсьәлә, - ти Александр Маюров. - Был проблеманы хәл итеү өсөн ил, төбәк етәкселегенең, муниципаль властың сәйәси ихтыяры кәрәк. Хәҙер ил етәкселегенең бындай ихтыяры бар. Барлыҡ министрлыҡтар һәм ведомстволар, Дәүләт Думаһы ошо проблеманы хәл итеүгә йөҙ борған. Әммә күптәр уны ниҙән башларға белмәй. Бынан тиҫтәләрсә йылдар элек ҡулланылған ысулдарға мөрәжәғәт итеп, ҡабат шуларҙы файҙалана башлайҙар. Шул уҡ ваҡытта бөгөн донъяла яңы юлдар, яңы ысулдар, яңы асыштар бар. Беҙ Өфөгә төрлө илдәрҙә ыңғай һөҙөмтә биргән яңы донъяуи технологияларҙы килтерәсәкбеҙ".

Уҙған килгәнендә, Нефтселәр мәҙәниәт һарайында сығыш яһағанында Владимир Жданов алкоголдең һәм тәмәке тартыуҙың киң таралыуына уларҙы теләгән урындан теләгән ваҡытта алыу мөмкинлеге һәм уларҙы ҡулланыусыға ҡарата йәмғиәттә йәшәп килгән психологик ыңғай ҡараш йоғонто яһай, тип белдергәйне. "Беҙҙең бурыс, - ти А. Маюров, - ошо ҡараштны емереү. Бының өсөн системалы эш алып барылырға тейеш. Әгәр беҙ һатыуҙы сикләмәйенсә, бары тик профилактика менән генә шөғөлләнһәк, эшебеҙҙең һөҙөмтәһе булмаясаҡ. Тәү сиратта сикләүҙәр, закон сығарыу инициативаһы һәм профилактика алып барылырға тейеш. Быны беҙ "закон плюс баш тартыу" тип атайбыҙ. Проблеманы ғәҙәттәгесә түгел, икенсе төрлө хәл итергә кәрәк. Әле йәмғиәт шайтан таяғының өҫкө яғын ғына яндыра, ә тамырҙарын зыянламай. Республикала бик күп ыңғай миҫалдар бар, таянырға терәк, был проблемаға ҡыҙыҡлы ҡараш бар, әммә туҡтап ҡалмай, юлды артабан дауам итергә кәрәк. Шуға ла семинарҙың төп маҡсаты - өфөләләргә икенсе аҙымды яһауҙа ярҙам итеү. Унан кешеләр ыңғай яҡҡа үҙгәреп сыға".

Тормошоғоҙҙо тамырынан үҙгәртәсәк семинарҙа нимәләр һөйләнгәнен гәзит-журналдар, радио-телевидение аша йәки таныш-тоноштан ишеткәнсе, килеп, үҙ күҙҙәрең менән күреп, үҙ ҡолаҡтарың менән ишетеү мең тапҡыр яҡшыраҡ. **Шуға ла теләүселәр В.М. Комаров исемендәге Өфө ҡала балалар ижады йортоноң (Мостай Кәрим (Социалистик) урамы, 69) ҙур концерт залында үтәсәк семинарға рәхим итһен.**

**Ә 4 мартта Нефтселәр мәҙәниәт һарайында (Ленин урамы, 50) В.Г. Ждановтың "Алкоголь һәм тәмәке тураһында иҫ китерлек хәҡиҡәт" тигән лекция-доклады була. Башлана киске сәғәт 6-ла. Сығыштың он-лайн Интернет-трансляцияһын http://yatv.ru/py-net адресы буйынса ҡарарға мөмкин.**

### ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Республикала иғлан ителгән "Айыҡ ауыл" конкурсында ҡатнашырға теләк белдереүселәр арта бара. Әлегәсә ни бары өс: Белорет районынан - Мөхәммәт, Ғафури районынан - Сәйетбаба, Хәйбулла районынан Йәнтеш ауылдары ғына ғариза бирһә, бөгөнгә уларға тағы ла алты ауыл ҡушылды: Йәрмәкәй районының Ҡолбай, Күпсәнәй, Рәтамаҡ, Спартак ауылдары, шул уҡ Әбйәлил районының Ҡырҙас һәм Әхмәт ауылдары, Учалы районының Һөләймән ауылы. Ғаризалар биреү 1 апрелгә тиклем дауам итә.**

ИҒТИБАР!

# АЙЫҠ ТУЙ СЦЕНАРИЙЫ ЯҘЫП,

## конкурсыбыҙҙа ҡатнаш!

**Һәр беребеҙ ошо айыҡлыҡ хәрәкәтенә хуплауҙарыбыҙ, теләктәшлек күрһәтеүебеҙ, анығ эшебеҙ менән ярҙам итәйек. Айыҡлыҡҡа тәүге юл -йәштәребеҙҙең туйын эскеһеҙ үткәреү. Бынығын һәр ата-әсә, һәр өйләнешеүсе йәштәр һис бер ауырлыҡһыҙ тормошҡа ашыра ала. Үҙен "Иң айыҡ коллектив" тип таныҡҡан "Киске Өфө" гәзите "Айыҡ туй сценарийы"на конкурс иғлан итте. Сценарий халҡыбыҙҙың матур туй йолаларына нигеҙләнеп, заманса уйындар, йыр-бейеү, күңелле тамашалар менән үрелеп барырға тейеш. Конкурста ҡатнаша алырҙай сценарийҙар гәзитебеҙ биттәрендә баҫыласаҡ. Ә иң яҡшы авторҙар иҫтәлекле бүләктәргә лайыҡ буласаҡ. Түбәндә айыҡ туй үткәреүсе йәштәребеҙ менән таныштырабыҙ, артабан да таныштыра барасаҡбыҙ.**

**Зилә менән Данир Йәғәфәровтар** тәүге ғаилә байрамдары - туй тантаналарын хәрәм эсемлекһеҙ уҙғара. "Мин үҙемдең туйымда хәрәм эсемлек булмаҫын алдан уҡ белә, был турала туғандарыма ла әйтә килә инем. Бәлки, бының менән килешмәүселәр ҙә булғандыр, шулай ҙа үҙ һүҙендә нығ торһаң, дөрөҫ аңлата белһәң, һүҙеңде һүҙ итергә була, - ти ғаилә башлығы Данир. - Бөгөн бит бөтә йәштәр ҙә эскеһеҙ байрамдарҙы ҡабул итә һәм ҡымыҙ, һуттар эсеп тә матур байрам итә белә. Шулай уҡ бөгөн күп йәштәр туйҙарын эскеһеҙ уҙғарырға теләй, уларға ололарҙың хуплау һүҙе һәм ярҙамы ғына кәрәк ".



Былтыр "Киске Өфө" журналисы **Динара Яҡшыбаева** менән Бөрйән районы Иҫке Монасип ауылы егете **Данил Ҡотлобаев** сәстәрен сәскә бәйләне. Улар ҙа беренсе ғаилә байрамын хәрәм эсемлектәрһеҙ, тик хәләл ризыҡтар менән генә уҙғарҙы. Байрам табынын халҡыбыҙҙың милли эсемлектәре ҡымыҙ менән буҙа һәм башҡа милли ризыҡтарыбыҙ биҙәне. "Кеше ғүмерендәге иң шатлыҡлы көн - парҙар ҡауышҡан мәлде хәрәм эсемлектәрһеҙ билдәләү - үҙе үк матур тормошҡа нигеҙ ул", - ти Ҡотлобаевтар.



## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Өфө яғыулыҡ-энергетика колледжының Баймаҡтағы филиалында 35 урынлыҡ яңы ятаҡ файҙаланыуға тапшырылды. Әле был филиалда 200 студент - көндөҙгө, 120 студент ситтән тороп уҡый. Филиал энергетика тармағы, газ хужалыҡтары өсөн белгестәр әҙерләй. Бында студенттарҙың уҡыуы һәм йәшәүе өсөн бар шарттар ҙа тыуҙырылған.

✓Мәҙәниәт һәм сәнғәт өлкәһендә ижади коллективтарға ярҙам итеү йәһәтенән Башҡортостан Республикаһы Президенты гранты булдырылғайны. Әле уға 103 ғариза ҡабул ителгән. Шуларҙың 43-ө - коллективтарҙыҡы. Мәҙәниәт министрлығында ғаризаларҙы ҡарай башлағандар, март аҙағында грант яулаусыларҙың исемдәре билдәле булыр, моғайын. Йыл һайын 100-әр мең һумлыҡ Президент грантына 25 кеше һәм 300-әр мең һумлыҡ грантҡа 5 коллектив лайыҡ була.

✓Рәсәйҙә сираттағы декларация кампанияһы старт алды. Федераль һалым хеҙмәтенең БР буйынса идаралығы хәбәр итеүенсә, 30 апрелгә тиклем һәр граждан алған килеме тураһында декларация бирергә бурыслы. Декларацияһын ваҡытында бирмәгән граждандар һалымы суммаһының биш проценты күләмендә штрафҡа тарттырыла ала.

✓Өфө Ҡала мәҙәниәт һарайында 1 мартта "XX быуаттың иң яҡшы йырҙары" тигән театрлаштырылған хәйриә концерты үтәсәк. Уны Ҡаланы үҫтереүҙең йәмәғәт фонды ойоштора. Белешмәләр менән 282-99-97 телефонына шылтыратырға була.

✓Был ял көндәрендә өфөләләргә ауыл хужалығы йәрминкәләрендә ит һатып алыу мөмкинлеге бар. Йәрминкәләр Дим районының "Алтын" сауҙа комплексы майҙанында, Калинин районында "Ауыл хужалығы йәрминкәһе" комплексы майҙанында, Киров районында "Аврора" кинотеатры янында, Октябрь районында Спорт һарайы янында ойоштороласаҡ. Шулай уҡ 26 февралдә Тимер юлсылар мәҙәниәт һарайында (К. Маркс урамы, 50) урындағы етештереүселәрҙең ғаилә өсөн тауарҙар йәрминкәһе үтә.

✓Былтыр республиканың бала табыу йорттарында балаларынан баш тартыусылар һаны кәмегән. 2009 йылда 158 әсә балаһынан баш тартһа, былтыр бындай осраҡ 97 булған.

✓ *Ришат Муллагилдин тарихҡа әйләнеп ҡайтып, Өфө ҡалаһының бик уңайлы урында урынлашыуын, уның проектын тәбиғәт менән бик йәтеш кенә яраштырып булыуын билдәләне.*



ТӨРЛӨҺӨНӘН

# АҠЫЛЛЫЛАРҘЫ... ситкә ебәрмәйек

**Был аҙнала "Башинформ" мәғлүмәт агентлығында заманса урбанистика мәсьәләләре һәм Башҡортостанда пилот проекттарҙы тормошҡа ашырыу буйынса матбуғат конференцияһы үтте. Унда Мәскәү архитектура институты профессоры, Рәсәй йәмәғәт палатаһы ағзаһы Вячеслав Глазычев һәм БР Президенты кәңәшсеһе, Башҡортостандың Япониялағы рәсми вәкиле Ришат Муллагилдин ҡатнашты.**

Ришат Муллагилдин әйтеүенсә, Башҡортостанда ҡала төҙөлөшө һәм архитектураға һәр ваҡыт етди иғтибар бүленә. Республикала был өлкәлә эшләрҙәй тәжрибәле белгестәр ҙә күп.

Вячеслав Глазычев фекеренсә, урбанистика мәсьәләләрендә кеше капиталы тураһында гел иҫтә тотоу мөһим: "Беҙҙең илдә аҡыллы, белемле кешеләр күп. Улар сит илдәргә йөшәргә, эшләргә сығып китмәһен өсөн оптималь йәшәү шарттары тыуҙырырға, инфраструктураны үҫтерергә кәрәк".

Профессор шулай уҡ ҡала төҙөлөшөндәге тенденцияға ла иғтибар бирҙе: "Ярты быуат элек архитекторҙар, ҡала кеше өсөн кәрәк, тигән фекерҙә ине. Хәҙер күптәр был ҡараштың дөрөҫ түгеллеген аңлай. Кешенең тәбиғәт менән бәйләнеше йәйға һалынһа ғына ҡала үҫешәсәк".

Вячеслав Глазычев ҡала менән тулыһынса таныш булмауы, әммә уға "Көньяҡ" микрорайонының оҡшауы тураһында белдерҙе: "Әлбиттә, был биләмәлә етешһеҙлектәр ҙә бар, ләкин дөйөм алғанда ул миндә ыңғай тәьҫир ҡалдырҙы".

Ришат Муллагилдин тарихҡа әйләнеп ҡайтып, Өфө ҡалаһының бик уңайлы урында урынлашыуын, уның проектын тәбиғәт менән бик йәтеш кенә яраштырып булыуын билдәләне.

# АТА-ӘСӘ ЯУАПҺЫҘ, ә балалар ыҙа сигә

**Быltыр Башҡортостанда 68 бала үҙ-үҙенә ҡул һалған. Бындай хәлдәр Белорет, Яңауыл, Әбйәлил, Бәләбәй, Ишембай һәм Ҡариҙел райондарында йышыраҡ күҙәтелгән. Был турала БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай ултырышында БР Бала хоҡуҡтары буйынса вәкил Лилиә Ғүмәрова белдерҙе. Билдәләнеүенсә, суицидтарҙың төп сәбәбе - күберәк ата-әсәләр һәм тиҫтерҙәре менән конфликттар, шулай уҡ яуапһыҙ мөхәббәт.**

Башҡортостанда янғындарҙа һәм юл һәләкәттәрендә һәләк булған балалар һаны ла байтаҡ. Быltыр янғын 17 баланың ғүмерен өҙгән. Ә юл һәләкәттәрендә 18 бала үлгән, 429 бала йәрәхәтләнгән.

Балаларға ҡарата ҡылынған енәйәттәрҙең артыуы ла хәүеф тыуҙыра. Был йәһәттән Благовещен, Дәүләкән, Яңауыл, Әбйәлил, Бишбүләк, Борай, Сәрлетамаҡ райондарында хәлдәр ҡатмарлыраҡ. Быltыр ғына республикала балаларға ҡарата 2,3 мең енәйәт ҡылынған. Шулар араһында 38 көсләү, 4 язалау, 26 яны тыуған балаларға ҡарата енәйәт теркәлгән. Йышыраҡ балалар үҙ ғаиләләрендә ыҙа сигеүсән.

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ИҢ ЯҠШЫ УҠЫТЫУСЫ...

## Дим районында



**Өфөнөң Ҡала мәҙәниәт һарайында "Башҡортостандың баш ҡалаһы йыл уҡытыусыһы - 2011" конкурсының йомғаҡлау тантанаһы үтте. Уҡытыусы һөнәренең абруйын күтәреү, һәләтле уҡытыусыларҙы асыҡлау, уларҙың алдынғы тәжрибәһен дөйөмләштереү һәм таратыу маҡсатында үткәрелгән был сарала быйыл да иң яҡшы уҡытыусылар билдәләнде.**

Конкурста баш ҡала мәктәптәрендә балаларға төрлө фәндәрҙән белем биреүсе 55 уҡытыусы ҡатнашты. "Быйылғы конкурста 55 һаны бик символик мәғәнәгә эйә булды, - тине ҡотлау һүҙендә Өфө ҡала округы хакимиәтенең мәғариф идаралығы етәксеһе Азамат Сәйфуллин да. - Йылдан-йыл конкурстың кимәле юғарыраҡ күтәрелә бара. Төрлөмо үҙе бөгөн һеҙгә ике "бишле" билдәһе ҡуя: береһе - һәләт, икенсеһе оҫталыҡ өсөн". Ысынлап та, баһалау комиссияһы ағзалары әйтеүенсә, инновацион педагогик проекттарҙы яҡлау ҙа, дәрестәр һәм класс сәғәттәре лә баш ҡала уҡытыусыларының һәләтле лә, үҙ эшенең оҫтаһы ла булыуын раҫлаған.

Был конкурс сиктәрендә туған тел уҡытыусылары бәйгеһе лә бик ҡыҙыу барҙы. Баһалау комиссияһы башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса финалға сыҡҡан 5 уҡытыусы араһынан Дим районының М. Шайморатов исемендәге 104-се мәктәп уҡытыусыһы Найлә Буранғолованы еңеүсе тип билдәләне. Утыҙ йыл ғүмерен балаларға бағышлаған Найлә Дамир ҡыҙы өсөн был һөнәр күптән инде тормош рәүешенә әйләнгән.

- Уҡытыусы бер ҡасан да белемен камиллаштырыуҙан туҡтап ҡалырға тейеш түгел. Бөгөнгө уҡыусыға традицион технологиялар менән генә белем биреү мөмкин түгел, һәр ваҡыт заман ҡуйған талаптарҙы, мәғариф өлкәһендәге яңы стандарттарҙы иҫәпкә алырға кәрәк. Ошо йәһәттән тәжрибә туплау өсөн был конкурстың әһәмиәте ҙур. Ғөмүмән, ниндәйҙер бәйгелә ҡатнашыу кешене үҙенең кимәленән тағы ла юғарыраҡҡа күтәрә, - ти мөғаллимә.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Илдә "Уҡытыусы йылы" тамамланһа ла, уҡытыусы быуаты һәр осорҙа ла дауам итә. Донъяла кеше йәшәй икән, был һөнәр ҙә мәңге йәшәйәсәк. Изгелек һәм мәғрифәт яҡтылығын таратыусы уҡытыусыларыбыҙ бар саҡта "Йыл уҡытыусыһы" кеүек конкурстар ҙа үҙенең әһәмиәтен һәм баһаһын юғалтмаясаҡ.**

**Ләйсән ДАЯНОВА.**

# БАТЫРҘАР РУХЫНА АРНАП...

## хәтирәләр яңыртыла

**Ватанды һаҡлаусылар көнөндә баш ҡаланың Еңеү паркында Мәңгелек утҡа һәм Советтар Союзы Геройҙары Александр Матросов һәм Миңлегәли Ғөбәйҙуллин һәйкәленә сәскәләр һалыу тантанаһы булды. Сарала Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов һәм БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай рәйесе Константин Толкачев та ҡатнашты.**

Тантанаға Бөйөк Ватан һуғышы, хеҙмәт һәм Ҡоралды Көстәр, локаль һуғыштар ветерандары, ҡала округы хакимиәте етәкселеге, кадеттар, курсанттар, йәштәр һәм йәмәғәт ойошмалары вәкилдәре саҡырылғайны.

Башҡортостан халҡы өсөн хәрби хеҙмәт элек-электән оло мәртәбә һаналған. 1812 йылғы Бөйөк Ватан һуғышында хәрби бурысын үтәгән 24 башҡорт полкы тураһындағы мәғлүмәт халыҡ ижадында ғына түгел, рәсми документтарҙа ла сағылыш тапҡан. Немец баҫҡынсыларына ҡаршы һуғышҡа Башҡортостан 700 мең һуғышсыһын оҙатҡан, 309662 кеше һуғыш яланынан кире әйләнеп ҡайтмаған. Еңеү паркындағы гранит плитәләр ошо хаҡта һөйләй. Республика территорияһында 20 берләшмә һәм часть формалашҡан һәм үҙенең хәрби походын башлаған. 500 мең кеше орден һәм миҙал менән бүләкләнгән, 278-е Советтар Союзы Геройы, 37-һе Дан орденының тулы кавалеры исеменә лайыҡ булған. Летчик-штурмлаусы Муса Гәрәев ике тапҡыр Советтар Союзы Геройы исемен алған. Александр Матросов та Тыуған илгә һөйөү һәм уның өсөн ғүмеренде фиҙа ҡылырға әҙерлек символы булып тора.

Геройлыҡ традицияларын Афғанстанда интернациональ бурысын үтәүселәр ҙә, XX быуаттың 90-сы йылдарында СССР-ҙың элекке территорияларында килеп тыуған локаль конфликттарҙы туҡтатыуҙа ҡатнашыусылар ҙа дауам итә. Республикабыҙҙың 14 мең уланы афған һуғышында, 14 меңдән ашыуы Төньяҡ Кавказдағы операцияларҙа ҡатнаша. Хәрби бурысын намыҫ менән үтәгән өсөн афған һуғышында - 1599, локаль һуғыштарҙа ҡатнашыусы 1254 кеше дәүләт наградалары менән бүләкләнгән. Бөгөн дә Рәсәй армияһы сафтарында Башҡортостан егеттәре яҡшы хеҙмәт итә.



# Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфөлә милеккә хоҡуҡты дәүләт теркәүенә һәм уның менән алыш-биреш итеүгә документтар ҡабул итеүсе өҫтәмә пункт асылды. Ул Ленин районының 5/3 йортонда урынлашҡан. Ҡабул итеүгә СССР-ҙың 50 йыллығы урамының 30/5А йортонда 4-се залда 102-се тәҙрәлә алдан яҙылырға кәрәк. Электрон почта аша яҙылырға уйлаһағыҙ, Росреестрҙың БР буйынса идаралығы сайтына инегеҙ:
www.to02.rosreestr.ru

✓Закон тарафынан тыйылыуға ҡарамаҫтан, бөгөн баш ҡалала 73 ҡомарлы уйын клубы эшләүен дауам итә. Урындағы власть һәм хоҡуҡ һаҡлау органдары был клубтар хужаларына ҡаршы ике йыл көрәш алып бара. Быltыр ғына Өфөләге йөшерен клубтарҙа 1228 уйын автоматы, дүрт рулетка һәм 22 кәрт өҫтәле тартып алынды. Әммә был легаль булмаған бизнес хужаларын әлеге тыйыу саралары ғына туҡтата алмай. "Баш ҡаланың көс структураларына был көрәшкә тағы ла ныҡышмалыраҡ тотонорға кәрәк", тине был мәсьәлә буйынса хәүефләнеүен белдереп баш ҡала округы хакимиәте башлығы Павел Качкаев.

✓"Роспотребнадзор"ҙың Башҡортостан буйынса идаралығы етәксеһе Роберт Такаев әйтеүенсә, быltыр республикала 727725 инфекция ауырыуҙары осрағы теркәлгән һәм был 2009 йыл менән сағыштырғанда 40 процентҡа аҙыраҡ тәшкил иткән. Был сирҙәрҙән 94 проценты ОРВИ һәм грипҡа тура килә.

✓Быltыр "Роспотребнадзор"ҙың Башҡортостан идаралығы хеҙмәткәрҙәре тарафынан 7799 тикшереү үткәрелгән. Һөҙөмтәлә1455 партия сифатһыҙ һәм һаулыҡ өсөн ҡурҡыныс сеймал һәм аҙыҡ-түлек һатыуҙан алынған. Шулай уҡ аҙыҡ-түлек булмаған 3809 тауар ҙа әйләнештән алынған. Закон боҙған өсөн һалынған штраф күләме 17,5 млн һумлыҡ булған.

✓Баш ҡала округы хакимиәте башлығы Павел Качкаев 13-14 апрелдә Өфөлә "Евро-Уфа-Азия-2011" Йәштәр модаһы форумы үткәреү тураһында ҡарар ҡабул итте. Маҡсаты - халыҡҡа көнкүреш хеҙмәте күрһәтеүҙең сифатын күтәреү, йәш дизайнерҙар һәм стилистар әҙерләү, шулай уҡ кесе һәм урта эшҡыуарлыҡты артабан үҫтереүгә булышлыҡ итеү.

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

**Былтыр Өфөлә айныҡтыҡстар ябылғас, эскеселәр еңел һулап ҡуйғандыр, моғайын. Ни тиһәң дә, был учреждениеға әлегеү улар файҙаһына түгел ине бит. Күптәрҙең айныҡтыҡста эшләүсе милиция хеҙмәткәрҙәренә асыу, хатта нәфрәт тойғоһо йөрөтөүе лә сер түгел ине. Шулай инде, эскесе бер ваҡытта ла ғәйепте үҙенән эҙләмәй бит, шуға ла уның айныҡтыҡсҡа эләгеүендә лә фәҡәт милиция хеҙмәктәрҙәре "ғәйепле" булып ҡала килде.**

**Әммә иҫеректәр араһында ла төрлө кеше була. Эскелек һаҙлығына батҡан өмөтһөҙ алкаштар өсөн айныҡтыҡс өйрәнелгән урын булһа ла, әллә ниҙә бер дуҫ-иштәре менән осрашып, йә тыуған көн, йә улы тыуыуын билдәләп, өйөнә ҡайтып барған ир-егет йышыраҡ эләгә ине буғай айныҡтыҡсҡа. Бындай күренештең үҙ логикаһы булғандыр, шәйт, ләкин тап ана шундай аңын һәм оятын юғалтып бөтмәгәндәр өсөн хурлыҡ ине ул учреждение. Беренсенән, был турала иртәгәһенә мотлаҡ уның эш урынына хәбәр ителә; икенсенән, ғаиләлә дауыл ҡуба; өсөнсөнән, әлеге оятын юғалтып бөтмәгән кешене выжданы ғазаплай. Ни тиһәң дә, инәнән тыума яланғас көйө ҡаҡ һикелә төн сыҡ әле! Өҫтәүенә, айныҡтыҡстан мотлаҡ аҡса түләгәс кенә сығарып ебәрәләр ине. Һуңғы ваҡытта был сумма 600 һумға барып баҫҡайны.**

**Булһа, булып ҡуя икән тормошобоҙҙа мөғжизәләр ҙә. Тамаҡ сылатырға яратыусыларҙың ҡыуанысына күрә, былтыр май айында ошо айныҡтыҡстар ябылып, улар урынына Өфөлә иҫеректәр өсөн Социаль-реабилитация үҙәге эшләй башланы. Ошо учреждение, уның эшмәкәрлек йүнәлештәре хаҡында хәбәрсебеҙ Үҙәктең директоры Абдразаҡ МУСИН менән осрашып һөйләште.**

# ИҪЕРЕКТӘР ҘӘ...

## әҙәм балаһы, имеш

**▸ Абдразаҡ Әбделәхәт улы, нилектән шулай ҡапыл ғына "эсергә әүәҫ контингент"ҡа ҡарата мөнәсәбәт үҙгәреп китте? Ай-һай, бында бит һеҙҙең ял йортондағы кеүек шарттар: таҙа, йылы, һәр ерҙә тәртип, яғымлы персонал... Иң ғәжәпләндергәне - бында бушлай ҡунып сығыу мөмкинлеге!**

- Әлегә, эйе, бушлай. Элек Өфөлә биш айныҡтыҡс эшләй ине һәм унда көнөнә 100-ҙән ашыу, ә байрам мәлдәрендә 150-ләп кеше килтерелә ине. РФ Эске эштәр министрлығы буйынса штат ҡыҫҡартылыу сәбәпле, айныҡтыҡстарҙы ябырға ҡарар ителде. Ләкин проблема ҡалды: иҫереп, ҡазаға осраусылар, уларҙың енәйәт объекты йәки субъектына әйләнеү ихтималлығы, ҡышҡы һыуыҡтарҙа ҡар өҫтөндә йоҡлап ятып, туңып үлеү, аяҡ-ҡулдарын өшөтөү кеүек күңелһеҙ күренештәр көн дә ҡабатланып тора бит. Шуға бәйле бик күп сигналдар алдыҡ, телефондан шылтыратыусылар ҙа байтаҡ булды. Иҫерек булһалар ҙа тере әҙәмдәр бит, уларҙың ғүмерен, сәләмәтлеген һаҡлап ҡалыу өсөн нимәлер эшләргә, элекке айныҡтыҡстарға альтернатива табыу кәрәк ине. Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Павел Качкаев "Алкоголь тәьҫирендәге иҫеректәр өсөн социаль-реабилитация үҙәге" тип аталған яңы муниципаль учреждение булдырыу тураһында ҡарар ҡабул итте. Әйткәндәй, Павел Рюрикович ниндәй мәсьәлә менән мөрәжәғәт итһәң дә, аңлап, оператив саралар күрергә әҙер тора.

Учреждение ике бүлексәнән тора: әле эшләй башлағаны - көньяҡ бүлексә К. Маркс урамы, 51/1-се йортта, йәғни Ленин районы эске эштәр бүлеге бинаһында. Ул Киров, Ленин, Дим һәм Совет районы граждандарын хеҙмәтләндерә. Ә инде Октябрь, Орджоникидзе һәм Калинин райондары өсөн ремонттан һуң төньяҡ бүлексә Еңеү урамы, 3-сө йорт адресы буйынса эш башлаясаҡ.



Үҙәк директоры Абдразаҡ Мусин палатаны күрһәтә.
Евгений Соколов фотоһы.

**▸ Яңы учреждение элекке айныҡтыҡстарҙан нимәһе менән айырыла?**

-Беҙ дауалау эшенә Рәсәй һаулыҡ һаҡлауҙы күҙәтеү хеҙмәтенең Башҡортостан идаралығынан сертификат алғанбыҙ. Фельдшерҙар, санитарҙарыбыҙ бар. Медицина хеҙмәткәрҙәре үҙәккә килтерелгән иҫеректе ҡабул итә, дөйөм сәләмәтлек торошон тикшерә һәм, әлбиттә, алкотестер ярҙамында уның ни ҡәҙәре иҫерек хәлдә булыуын билдәләй. Әгәр унда алкоголь миҡдары 1,5 промилле (йәғни ярты литр араҡы эскән, тигән һүҙ) булһа, иҫереккә үҙәктә ҡалып, ҡунып ҡайтырға тәҡдим ителә. Риза булһа, шаһиттар һәм видеокамера күҙәтеүе аҫтында уның ҡиммәтле әйберҙәре, аҡсаһы, документтары сейфҡа бикләнә. Юғиһә, ошо ерлектә иртәгәһенә бәхәсле мәсьәләләр килеп тыуыуы бик ихтимал бит. Ә инде иҫерек бында ҡуныуҙан баш тартһа, беҙҙең автотранспорт өсөн 63 һум аҡса түләй ҙә уны өйөнә алып барып ҡуялар. Әйткәндәй, ҡунып сығыу бушлай, ләкин иҫерек бысранған кейемдәрен йыуыу, таҙартыу, үтекләү өсөн, шулай уҡ душ ҡойоноу өсөн арзан ғына хаҡ түләп, ошо хеҙмәттәрҙән файҙалана ала.

Элек айныҡтыҡс хеҙмәткәрҙәренә урынлы-урынһыҙ дәғүәләр күп була ине, ә беҙгә хәҙер рәхмәт әйтеп сығып китеүселәр бар. Әйтеүемсә, беҙҙең маҡсат - кеше ғүмеренә һәм һаулығына хәүеф янағанда, уны шунан аралап ҡалыу, ҡурсыу. Хатта иҫерек асарбаҡтар өсөн дә махсус изолятор булдырылды, улар айырым урынлаштырыла.

**▸ Ғәфү итегеҙ, Абдразаҡ Әбделәхәт улы, күңелдә шулай ҙа ҡаршылыҡлы тойғолар көрәшә. Бер яҡтан, эскеселәр хаҡында шундай кешелекле хәстәрлек күреү ғәжәп тә кеүек; икенсе яҡтан, бының кәрәге бармы икән һуң, тип тә ҡуйыла. Үҙәк атамаһының "социаль" тигән өлөшө үҙен аҡлайҙыр ҙа, бәлки, ә бына реабилитация мәсьәләһе нисек тора?**

- Кеше рәхәткә тиҙ өйрәнә, тиҙәр. Ысынлап та, кемгәлер беҙҙең үҙәк "оҡшап" китеп, икеөс тапҡыр килеп эләгә икән, беҙ уны махсус контролгә алабыҙ һәм йәшәгән урыны буйынса наркология кабинетында дауаланыу өсөн административ комиссияға юллау ҡағыҙы тултырып ебәрәбеҙ. Ә инде туранантура үҙебеҙҙә ниндәйҙер махсус процедуралар (уколдар, вливка, система ҡуйыу, кодировкалау һ.б.) өсөн әлегә тейешле шарттар юҡ. Шылтыраталар, айырыуса эскеселәрҙең ҡатындары йыш мөрәжәғәт итә ошо турала. Киләсәктә, бәлки, уйлашырға тура килер. Уның өсөн штатты ла (кәмендә медицина фәндәре кандидаты дәрәжәһенә эйә нарколог, теркәү бүлеге һ.б. булырға тейеш), шуға ярашлы финанслауҙы ла арттырырға тура киләсәк, ә әлегә был беҙҙең планда ҡаралмаған.

**▸ Асылған көндән алып һеҙҙә күпме кеше "ҡунаҡ булып" китте инде?**

- 2010 йылдың 30 ғинуарынан алып 2011 йылдың 20 февраленә тиклем 222 кеше иҫерек хәлдә үҙәккә килтерелде, шуларҙың 146-һы ҡунып ҡалды, 4 кеше алкоголь менән ағыуланған хәлдә, 2 кеше аяҡ-ҡулы туңып больницаға оҙатылды, ҡалғандары еңелсә иҫерек булыу сәбәпле, өйҙәренә ҡайтып китте. 12 асарбаҡ изоляторҙа йоҡлап сыҡты. Төндә урамда таланыуҙан, туҡмалыуҙан ҡурҡып, 23 кеше беҙҙең үҙәкте үҙҙәре килеп табып, йоҡлап сыҡтылар.

Башланғысыбыҙ төрлө даирәләрҙә хуплау табып тора, бындай тәжрибә илдең башҡа төбәктәрендә юҡ. Ә бына сит илдәрҙең ҡайһы берҙәрендә иҫеректәрҙе өйҙәренә ташыусы хеҙмәттәр төрө бар.

**▸ Ошо йүнәлештә байтаҡ эш тәжрибәһе туплаған кеше булараҡ, нисек уйлайһығыҙ: эскелеккә ҡаршы нисек итеп һөҙөмтәле көрәш алып барырға була?**

- Минеңсә, эште йәш быуынды тәрбиәләүҙән башлау дөрөҫ булыр ине. Мәктәптәрҙә алкоголь, наркоманияға ҡаршы махсус тәрбиәүи саралар үткәрелһен ине. Исем өсөн түгел, ә ихлас шарттарҙа, тәьҫирле, йөғонтоло, һөҙөмтәле эш кәрәк балалар, үҫмерҙәр менән. Мәктәп һәм башҡа балалар учреждениелары тирәһендә спиртлы эсемлектәр һатыуҙы тыйыу кәрәк. Был йәһәттән сауҙала бик ныҡ тәртип талап ителә. Алкоголле эсемлектәрҙе 21 йәштән кеселәргә һатыу шулай уҡ тыйылырға тейеш.

Ә инде эсеүгә бирелгән ҡатламды, хроник алкоголиктарҙы туҡтатыу, уларҙы айыҡлыҡҡа саҡырыу мөмкин түгел. Ҡасандыр совет заманында булды бит ЛТП-лар (дауалау-хеҙмәт предприятиелары), улар өсөн шул ысулды тергеҙеү бер ҙә яҙыҡ булмаҫ ине, тип уйлайым.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА әңгәмәләште.**

# Х А Л Ы Ҡ   Д А У А Һ Ы

## Бөйөрҙән таш сығарыу



❖ 200 грамм гөлйемеште ҡәһүә тартҡыстан үткәреп, 2 литр һалҡын һыу ҡойоп, төнгөлөккә ҡалдырырға. Иртәнсәк талғын утта 0,75 литрға ҡалғансы ҡайнатырға, һөҙөргә. 1/3 стакан төнәтмәгә 1 ҡалаҡ бал, 1 ҡалаҡ лимон һуты ҡушып, йылы көйө көнөнә 3 тапҡыр ашар алдынан 30 минут алда эсергә. Беренсе эсеү ас ҡарынға була.

## Йүткереүҙән дауа

Әле киҙеү менән ауырыусылар күбәйҙе. Был сир мәлендә ҡурылдай һәм быуылып йүткереү йонсота. Уларҙан ҡотолоу өсөн: 500 грамм таҙартып туралған һуған, 50 грамм бал, 40 грамм шәкәрҙе бер литр һыуға һалып болғатығыҙ. Ул һыуынғас, шешәгә һалып ныҡ итеп ябырға. Көнөнә 4-6 мәртәбә 1-әр ҡалаҡ эсергә кәрәк.

## Яҙға тартым йөрәк тала

Ҡыш үтеп бара, ә был ваҡытта организм арый. Йөрәк талыуы, "йөрәгем ята, хәлем юҡ" тиеүселәр күбәйә. Йөрәкте нығытыу өсөн:

❖ иртәнсәк ҡара слива, йөҙөм, күрәгә, грек сәтләүеге, ҡаты сыр ашап, бер стакан ҡайнаған һыуҙы бал ҡабып эсергә кәрәк. 15-20 көндән йөрәк шәбәйә;

❖ татлы хәлүә ашарға;

❖ үтә киҫкен хәрәкәттән, ҡапыл һикереп тороуҙан һаҡланырға;

100 грамм ҡабаҡ орлоғон ит турағыстан үткәреп, аҡһыл-көрән төҫкә ингәнсе ҡыҙҙырылған 100 грамм дөгөнө, 50 грамм арпаны ҡәһүә тартҡыста тартып, 150 грамм тоҙһоҙ аҡ май, 150 грамм бал ҡушып бергә болғарға. Көнөнә 1-2 балғалаҡлап бер нисә мәртәбә эсергә.

## Ашҡаҙан йәрәхәтен дауалау

❖ Көнөнә ике мәртәбә бер сиректән бәләкәйерәк алоэ япрағының һутын сәйнәп йоторға, ҡатыһын ташларға;

❖ бер сей картуфты ҡабығын әрсемәйенсә генә ҡырғыстан үткәреп, һөҙөргә һәм көнөнә ике мәртәбә ашар алдынан 15-20 минут алда эсергә;

❖ көнөнә 4-әр стакан кәбеҫтә һуты эсеү ҙә файҙалы. Был дауа ашҡаҙандағы йәрәхәтте бер аҙна тигәндә бөтөрә. Кәбеҫтә һыуын аҙна буйы эсеү мотлаҡ.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

✓ *1919 йылдың 10 ғинуарында Зәки Вәлиди корнет Муса Мортазинды 1-се Башҡорт кавалерия полкына командир итеп тәғәйенләй.*



*БАТЫРҘАРҘЫҢ ИСЕМЕН БЕЛ!*

**Муса Мортазин - Салауат Юлаев кеүек халыҡ өсөн ҡатмарлы һәм аяныслы осорҙа башҡорттоң мәнфәғәттәрен ҡулына ҡорал алып яҡлаған, Башҡортостан автономияһы идеяһының ныҡлы терәге булған шәхестәрҙең береһе. 1920 йылда Зәки Вәлиди хөкүмәте Башҡортостандан киткәс, автономия мәсьәләһе ҡыл осонда эленеп торған осорҙа, Польша фронтынан ҡайтып, үҙенең абруйы менән республикалағы боларышты туктатыуға булышлыҡ итә. Әйткәндәй, Польша фронтында 4 ай ғына булыуға ҡарамаҫтан, ҙур батырлыҡтар күрһәтеп, ике тапҡыр Ҡыҙыл Байраҡ орденына лайыҡ булып өлгөрә. Артабан Муса Мортазин ҡылысын ҡынына ҡуйып, йәш автономияның дәүләт эше менән булыша. 1921-1922 йылдарҙа, республика өсөн иң ауыр аслыҡ осоронда Башҡортостан менән етәкселек итә.**

# КОМБРИГ МОРТАЗИН

## Данлыҡлы сардар һәм дәүләт эшмәкәренең тыуыуына 120 йыл

Муса Лут улы Мортазин 1891 йылдың 20 февралендә Ырымбур губернаһы Верхнеуральск өйәҙенең Күбәләк-Тиләү улысына ҡараған Көсөк ауылында (хәҙерге Башҡортостан Республикаһының Учалы районы Көсөк-Маяҡ ауылы) тыуған. 1911 йылда үҙ ауылында мәҙрәсә тамамлай. Киләһе йылына уны әрме хеҙмәтенә алалар. Алыҫ Көнсығышта 9-сы Себер артиллерия бригадаһында хеҙмәт итә. 1913 йылда уҡыу командаһын тамамлап, бомбардир-наводчик (батша армияһы артиллерияһындағы ефрейтор) званиеһын ала.

1914 йылда Германия менән һуғыш башланғас (Беренсе донъя һуғышы), 9-сы Себер артиллерия бригадаһы фронтҡа ебәрелә. Бомбардир Мортазин 1917 йылдың майына тиклем Көнсығыш, Румыния фронттарында немец, австрийҙар һәм румындарға ҡаршы һуғышып йөрөй. 1914 йылдың сентябрендә вице-фейерверкер (кесе унтер-офицер) званиеһы ала. 1916 йылдың июлендә ҡаты алыштарҙың береһендә артиллерист Мортазиндың башы яралана. Яуҙарҙа күрһәткән ҡаһарманлыҡтары өсөн Мусаны унтер-офицер итеп үрләтәләр.

1917 йылдың Февраль революцияһынан һуң фронтта һалдаттар араһында революцион агитация киң ҡолас йәйә. Был йәһәттән большевиктар, эсерҙар бик әүҙем була. Муса Мортазинға бигерәк тә коммунистарҙың агитацияһы ныҡ тәьсир итә. Уларҙың сәйәси ҡарашын яҡын күрә. Мосолман һалдаттары араһында абруй ҡаҙанған унтер-офицерҙы 1917 йылдың майында Мәскәүҙә үткән I Бөтә Рәсәй мосолмандары съезына делегат итеп ебәрәләр. Ошо осорҙан башлап Муса Мортазин башы-аяғы менән сәйәси эшмәкәрлеккә сума.

1917 йылдың декбарендә, Ырымбурҙа үткән III Дөйөм Башҡорт ойоштороу ҡоролтайында ҡатнаша. *"Сәйәси яҡтан Ҡоролтай өс төркөмгә бүленде. З. Вәлидов менән Ш. Манатов етәкселек иткән беренсе төркөм башҡорт халҡының ниндәй ҙә булһа билдәле бер иҡтисади төркөмөнөң мәнфәғәттәрен түгел, ә башҡорттарҙың милли бойондороҡһоҙлоҡҡа дөйөм ынтылыштарын сағылдыра ине... Икенсе төркөм - фронттан ҡайтҡан һалдаттар һәм башҡорттарҙың хеҙмәтсән интеллигенцияһы - большевиктарға тартылды...",* - тип яҙа Мортазин үҙең китабында. Ул ошо икенсе төркөмдә була. Ҡоролтайҙа күпселек тарафынан ҡабул ителгән ҡайһы бер ҡарарҙар менән (ер мәсьәләһе буйынса) килешмәһә лә, Мортазин Башҡортостандың тупраҡлы мөхтәриәтен ҡуш ҡуллап хуплай.

1918 йылдың ғинуарында Мортазин башҡорт делегацияһы составында Өфөлә үткән төрки-татарҙарҙың Милли мәжлесе йыйылышында ҡатнаша. Унда улар Башҡортостан автономияһына ҡаршы сығыш яһаған татарҙар менән ҡыҙыу бәхәстәр алып бара. Ошо арала Ырымбурҙа Башҡорт хөкүмәте губерна мосолман комитеты тарафынан ҡулға алынып, төрмәгә ябыла. Башҡорт вәкилдәре Муса Мортазин, Хафиз Ҡушаев, Зәкәриә Айытбаев, Усман Ҡыуатов һәм Мөхәмәтхан Ҡулаев Ырымбурға ҡайтып, власты үҙ ҡулына алған Башҡортостандың ваҡытлы революцион советына бара.1 март көнө делегаттар менән Ваҡытлы революцион советтың берлектәге йыйылышы була. Әммә делегаттар бер ни ҙә хәл итә алмай таралыша. Һул ҡарашлы Мортазинды большевиктар Ваҡытлы революцион советҡа эшкә саҡыра. Әммә улар Мортазинға бер аҙ шик менән ҡарай. *"Из вновь введенных (конце марта) членов ревкома Муртазин иногда показывал себя левым, но только на словах; у нас было подозрение, что он - сторонник Валидова в ревкоме",* - тип яҙа Башҡортостандың ваҡытлы революцион советы рәйесе Ғабдулла Дәүләтшин. 1918 йылдың 30 мартында Ғ. Шәмиғолов Ваҡытлы революцион советты яба. Муса Мортазин тыуған яғына ҡайтып, совет власы урынлаштырыу менән мәшғүл була. Тамъян-Ҡатай кантонында милиция ойоштора.

* * *

1914 йылда урыҫ армияһы составында ойошторолған Чехословак корпусы (60 мең һалдат) 1917 йылға тиклем Герман һуғышында немецтарға ҡаршы һуғыша. Власть большевиктар ҡулына күскәс, улар чехословактарҙан тиҙерәк ҡотолорға уйлай. Килешеү буйынса 60 меңлек корпус тимер юлы аша Алыҫ Көнсығышҡа барып, унан диңгеҙ юлы менән Францияға китергә тейеш була. Чехословактарҙың эшелондарға тейәлгән ғәскәрҙәре Пензанан алып Чита ҡалаһына тиклем һуҙылған юлда килә. 1918 йылдың майында большевиктар Чехословак корпусын ҡоралһыҙландырырға тигән әмер бирә. Быға ҡаршы тегеләре баш күтәрә һәм 1918 йылдың июненә Волга-Урал буйында власть большевиктарға ҡаршы көстәр ҡулына күсә. Апрель айында ғына төрмәнән ҡотолған Башҡорт хөкүмәте, Силәбелә урынлашҡан Чехословак корпусы етәкселеге менән осрашып, килешеп, башҡорт ғәскәрҙәрен ойоштороу эшенә тотона.

1918 йылдың июнендә ярты Рәсәй буйлап эшелондарҙа торған Чехословак корпусы ярҙамында Башҡорт хөкүмәте милли армия ойоштороу эшенә тотона. Тамъян-Ҡатай кантонында корнет Әмир Ҡарамышев етәкселегендә 5-се Башҡорт пехота һәм 1-се Башҡорт кавалерия полктары төҙөлә башлай. Муса Мортазин 1-се һәм 5-се полктарҙы ойоштороуҙа әүҙем ҡатнаша. 1-се кавалерия полкының эскадрон командиры сифатында 1918 йылдың июненән алып 1919 йылдың ғинуарына тиклем Блюхер һалдаттарына ҡаршы, һуңынан Ҡыҙыл армия ғәскәрҙәренә ҡаршы һуғыштарҙа ҡатнаша. 1919 йылдың 10 ғинуарында Зәки Вәлиди корнет Муса Мортазинды 1-се Башҡорт кавалерия полкына командир итеп тәғәйенләй.

1919 йылдың 19-20 февралендә Башҡорт корпусы ҡыҙылдар яғына сыҡҡас, башҡорт полктарынан аҡтарға ҡаршы төркөм ойошторола. Ошо төркөмгә 1-се Башҡорт кавалерия полкы ла инә (Мортазин яҙыуынса, 1-се полкта "540 ҡылыс, 600 ат һәм 4 пулемет" була). Әммә оҙаҡламай 1-се Ҡыҙыл армия командованиеһы башҡорт полктарын Пенза дивизияһының тылына күсергә бойора. Фронт һыҙығында Муса Мортазиндың ғына полкы тороп ҡала. 1-се полк ҡыҙылдарҙың Смоленск полкы менән Тамъян-Ҡатай кантонында аҡтарға ҡаршы фронт тота. Ләкин тиҙҙән башҡорт полктарын көсләп ҡоралһыҙландыралар, ҡаршылыҡ күрһәткәндәрен аталар, тигән хәбәр фронт һыҙығындағы Мортазин егеттәренә лә килеп етә. Ҡыҙыл армияның яман ҡыланышына ҡаршылыҡ күрһәтеп, ҡайһы бер башҡорт частары (2-се Башҡорт кавалерия полкының эскадроны, 1-се Башҡорт уҡсы полкының батальоны) кире аҡтар яғына сыға. Әтрәгәләм элементтарынан торған Ҡыҙыл армия һалдаттары башҡорттарҙан үс алырға тотона - ябай ауыл халҡын талай, ыҙа сиктерә башлай. Бер һүҙ менән әйткәндә, ҡөһөрҙө ябай башҡорт халҡына төшөрә. Ошо мәлдә Муса Мортазиндың полкы башҡорттарҙың берҙән-бер яҡлаусыһы, терәге була. Тиҙҙән ярһыу сардарҙың түҙер әмәле ҡалмай.

*"Башҡорт кавалерия полкы сигенергә теләмәһә лә бригада командованиеһы уға тылға күсергә бойороҡ бирҙе һәм, шул әмергә буйһоноп, полк 28 мартта Билал ауылына, Смоленск полкы торған тирәгә барып урынлашты. Полкты смоленсылар хас дошман һымаҡ күреп ҡаршыланы. Башҡорт отряды бында уларҙың урындағы халыҡты йәберләүенең бик күп миҫалдарына шаһит булды. Тағы ҡоторонop конфискация үткәреүҙәр, контрибуция һалыуҙар башланды. Смоленсылар, бәйһеҙ шашынып, халыҡты ҡан илатты",* - тип яҙа Муса Мортазин. Түҙемлеге ҡалмаған Башҡорт кавалерия полкы 23 март көнө ҡыҙылдарҙы туҙҙырып, ҡоралһыҙландыра. Мортазин был турала бригада командованиеһына хәбәр итә. Ҡото алынған бригада штабы 40 саҡырым тылға - Кананикольскийға һыпыртыу яғын ҡарай. Башҡорт кавалерия полкы тарафынан ебәрелгән делегация атыла. Бер нисә көндән 20-се дивизияның 1-се бригадаһы частары бергә тупланып, Башҡорт кавалерия полкына һөжүм башлай. Казактар, фронт һыҙығының был яғында низағлашыу, хатта ҡоралды бәрелеш барыуын тиҙ генә һиҙеп ҡалып, башҡорт полкын үҙҙәре яғына сығарыу тураһында һөйләшеү өсөн Мортазинға делегация ебәрә. Ике ут эсендә ҡалған полк ирекһеҙҙән аҡтар яғына сығып китә.



***✓ Башҡортостанға ҡайтыу менән Муса Мортазин ихтилалды артыҡ ҡорбандарһыҙ туҡтатыуға бөтә көсөн һала. Яңы Башревкомға ышанмаған башҡорттар Муса Мортазин ҡайтыу менән уны үҙенең яҡлаусыһы итеп күрә.***



Аҡтар 1-се полкты ҡыҙылдарға ҡаршы һуғышҡа индерергә тырыша, Стәрлетамаҡ яғына сигенгән ҡыҙылдарҙың юлын киҫергә бойора. Ләкин Мортазин төрлө һылтауҙар менән бойороҡто үтәүҙән баш тарта. Ул үҙ полкы менән Белорет ҡалаһына барып урынлаша. Бында аҡтар яғындағы башҡорт һалдаттарын әҙләп үҙ полкына туплай башлай. Муса Мортазин Белорет ҡалаһында апрелдең урталарынан алып майҙың аҙағына тиклем тора, йәғни үҙенең һалдаттарына ай ярым буйына ял итергә, яңы яугирҙар менән тулыландырырға мөмкинлек ала.

1919 йылдың июнь башында Стәрлетамаҡ ҡалаһына күсәләр. Бында Мортазин полкы тағы 15 көн тирәһе әҙерлек үтә, һалдаттар һәм ҡоралдар менән тулыландырыла. Күпләп башҡорттар йәшәгән районда айырым фронт һыҙығында урынлашыуҙан файҙаланып, М. Мортазин үҙ полкына тағы күберәк һалдаттар тупларға мөмкинлек ала. Күрше казак частарындағы башҡорт һалдаттары Мортазинға күсә башлай. Ошо рәүешле 1919 йылдың июнендә гәййәр сардар үҙенең полкын бригада кимәленә үҫтереп ебәрә. *"Июнь аҙағына бригаданы ойоштороуҙы тамамлап һәм йәйәүле дивизион да төҙөп алып, 4 мең самаһы кешеле Башҡорт кавалерия бригадаһы 10 июлгә тиклем Ағиҙел буйында һаҡта торҙо, был тирәнән ҡыҙылдарҙың разведкаһын үткәрмәне"*, - тип яҙа Мортазин. Сағыштырып ҡарағыҙ: ошо осорҙа, ҡыҙылдар яғында Көньяҡ фронтта һуғышҡан Башҡорт кавалерия дивизияһының иҫәбе өс мең кешегә лә тулмай. Ә Муса Мортазин аҡтар яғында 4 мең тирәһе кешенән торған бригада ойоштороуға өлгәшә. Ошонон менән ул Колчак армия частарында һибелгән башҡорт һалдаттарының байтағын бер ғәскәргә туплай.

Бригада кимәленә үҫеп еткән Мортазин полкы хәҙер аҡтарҙың фармандарын бөтөнләй һанға һуҡмай башлай. 1919 йылдың июлендә ҡыҙылдар һөжүмгә күскәс, уларға ҡаршы сығырға, тип Колчак командованиеһы күпме генә бойороҡ бирһә лә, Мортазин ҡыҙылдарға артыҡ ҡаршылыҡ күрһәтмәй сигенә, йә булмаһа бәрелештән тайпыла. Мортазиндың был ҡыланышынан асыуы ҡабарған 5-се корпус командиры Эллерс-Усов уны Әбйәлил ауылына, корпустың штабына саҡыра. 8 август Мортазин Әбйәлилгә барып, генерал менән низағлашып китә, револьверҙан уны яралай. Иртәгеһенә бригадаһы менән килеп баҫып, корпус штабының канцелярияһын, 3 мең дана винтовка һаҡланған складын талап алып китә.

17 август мөнәсәбәттәрҙе көйләү маҡсатында корпус командиры генерал Бакич Мортазинды үҙенә саҡыра. Башҡорт кавалерия бригадаһы 18 август Березовка ауылы янында корпустың ике полкын туҙҙырып, корпустың штабын баҫып ала.

* * *

Ошо мәлдә Башревком ярҙамында (бригадаға Таһир Имаҡов килә) Муса Мортазин ҡыҙылдар яғына кире сығыу тураһында һөйләшеүҙәр башлай. 1919 йылдың февраль-март айҙарындағы ваҡиғаларҙан һуң ҡыҙылдарҙан артыҡ яҡшылыҡ көтмәгән комбриг Ҡыҙыл Армия яғына сығыу өсөн ҡәтғи шарттар ҡуя:

1. Башҡорт һалдаттарын һәм командирҙарын ҡоралһыҙландырмаҫҡа һәм атмаҫҡа;

2. Бригаданы ҡабул итеү өсөн башҡорт һәм совет командованиеһы вәкилдәре менән бергә ике-өс башҡорт совет полкын ҡуйырға, сөнки башҡорттар март айындағы атыуҙарҙан һуң рус командованиеһына ышанмай;

3. Полктарҙы Колчакка ҡаршы ебәреү мөмкинлеге булмаһа, уларҙы заводтарға һәм күсеңеү пункттарына урынлаштырмаҫҡа, йә Верхнеуральскиға ебәрергә, йә Стәрлетамаҡта ҡалдырырға.

Ошо шарттар үтәлмәһә, бригаданы ҡаҙаҡ далаларына алып китәм, тип иҫкәртеп ҡуя ҡыҙылдарҙы Мортазин. 1919 йылдың башында Башҡорт корпусын ҡоралһыҙландырып хата яһағанын аңлаған Ҡыҙыл Армия командованиеһы (был хатаны улар 1919 йылдың мартында Колчак армияһы контрһөжүмгә күскән мәлдә, һуғышсан башҡорт ғәскәрҙәре ярҙамына мохтаж саҡта яҡшы аңлай) Муса Мортазиндың шарттары менән риза була. Хәҙер инде ҡыҙылдар Башҡорт кавалерия бригадаһын үҙ файҙаһына ҡулланыуҙың әһәмиәтенә бик яҡшы төшөнә.

Мортазиндың ғәскәре ҡыҙылдар яғында Айырым Башҡорт кавалерия бригадаһы статусын ала. Йәғни командаһы составы, полктар үҙгәрешһеҙ ҡалдырыла. 1919 йылдың август аҙағында бригада ҡыҙылдарҙың 24-се уҡсы дивизияһы составында аҡтарҙың Көньяҡ армияһы частарын туҙҙыра. Адамский һәм Бриены ҡасабаларына (Ырымбур өлкәһенең көнсығышында) һөжүм итеп, Айырым Башҡорт кавалерия бригадаһы аҡтарҙың өс йөҙгә яҡын һалдатын әсиргә ала, 20 ылауын ҡулға төшөрә.

*"Һуғыштарҙа арыған бригада, ҡаршыһында дошмандың йүнле көсө булмағас, тылға, Башҡортостанға, Ишмөхәмәт - Туртөкөй төбәгенә ҡайтарылды, унан резервтағы 1-се армия ҡарамағына бирелеп, Урал фронтына - Ырымбур-Ҡарғалы (Сәйет биҫтәһе) тирәһенә күсерелде. Бында өс көн ял иткәс, бригада иң яҡшы хәрби составынан, айырыуса йәштәр араһынан, политработниктар һайлап алды һәм 3 мең кешене 2 меңгә генә ҡалдырып, бер аҙ кейем-һалым алып, тулы әҙерлек хәлендә килде"*, - тип яҙа Муса Мортазин.

1919 йылдың октябрь башында Башҡорт кавалерия бригадаһы Урал фронтына күсерелеп, 5-се ҡыҙыл армияға буйһондорола. Бында Мортазин атлылары казак генералдары Толстой, Беловтарҙың армияларына ҡаршы һуғыша. Аҡтарҙы ҡыуып Мирогород, Аҡбулаҡ, Нефрашанка, Чунгай, Ҡормантай ауылдары янында ҡанлы һуғыштарҙа ҡатнаша. Бригада 1919 йылдың ноябрь-декабрендә Төркөстан фронтының Урал-Гурьев операцияһында ҡатнаша. Ошо хәрби операция һөҙөмтәһендә аҡтарҙың Урал армияһы туҙҙырыла. Тар-мар ителгән ғәскәрҙәренең ҡалдыҡтары Гурьев ҡалаһына ҡаса.

* * *

Өҙлөкһөҙ һуғыштар, һыуыҡтар, тиф сире арҡаһында Башҡорт кавалерия бригадаһы 1919 йылдың декабрь аҙағына бик ауыр хәлдә була. Алтмыш процент составын юғалтҡан Айырым Башҡорт кавалерия бригадаһын 1-се Ҡыҙыл Армия командованиеһы 5-се дивизияның бригадаһына ҡушып, йәғни полктар кимәлендә генә ҡалдырып, айырым бригада булараҡ бөтөрөргә ҡарар итә. Аптырашта ҡалған Муса Мортазин хәлде аңлатып, Башҡортостандың хәрби комиссары Зәки Вәлидигә рапорт ебәрә.

Зәки Вәлиди был мәсьәләне Ленин һәм Троцкийға еткерә. Ләкин Төркөстан фронты командующийы Фрунзе Башҡорт бригадаһын таратыу яғын ҡайыра: *"Ознакомившись с положением дела в кавалерийской бригаде Муртазина, включенной в состав 5-й кавдивизии, стало наиболее целесообразным эту бригаду расформировать. Ввиду удобства, связанного с отдачей приказа фронтом, прошу соответствующего распоряжения от Реввоенсовета Республики. Основание к расформированию есть"*, - тип яҙа ул Ленинға. Фрунзе Башҡорт бригадаһын үҙ фарманы менән 5-се дивизияға ҡушһа ла, уны таратырға баҙнат итмәйенсә, Реввоенсоветтың рөхсәтен һораған. Фрунзе Ленинға ебәргән телеграммаһын былай тип дауам итә: *"Башкирский ревком считает эту бригаду национальным формированием и ходатайствует перед центром об исключении ее из дивизии. Я же отвечу, что бригада в состав башкирской армии включена быть не может, так как это превысит установленную соглашением для Башкирии норму"*. Бында һүҙ 1919 йылдың 20 мартындағы килешеү тураһында бара. Ул килешеү буйынса Башҡорт армияһы бер кавалерия дивизияһы һәм бер уҡсы бригадаһынан торорға тейеш була. Шуға күрә лә Фрунзе Мортазиндың кавалерия бригадаһын артыҡ һанай. Ул Башҡорт бригадаһын бөтөрөп, уның яугирҙары менән Петроградтағы башҡорт ғәскәрҙәрен тулыландырырға тәҡдим итә.

Ләкин Башҡортостан хәрби комиссары Зәки Вәлиди Троцкий менән Ленинды Мортазин бригадаһын таратмаҫҡа күндерә. Бригада 1919 йылдың декабренән алып 1920 йылдың апрель аҙағына тиклем Ырымбур янында, Ҡарғалыла тора. Ял итә, сафтарын тулыландыра.

*"1920 йылдың 29 апрелендә Башҡорт бригадаһы Польша фронтына юл алды. Ул вагондарға Ташкент тимер юлының Ново-Сергиевка станцияһында тейәлде һәм 7 майҙа Бобровица станцияһына (Нежин ҡалаһы районына) килеп етте. Бригада составында 27-се, 28-се полктар һәм 800 кешелек йәйәүле дивизион, 200 ҡылыс һәм 600 ат, 15 пулемет бар ине"*, - тип яҙа Мортазин.

Бригада 9 майҙан 12-се армия составында поляктарға ҡаршы һуғыш башлай. 16 майҙа Мортазин бригадаһына Новгород губернаһынан 900 кешелек 1-се Башҡорт кавалерия полкы килеп ҡушыла (1-се кавполк Айырым Башҡорт кавалерия дивизияһы полктарынан ойошторола, ә дивизияның үҙе таратыла). Бынан тыш, Стәрлетамаҡтан Башревком тарафынан бригадаға тағы 100 һалдат ебәрелә. Шулай итеп, Айырым Башҡорт кавалерия бригадаһы өс полкы (1-се, 27-се, 28-се полктар) ғәскәри часҡа үҫеп етә. Бригада 12-се армияның 7-се кавдивизияһы составында Киев операцияһында әүҙем ҡатнаша. Ҡанлы яуҙар барышында байтаҡ ҡына юғалтыуҙар кисерә.

13 июль Муса Мортазин командалығында 12-се армияның атлы төркөмө ойоштороло. Уның составында Айырым Башҡорт кавалерия бригадаһы, 25-се кавалерия бригадаһы, Дон-Кубань, Суров, 7-се йыйылма һәм 59 кавалерия полктары була. Атлы төркөм поляктарҙы ҡыуып, 8 августа Ковель ҡалаһын ала. Ҡалаға беренсе булып Башҡорт бригадаһының 1-се кавполкы бәреп инә. Һуғышта күрһәткән ҡаһарманлыҡтары өсөн комбриг Мортазин алтын сәғәт, көмөш ҡылыс менән бүләкләнә, ике тапҡыр Ҡыҙыл Байраҡ орденына лайыҡ була (1920, 1921 йылдарҙа).

* * *

Был осорҙа Башҡортостанда Зәки Вәлиди етәкселегендәге Башревком ВЦИК-тың декретына ҡаршы ризаһыҙлыҡ белдереп эштән киткән була. Артабан хәлдәр тағы ҡатмарлаша, Бөрйән-Түңгәүер кантонында башҡорттар советтарға ҡаршы баш күтәрә. Республикалағы ваҡиғалар тураһында хәбәр алыу менән комбриг Мортазин 1920 йылдың авгусында отпуск алып ҡайтып китә. Башҡортостанға ҡайтыу менән Муса Мортазин ихтилалды артыҡ ҡорбандарһыҙ туҡтатыуға бөтә көсөн һала. Яңы Башревкомға ышанмаған башҡорттар Муса Мортазин ҡайтыу менән уны үҙенең яҡлаусыһы итеп күрә. Абруйлы сардарҙың һүҙенә ҡолаҡ һалып, башҡорттар советтарға ҡаршы ҡораллы көрәште туҡтата.

1920 йылдың декабренән Мортазин республиканың Хәрби эштәр буйынса халыҡ комиссары булып эшләй башлай. 1921 йылдың июнендә ул Автономиялы Башҡорт Совет Республикаһының етәксеһе - Башҡортостандың Үҙәк Башҡарма Комитеты (БашЦИК) рәйесе итеп тәғәйенләнә. 1922 йылда, хәрби белем алыу маҡсатында, Мәскәү Юғары Хәрби-педагогика мәктәбенә уҡырға китә. 1924 йылда, хәрби мәктәпте тамамлап, Эшсе-Крәҫтиән Ҡыҙыл Армияһының М.В.Фрунзе исемендәге Хәрби академияһына уҡырға инә. 1927 йылда, академияны тамамлап, Ҡыҙыл Армияның Баш идаралығында резервта тора. Ошо йылда Мәскәүҙә "Башҡортостан һәм башҡорт ғәскәрҙәре граждандар һуғышында" тип исемләнгән китабы баҫылып сыға.

1928 йылдың ғинуарынан 11-се кавалерия дивизияһының 3-сө бригадаһы командиры, 8-се кавалерия дивизияһының бригада командиры булып хеҙмәт итә. 1929 йылдың декабренән Мәскәүҙә Ҡыҙыл Армия Баш идаралығының Аттар составын яңыртыу идаралығы инструкторы, 1931 йылдан ошо идаралыҡтың 2-се секторы начальнигы урынбаҫары, артабан 4-се, 2-се секторы начальнигы булып хеҙмәт итә. 1935 йылдың февраленән Аттар составын яңыртыу буйынса бүлектең 2-се бүлексәһе начальнигы була. Ошо уҡ йылдың декабрендә Муса Мортазинға комбриг званиеһы бирелә.

Ҡаһарман сардар, легендар комбриг, башҡорт халҡының данлы улы Муса Лотфулла улы Мортазин 1937 йылда репрессиялана. 27 сентябрь көнө СССР Юғары Судының хәрби коллегияһы уны үлем язаһына хөкөм итә. Шул уҡ көндә атыла. 1956 йылдың 14 июлендә реабилитациялана.

**Азат ЯРМУЛЛИН,**
**тарихсы.**

*✓ Беҙҙә йылҡысылыҡты үҙ итәләр, әммә йылҡы итен, мәҫәлән, Магнитогорск ҡалаһында бер кафе ла алырға теләмәй, Өфөгә илтеп һатыу ауырға төшә.*



**Башҡорт халҡының яртыһынан күберәге бөгөн дә ауыл ерендә йәшәүен дауам итә. Ауылда донъя көтөү бер заманда ла еңел булмағандыр, әле лә шулай. Меңәр йылдар буйына башлыса малсылыҡ менән шөғөлләнеп көн иткән халҡыбыҙ ҙа заман талаптарына яраҡлаша биреп, игенселек серҙәрен үҙләштерә алған, ә бына XX быуат дауамында ҡалаларға күсеп китеүсе башҡорттар һаны ла күбәйгәндән күбәйә барҙы. Шул уҡ ваҡытта ергә ереккән башҡортто унан тамам айырып алыу мөмкин дә түгел. Тап шуның өсөн яҡын киләсәктә лә, йәғни XXI быуатта беҙ башҡорт донъяһын барыбер ауылдан башҡа күҙ алдына килтерә алмаясаҡбыҙ әле. Был - тарихи ысынбарлыҡ.**

**Халҡыбыҙҙың тарихы һәм мәҙәниәте, уның фәлсәфәһе һәм рухи мираҫы, ҡануни ғөрөф-ғәҙәттәре, моңо тотошлайы менән тиерлек тәбиғәт ҡосағында, ауыл ерлегендә яралған һәм үҫешә алған. Башҡорт ауылы йәшәй икән - халҡыбыҙҙың киләсәге лә бар, тигән һүҙ был.**

**Әммә заман башҡа булғас, ауыл заңы ла башҡасараҡ яңғырай бөгөн. Совет осоронда ауыл хужалығын ойоштороуҙың төп формаһы булып нығынған колхоз-совхоз системаһы тарҡатылғас, крәҫтиән яҙмышы тулыһынса уның үҙ ҡарамағына тапшырылды. Дәүләтебеҙҙә капиталистик, йәғни тауар әйләнеше, алыш-биреш мөнәсәбәттәре хөкөм һөргән бер заманда ошо яңы шарттарға ҡулайлаша алмайынса, күп яфаларға түҙеп йәшәй бөгөнгө ауыл. Яңы заман крәҫтиәндән ошо баҙар мөнәсәбәттәренә яраҡлаша алыуҙы талап итә лә инде: ауыл хужалығы тауарҙарын ваҡлап түгел, ҙур күләмдәрҙә етештереү мөмкинлектәрен табып, үҫеш стратегияһын дөрөҫ билдәләй алыу ғына ауылды һәләкәттән ҡотҡара аласаҡ.**

**Ошондай үҙгәрештәргә әҙерме һуң башҡорт ауылы? Ҡалала ҙур һорау менән ҡулланылған ауыл хужалығы тауарҙарын етештереү, уны эшкәртеү, ҡала магазиндарына һәм баҙарҙарына сығарыу, табыш алырлыҡ хаҡҡа һата алыу - былар барыһы ла ауыл хужалығы менән шөғөлләнеүсе кешенән эшҡыуарлыҡ ҡанундарын да һәйбәт белеүҙе талап итә. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, беҙҙең ауылдарыбыҙҙа бәләкәй һәм урта кимәлдәге эшҡыуарлыҡ башланғыс халәтенән әллә ни алыҫ китә алғаны юҡ. Тап шуның өсөн III Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы барышында башҡорт эшҡыуарлығын юлға һалыу һәм үҫтереү мәсьәләләре буйынса махсус секция эше ойошторолдо, эшҡыуарҙарыбыҙҙы, бигерәк тә үҙ эштәрен ауыл ерендә башлап ебәреүселәрҙе борсоған һорауҙар тикшерелде, эшҡыуарлыҡты үҫтереүгә арналған резолюция ҡабул ителде.**

**Шулай ҙа йәшәйешебеҙҙең ниндәй генә өлкәһен алма, алға китеште тәьмин итеүселәр - ойоштороусылар булыуы мотлаҡ. Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты эргәһендәге Эшҡыуарлыҡ, иҡтисад һәм ер сәйәсәте буйынса комиссия рәйесе, "Стройтрейдинг" компанияһының генераль директоры Иршат Аҫылғужин атлы уҙаман да ошондай әүҙем инсандарыбыҙҙың береһе ул. Тап уның башланғысы менән бөгөн Ҡоролтайҙа Бизнес үҙәге булдырылып, башҡорт эшҡыуарҙарын туплау, ошо күп көс һәм тырышлыҡ талап ителгән өлкәгә яңынан-яңы кешеләрҙе йәлеп итеү, уларҙың ошоғаса хәл ителмәй ҡала килгән бихисап проблемаларын хәл итеүгә булышлыҡ итеү, йәш эшҡыуарҙарға консультациялар биреү һәм башҡа эреле-ваҡлы һорау-мәсьәләләргә яуап эҙләү кеүек ғәмәлдәр тормошҡа ашырыла башланы ла инде.**

**Әйтергә кәрәк, бөгөн яңы ғына эшләй башлаған Бизнес үҙәгенән кеше өҙөлмәй тиерлек. Бында хәҙер компьютер һәм башҡа техник саралар ҡуйылған, килеүселәрҙе кәрәкле ойоштороу һәм юридик документтар менән бушлай тәьмин итеү мөмкинлеге буласаҡ. Был ғына ла аҙ әле: төпкөлдәге район һәм ҡалаларҙа йәшәүсе милләттәштәребеҙгә теләгән сағында Өфөгә юллана алыуҙың ҡыйыныраҡ булыуын иҫәпкә алып, Бизнес үҙәге айырым райондарҙа урындағы эшҡыуарҙар йыйындарын уҙғара башланы.**

**Тәүге осрашыуҙар Әбйәлил, Ғафури, Баймаҡ райондарында ойошторолдо. Һуңғыһында ошо мәҡәләнең авторына ла ҡатнашыу насип булды. Был йыйылышта Иршат Аҫылғужин, билдәле эшҡыуар Сәғит Исмәғилев, район хакимиәте башлығы Рөстәм Сәйетов, башҡа вазифалы етәкселәр ҡатнашты. Район эшҡыуарҙары эшлекле һөйләшеү барышында үҙҙәрен борсоған һорауҙарын бирҙе, урындағы һәм юғары етәкселәргә үтенес-тәҡдимдәрен белдерҙе. Гәзит уҡыусылар иғтибарына ошо үҙенсәлекле түңәрәк өҫтәл артында яңғыраған фекерҙәрҙе еткереү урынлы булыр, тип уйлайбыҙ.**

# АУЫЛЫНДЫ эшҡыуарлыҡты

**И. АҪЫЛҒУЖИН:** Бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡ йүнәлешендәге эштәрҙе беҙ бөгөн өҫтөнлөклө, тип танырға тейешбеҙ. Әгәр ошо өлкәлә үҫеш булмаһа, ауыл кешеләренең тормошо алға бармаясаҡ. Әлбиттә, бәләкәй эшҡыуарлыҡты үҫтереү менән дәүләт органдары ла, муниципаль властар ҙа шөғөлләнә. Әммә тиҫтәләрсә йылдар дауамында административ-бойороҡ системаһы ҡарамағында көн итеү күптәребеҙҙең үҙ эшен үҙ аллы ҡора алыу һәләтен юҡҡа сығарған. Шуға күрә башҡорт йәмғәтселегенең төп бурысы - тап ошо юҫыҡта халыҡ менталитетын үҙгәртә алыу, сөнки ауылда йәшәүселәрҙең үҙаңында әлегә тиклем эшҡыуарлыҡҡа яңыса ҡараш нығынып етмәгән. Әле үҙебеҙ булдырған Бизнес үҙәге иң элек Башҡортостанда, башҡорттар йәшәгән башҡа төбәктәрҙә эшҡыуарлыҡ торошон өйрәнә башланы, һәм ошо йүнәлеште алға ебәреү өсөн мөмкин булғандың барыһын да эшләргә әҙербеҙ.

**Р. СӘЙЕТОВ:** Иршат Мөхәррәм улы билдәләп үткән етешһеҙлек Баймаҡ районында йәшәүселәрҙең барыһына ла ҡағыла, ә ауыл ерлегендә эшҡыуарлыҡты үҫтерә алмау - беҙҙең халыҡтарыбыҙҙың уртаҡ бәләһе. Бындағы геоклиматик шарттар, райондың ҙур ҡалаларҙан алыҫ булыуы, хужалыҡ итеүҙең башлыса аграр өлкәгә генә ҡарауы ла эшҡыуарлыҡҡа булышлыҡ итмәй. 5 йыл самаһы элегерәк бер төркөм әүҙем яҡташтарыбыҙҙы йәшелсәлек тармағын үҫтереү тәжрибәһен өйрәнеү өсөн Туймазы районына алып барғайныҡ, ул ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙырғас, ниндәйҙер өмөт уянғандай ҙа булғайны. Әммә беҙҙә барыбер теплица хужалыҡтары артыҡ үҫешеп китмәне, әлегә ҙурыраҡтарҙан һаналған 4 теплица эшләй. Тәтешле районында ҡошсолоҡ менән әүҙем шөғөлләнһәләр, беҙҙә йылҡысылыҡты үҙ итәләр, әммә йылҡы итен, мәҫәлән, Магнитогорск ҡалаһында бер кафе ла алырға теләмәй, Өфөгә илтеп һатыу ауырға төшә.

**И. АҪЫЛҒУЖИН:** Юл буйында тибендә йөрөүсе аттарығыҙҙы күрҙек, ат аҫрау файҙалы һәм һеҙҙең шарттарҙа экономиялы тармаҡ. Әммә районығыҙҙа эшҡыуарлыҡтың мөмкин булған башҡа төрҙәрен үҫтереү хаҡында ла кәңәш итеү кәрәк, тип уйлайым. Ауылдарҙа һәр кемдең шәхси хужалығы бар, әммә ул әлегә үҙ-үҙен тәьмин итеүсе натураль хужалыҡ ҡына булып ҡала. Әгәр ошо шәхси хужалыҡтарҙы ҙурайтып, ауыл хужалығы продукцияһын күберәк етештерә башлаһағыҙ, уларҙы ла эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнеүселәр рәтенә индереп булыр ине. Ауыл өсөн төп етештереү көсө - ер, шуның өсөн пай ерҙәрен шәхси хужалыҡтарҙы үҫтереү маҡсатында файҙалана алыу мәсьәләһен тиҙ арала хәл итергә кәрәк. Ауыл хужалығы тәғәйенләнешендәге ерҙәр иҫәбенән бирелгән ер пайҙарын натуралата бүлеп алыу мәсьәләһе һеҙҙә нисек хәл ителде?

**Р. СӘЙЕТОВ:** Беҙҙә бөгөн бер тапҡыр бушлай бирелә торған ер пайҙарын алыусыларҙың 74 проценты ер сертификаттарын алды.

**В. БӘҘРЕТДИНОВ:** Баймаҡ районында һәр пайға 6 гектар һөрөнтө ер бирелә. Пайсы үҙенә бирелгән пай ерен шәхси хужалығын ҙурайтыу маҡсатында айырып, бүлеп алыу мөмкинлегенә эйәме?

**Р. СӘЙЕТОВ:** Ер пайҙары бушлай бирелһә лә, уның документтарын теркәү өсөн ауыл кешеһенә 7 мең һум самаһы аҡса тотонорға тура килде. Ошо пайҙарын алғанда улар, башлыса, ерҙәрен төрлө хужалыҡ итеүсе арендаторҙарға биреп, шунан аҙмы-күпме рента алырға иҫәп тотто. Ә үҙҙәренең туғандарының пай ерҙәрен бергә ҡушып алып, шул майҙанда эш башлаусылар әлегә күп түгел. Өс йыл рәттән килгән ҡоролоҡ та ер эшкәртергә теләүселәрҙе тотҡарлап тороусы фактор булып тора. Арендаторҙар быйыл пай ерҙәрен ҡулланған өсөн пайсыларға натуралата бүлеп бирерлек кимәлдә уңыш та йыя алманы.

Республика законына ярашлы, бүленеп сығарылыусы пай ерҙәренең дөйөм минималь майҙаны 50 гектарҙан да кәм булырға тейеш түгел. Әммә пай ерҙәрен бергә туплап, 100-150 гектар ер бүлеп алыусылар бар.

**В. БӘҘРЕТДИНОВ:** Шул уҡ ваҡытта "Ауыл хужалығы тәғәйенләнешендәге ерҙәр әйләнеше тураһында"ғы Федераль закон үҙ ерен айырып, бүлеп алырға теләүсе пайсыға бар мөмкинлектәрҙе лә бирә. Әгәр, мәҫәлән, Баймаҡ районында пайсыға бирелергә тейешле 6 гектар ерҙә хужалыҡ итеү технологияһы ниндәй ҙә булһа ауыл хужалығы продукцияһын етештереү мөмкинлеген бирә икән, әле беҙҙең республика законында бүлеп алыу өсөн күрһәтелгән минималь майҙан 50 гектар тәшкил итеүенә ҡарамайынса, ошо 6 гектар ер айырым пайсыға мотлаҡ бүлеп бирелергә тейеш.

**И. АҪЫЛҒУЖИН:** Былтыр Көйөргәҙе районында беҙ 29 пайсының ерен бер агрохужалыҡҡа туплап, яҙғы баҫыу эштәрен башҡарып өлгөрә алдыҡ. Беҙгә хужалыҡ итеү мөмкинлектәрен эстән тороп өйрәнеү мөһим ине тәүге йылда. Ҡоролоҡ булыуына ҡарамаҫтан, һәр пай иҫәбенә 30-ар центнер бесән һәм 1-әр тонна ашлыҡ бирелде. Тимәк, бөгөнгө шарттарҙа ла бергәләшеп, ойошҡан рәүештә эш алып бара алған осраҡта, уңышҡа өлгәшеп була. Был пай ерҙәре нигеҙендә шәхси хужалыҡтарҙы ла артабан үҫтереү мөмкинлектәрен табып була, тигәнде аңлата.

**Р. БАЙРАМҒОЛОВ** (фермер): Бына мин дә берәй 1000 гектар ерҙе бик теләп арендаға алыр инем, әммә беҙҙең һауа торошо шарттарында бөтөнләй уңышһыҙ тороп ҡалыу ныҡ хәүефләндерә.

**Р. СӘЙЕТОВ:** Рәмил Рауил улының 3 фермаһы, инкубаторы бар, ул 7 мең ҡаҙ аҫрай. Әлбиттә, әгәр ул ашлыҡ менән үҙен-үҙе тәьмин итә алһа, уға күпкә еңелерәк булыр ине. Әммә беҙҙә ер менән

> ***Бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡ йүнәлешендәге эштәрҙе беҙ бөгөн өҫтөнлөклө, тип танырға тейешбеҙ. Әгәр ошо өлкәлә үҫеш булмаһа, ауыл кешеләренең тормошо алға бармаясаҡ. Әлбиттә, бәләкәй эшҡыуарлыҡты үҫтереү менән дәүләт органдары ла, муниципаль властар ҙа шөғөлләнә. Әммә тиҫтәләрсә йылдар дауамында административ-бойороҡ системаһы ҡарамағында көн итеү күптәребеҙҙең үҙ эшен үҙ аллы ҡора алыу һәләтен юҡҡа сығарған. Шуға күрә башҡорт йәмғәтселегенең төп бурысы - тап ошо юҫыҡта халыҡ менталитетын үҙгәртә алыу, сөнки ауылда йәшәүселәрҙең үҙаңында әлегә тиклем эшҡыуарлыҡҡа яңыса ҡараш нығынып етмәгән.***

**✓ *Берәй ярҙам кәрәк булһа, Ҡоролтайға килә алаһығыҙ. Февраль айынан башлап Бизнес үҙәгендә ҡабул итеү ойошторҙоҡ, райондарҙан килгән эшҡыуарҙарға ҡулдан килгәнсә ярҙам итәсәкбеҙ.***



бәйле башҡа проблемалар ҙа бар. Мәҫәлән, район Хөкүмәттән деградацияға дусар булған 7 мең гектар һөрөнтө ерҙәребеҙҙе болонлоҡҡа әйләндереү программаһына индереүҙе һорай. Был ерҙәргә күп йыллыҡ үлән сәсеп, сабынлыҡ булдырһаҡ, халыҡ өсөн бик ҡулай булыр ине, сөнки беҙҙә малсылыҡ менән шөғөлләнеү уңайлыраҡ. Ошо эште башҡарып сығыу өсөн 26 миллион һумлыҡ инвестиция талап ителә.

Райондың 130 мең гектар һөрөнтө еренең 100 мең гектары ла игенселек тармағы өсөн етерлек. Беҙ теләге булған һәр кемгә сабынлыҡтарҙы ла, игенселек өсөн һөрөнтө ерҙәрҙе лә бирергә әҙербеҙ, ауыл биләмәләренә сығып, халыҡты өгөтләп тә йөрөйбөҙ.

**И. ЙОМАҒОЛОВ (эшҡыуар)**: Өс йыл элек йорт ҡуяндарын үрсетеп, эшҡыуарлыҡ итеүҙе башлап ебәргәнмен. Был йәһәттән күплап мал үрсетмәк кәрәк?

нисек итеп күпләп мал үрсетмәк кәрәк?

**Р. СӘЙЕТОВ:** Былтыр районыбыҙҙан старт-ап кредитын ни барыһы 1 кеше генә алды. Исмаһам, ошондай кредиттарҙы райондар буйынса тигеҙ бүлеүҙе йәмәғәт ойошмалары контролгә алһын ине. Юғиһә, бөтөн республика өсөн бүленгән кредиттарҙың 70 проценты, мәҫәлән, бер Туймазы тарафтарына ебәрелә.

**И. АҪЫЛҒУЖИН:** Мин урындарҙа эшҡыуарлыҡ структураһының бер яҡлы үҫеш алыуы менән килешә алмайым. Һеҙҙә, мәҫәлән, уның яртыһынан күберәге сауҙа итеүгә тура килһә, 17 проценты - ауыл хужалығы продукцияһын етештереү һәм эшкәртеүгә, 13 проценты - эшкәртеү сәнәғәтенә һәм файҙалы ҡаҙылмалар сығарыуға, 4 процент самаһы көнкүреш хеҙмәтләнеүгә бара. Был - урта эшҡыуарлыҡҡа булышлыҡ итеү үҙәгенән һеҙҙең менән осрашыуға бер белгес тә килергә теләк белдермәне, улар Федераль үҙәктән әлегә тиклем финанс бүленмәүенә һылтана.

**В. БӘҘРЕТДИНОВ:** БР Президенты Рөстәм Хәмитовтың республикала бәләкәй эшҡыуарлыҡты үҫтереүҙе өҫтөнлөклө өлкә итеп ҡарауын онотмайыҡ. Әгәр чиновниктар ҡыбырҙамай икән, был турала Президент хакимиәтенә лә, туранан-тура уның үҙенә лә мөрәжәғәт итергә кәрәк.

**И. АҪЫЛҒУЖИН:** Ғөмүмән, бында ҡаралған мәсьәләләрҙе киң матбуғат саралары аша йәмәғәтселек тикшереүенә сығара алыу мөһим. Йәмәғәт контроле аша байтаҡ ҡына проблемаларҙы ваҡытында хәл итеп буласаҡ.

**Н. ЗАЙЦЕВА (Баймаҡ икмәк бешереү заводы директоры):** Хаҡтар проблемаһы тик беҙгә генә ҡағылмай, ул республика кимәлендә ҡаралырға тейеш. Хөкүмәт беҙгә ноябргә тиклем икмәккә хаҡ күтәрмәҫкә тәҡдим итте, беҙ хаҡтарҙы 15 декабргә тиклем тотtoҡ, шунан һуң ғына бер булкаға 50 тин өҫтәнек. Хаҡтарҙы тотор өсөн рентабеллелек кимәлен - 7,2, һатыуҙағы өҫтәмә хаҡты 4,5 проценттан арттырманыҡ. Төп сеймал - он хаҡы ошо арала ғына 47 процентҡа артты, башҡа хаҡтар тураһында әйттеләр инде. Сибай элеваторында 1-се сортлы ондоң килоһы 12 һум булһа, юғары сортлыһы 13 һум тора. 1 ғинуарҙан һалым ставкаларының да артыуын иҫәпкә алһаҡ, беҙ ни эшләргә тейешбеҙ һуң?

**И. АҪЫЛҒУЖИН:** Был осраҡта берҙән-бер тәҡдим - киң

**Р. СӘЙЕТОВ:** Әлбиттә, ауыл хужалығы тармағында етештерелгән продукцияны һатыуҙа проблемалар бик күп. Элек бер Сибай һөт комбинаты ғына тәүлегенә 300 тоннаға тиклем һөт эшкәртә ала ине. Хәҙер унда сит илдән индерелгән киптерелгән һөт порошогынан балалар аҙығы әҙерләйҙәр. Ә хәҙер фермерҙар һөттө Мәләүезгә, Магнитогорск ҡалаһына, башҡа яҡтарға ташырға мәжбүр. Ә халыҡтан йыйылған һөттө Мәләүездә 3-4 һумға осһоҙораҡҡа алалар. Шундай уҡ һыйырҙан һауып алынған һөт сифатһыҙыраҡ булып сығамы ни инде? Ярай әле, Баймаҡта ҙур ғына ит комбинатын төҙөүсе табылды, ул сафҡа индерелһә, халыҡ һатыу өсөн тәғәйенләнгән малын бында тапшыра аласаҡ. Министрлыҡтарҙың эше тураһында ла тәнҡит һүҙе

# Йәшәтәм, тиһәң...

## ла хуп күр

ры аҫрау менән ҡыҙыҡһынып, Ҡаҙан ҡалаһына ошо тармаҡты өйрәнеүсе ғилми-тикшеренеү институтына барып ҡайтҡайным. Әгәр ҡуян тиреһен етештереүҙе юлға һалһаң, шуны һатыу ғына ла барлыҡ сығымдарҙы ҡаплап, ҡуян итен һатыуҙан саф табыш алып буласаҡ. Әммә был эште башлап ебәреү өсөн ҙур күләмдә кредит алырға кәрәк, ә кредитты залогһыҙ бирмәйҙәр, иң кәмендә 4 миллион һумға баһаланған 300 мини ферман булыуы мотлаҡ. Ауыл кешеһенә был ҡәҙәре аҡсаны туплау мөмкин түгел.

Мин әле өй профилләү эше менән шөғөлләнәм. Барлыҡ йыһаз-станоктарыбыҙ иҫке, уныһын да үҙ ҡулдарыбыҙ менән ҡороп алдыҡ. Былтыр микрофинанслау үҙәгенән кредит алыуға өлгәштем, әммә ул транспортты яңыртыу өсөн генә етте. Алған кредитты ҡайтарҙым, әммә быйыл тағын кредит һорап йөҙәргә тура киләсәк. Ни өсөн бер юлы ҙурыраҡ кредит алып булмай беҙҙә, был үҙе үк етештереү үҫешен тотҡарлай бит?

**И. АҪЫЛҒУЖИН:** Дәүләт ярҙам итһә, һәйбәт, әлбиттә. Әммә үҫеш мөмкинлектәрен эшҡыуар үҙе лә эҙләргә тейеш.

**Р. СӘЙЕТОВ:** Ҙур кредит алыр өсөн залог базаһының да күләмле булыуы мотлаҡ.

**И.ЙОМАҒОЛОВ:** Һеҙ менталитетҡа һылтанып, эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнергә теләүселәр аҙ, тиһегеҙ. Бына эш менән тәьмин итеү үҙәгенә килеүсе йәш кешегә үҙ эшен ойоштороу өсөн ни барыһы 58 мең һум аҡса бүлеү ҡарала. Ҡоролоҡ шарттарында мал аҫырайым тигән кешегә хәҙер мал аҙығын да һатып алырға тура килә. Шул ғына аҡсаға дереүенә тура килә. Бында беҙ етештереү өлкәһендә эшҡыуарлыҡтың үтә аҡрын үҫеүенә шаһитбыҙ.

**С. ИСМӘҒИЛЕВ:** Район ерлегендә кадрҙар етешмәүе, күпме генә тырышһаң да, кредит алып булмауы тураһында ла һүҙ булды. Бына үҙем ойошторған предприятиеға Италиянан һыу ҡойоу линияһы алдырғайным, шунда эшләй алырлыҡ белгестәрҙе лә үҙебеҙгә әҙерләргә тура килде. Кредит алыу мәсьәләһенә килгәндә, үҙ мөлкәтендең 30 процентын залогҡа һалып, 45 миллион һумға тиклем финанс алып була торған дәүләт программаһы бар икәнлеге тураһында әйтер инем. Бындай программа быйыл да эшләйәсәк. Әгәр һеҙҙең документтарығыҙҙы ҡабул итмәйҙәр икән, йәиһә консультация, башҡа берәй ярҙам кәрәк булһа, Ҡоролтайға килә алаһығыҙ. Февраль айынан башлап Бизнес үҙәгендә ҡабул итеү ойошторҙоҡ, райондарҙан килгән эшҡыуарҙарға ҡулдан килгәнсә ярҙам итәсәкбеҙ.

**И. АҪЫЛҒУЖИН:** Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, Бәләкәй һәм

**С. ИСМӘҒИЛЕВ:** Һеҙҙә эшҡыуарлыҡҡа ҡараған 300 предприятиела ни барыһы 8 мең кеше эшләй. 56 меңдән ашыу кешеһе булған Баймаҡ районы өсөн был бик аҙ. Бында ла эшҡыуарлыҡ ныҡ үҫешһефн өсөн ни эшләргә кәрәк һуң?

**Р. ХӨСӘЙЕНОВ (эшҡыуар)**: Мин икмәк бешереү менән шөғөлләнәм, пекарнямда 15 кеше эшләй. Көҙҙән 60 тонна он һатып алғайным, ул ғинуарға тиклем етте. Шул арала ондоң хаҡы тиҫтәләрсә процентҡа артты, майға, башҡа сеймалға, электр энергияһына, бензинға хаҡтар артты, ә икмәк социаль продукт булғас, хакимиәт уның хаҡын күтәрмәҫкә ҡуша. Хәҙер миңә ни эшләргә һуң? Эштәр былай барһа, тауар етештереү менән кем шөғөлләнергә теләр, әйтеүе ҡыйын.

**И. АҪЫЛҒУЖИН:** Һуңғы йылдағы ҡоролоҡ арҡаһында 1 тонна ашлыҡтың хаҡы 4 меңдән 10 мең һумға тиклем күтәрелде. Ошо ситуацияла дәүләт интервенцион фондтағы ашлыҡты баҙарға сығарып, уның хаҡын тотороҡландырырға тейеш ине, әммә ҡыш үтеп бара, ә ашлыҡ интервенциялары әле булһа эшләнгәне юҡ.

матбуғат саралары аша эшҡыуарҙарҙың бөгөнгө проблемалары хаҡында республика етәкселегенә хәбәр итеү. Ә проблема ысынлап та хәл итеүҙе көтә.

**Н. ЗАЙЦЕВА:** Икмәк бешереүселәрҙе йә субсидия бүлеү, йә икмәккә дотация биреү аша ғына банкротлыҡтан ҡотҡарып буласаҡ.

**С. ИСМӘҒИЛЕВ:** Ә был бөгөн мөмкин булмаған хәл, шуға күрә бер ниндәй ҙә махсус субсидиялар булмаясаҡ. Бөтә проблемаларҙы баҙар иҡтисады ҡанундарына таянып ҡына хәл итеп була.

**Р. СӘЙЕТОВ:** Бөтә был проблемалар дәүләт кимәлендә хәл ителергә тейеш. Беҙҙең бәләкәй генә бюджет уҡытыусыларҙың эш хаҡын күтәрергә етһенме лә, торлаҡ-коммуналь хужалығын дотациялауға тотонолһонмо? Ә яғыулыҡ-майлау материалдарына хаҡ туҡтамай үҫкәс, фермер яҙғы сәсеү кампанияһын ниндәй аҡсаға уҙғарырға тейеш һуң? Был һорауҙарҙың барыһына ла яуап табыу талап ителә бөгөн.

**И. АҪЫЛҒУЖИН:** Ә етештерелгән ауыл хужалығы продукцияһын һатыу буйынса проблемалар бармы?

әйтмәйенсә булмай. Ауыл хужалығы һәм Иҡтисад министрлыҡтары, башлыса, контроллек итеүсе һәм статист роленән ары китә алмай бөгөн. Ә улар иң элек төп ойоштороусы, эштәрҙе координациялаусы һәм етештереүселәргә даими ярҙам итеүсе булырға тейеш.

**В. БӘҘРЕТДИНОВ:** Әгәр эшҡыуарҙар бер-береһе менән кооперацияға инһә, уларға күмәкләшеп эш итеүе еңелерәк булмаҫ инеме һуң?

**Р. СӘЙЕТОВ:** Барса ауырлыҡтарҙы үҙҙәре татып ҡарамайынса, эшҡыуарҙар ул хаҡта уйланмаясаҡ. Беҙгә әлегә ул кимәлгә етергә иртәрәк. Президент Рөстәм Хәмитов әйткәнсә, халыҡты колхоз-совхоз системаһында оҙаҡ тотоу кешеләрҙең үҙ аллы эшләй алыу һәләтен юҡҡа сығарған. Әле булһа кемгәлер арҡаланып йәшәргә өмөт итеүселәр күп. Көҙҙән 75 ат юғалғас, вертолет менән Силәбе өлкәһенең Атамановка яҡтарына тиклем осоп барып, өҫтән ҡарап йөрөнөк. Ә уларҙа бөгөн хатта тоҙло ерҙәргә тиклем һөрөлөп бөткән, бер ҡайҙа ла сүп үләндәре баҫҡан баҫыуҙар күренмәй. Кешеләрҙә ихтыяж һәм яуаплылыҡ тойғоһо барлыҡҡа килмәһә, эшҡыуарлыҡ та үҙенән-үҙе генә үҫешмәйәсәк.

***Әлбиттә, ауыл хужалығы тармағында етештерелгән продукцияны һатыуҙа проблемалар бик күп. Элек бер Сибай һөт комбинаты ғына тәүлегенә 300 тоннаға тиклем һөт эшкәртә ала ине. Хәҙер унда сит илдән индерелгән киптерелгән һөт порошогынан балалар аҙығы әҙерләйҙәр. Ә хәҙер фермерҙар һөттө Мәләүезгә, Магнитогорск ҡалаһына, башҡа яҡтарға ташырға мәжбүр. Ә халыҡтан йыйылған һөттө Мәләүездә 3-4 һумға осһоҙораҡҡа алалар. Шундай уҡ һыйырҙан һауып алынған һөт сифатһыҙыраҡ булып сығамы ни инде? Ярай әле, Баймаҡта ҙур ғына ит комбинатын төҙөүсе табылды, ул сафҡа индерелһә, халыҡ һатыу өсөн тәғәйенләнгән малын бында тапшыра аласаҡ. Министрлыҡтарҙың эше тураһында ла тәнҡит һүҙе әйтмәйенсә булмай. Ауыл хужалығы һәм Иҡтисад министрлыҡтары, башлыса, контроллек итеүсе һәм статист роленән ары китә алмай бөгөн. Ә улар иң элек төп ойоштороусы, эштәрҙе координациялаусы һәм етештереүселәргә даими ярҙам итеүсе булырға тейеш.***

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Баймаҡта үткән эшҡыуарҙар йыйылышында уларҙы борсоған байтаҡ мәсьәләләр ҡаралды, уларҙы республика етәкселегенә еткереү зарурлығы билдәләнде. Ҡоролтайҙың Бизнес үҙәге йәш эшҡыуарҙар өсөн Баймаҡта ла, Өфөлә лә махсус курстар уҙғарыу тураһында ҡарар ҡабул итте.**

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ яҙып алды.**

КИТАБЕННАС

# ӨС ЙӨҘ ҘӘ ӨС ХӘҘИС

**Раuил БИКБАЕВ,**
**Башҡортостандың халыҡ шағиры.**

54
Телəгəнендə берəй халыҡҡа хəйерлек,
Аллаһ уны һынап ҡарар иң элек.

55
Өмөт менəн күтəрелгəн ҡулдар
Төшкəн саҡта, булып доға тамам,
Шул өмөттəр ҡыҫыр көйө ҡалһа,
Борсолалыр хатта үҙе Аллаһ.

56
"Нəфсең - яуыз дошман, - тине пəйғəмбəр, -
Нəфсенəн дə ҙур дошман юҡ мəгəр".

57
Күрһəттеңме, əҙəми зат,
Йəтимдəргə рəхим-шəфҡəт?
Йəтимде бит яҡлаусы юҡ,
Күргəне йот, йотҡаны ут,
Артҡа ҡарай - атаһы юҡ,
Алға ҡарай - əсəһе юҡ.
Ашар ине - ашарға юҡ.
Эсер ине - эсəһе юҡ.

Йылы йомшаҡ түшəктəрҙə
Ялдар итеп ятаһы юҡ.
Башҡайында бүреге юҡ,
Өҫтөнə кейер туны юҡ,
Аяғына ҡатаһы юҡ.

Күккə баға - күктəр йыраҡ,
Ергə баҫа - ерҙəр ҡаты.
Ҡаты ерҙəн дə ҡатыраҡ
Таш бəғерҙəр зар илатыр.
Əҙəми зат, кемгə-кемгə,
Миһырбанлы бул йəтимгə!
Мəрхəмəтең əйлəндерер
Ҡара төнөн яҡты көнгə.

58
Ике йөҙлө монафиҡтың
Асылында өс сифаттыр:
Аманатҡа хыянаттыр,
Ялған һүҙҙер, боҙоҡ анттыр.

59
Һарандың да һараны шул кешенең -
Сəлəм бирергə лə тора тешегеп.

60
Ҡиəмəттə ғазаптарҙың иң ҡатыһын
Күрер ҡанһыҙ - мəрхəмəтһеҙ ил башлығы.

61
Ашау-эсеү булыр харам
Алтын-көмөш һауыттарҙан.

62
Мəрхəмəтһеҙгə мəрхəмəт булмаҫ,
Ғəфү итмəгəн ғəфү ителмəҫ.
Үкенгəндəрҙе кисермəгəндең
Үҙенең тəүбəһе ҡабул ителмəҫ.

63
Əҙер бурысты йомарлап, тотһаҡ ҡулында,
Яңы майҙан əҙерлəйһең йəбер-золомға.

64
Ғəмəлдəрҙең Аллаһ ҡабул ҡылғандары -
Аҙ булһа ла дауам ителеп торғандары.

65
Иң оло иманың - Аллам тип инаныу,
Унан һуң халҡым тип уйланыу, мең яныу.

66
Был халыҡтан тыуған бала
Ошо халыҡтыҡы була.

67
Аллаһы Тəғəлə һөйгəн
Ике сифат биҙəр холоҡто:
Береһе уның - йомшаҡлыҡтыр,
Икенсеһе - сабырлыҡтыр.

**(Дауамы бар).**

АЛДАР МЕНƏН ЕРƏНСƏ ҠОРО




**Һəр кемдең хəтерендə оҙаҡҡа иҫтə ҡалырлыҡ берəй ваҡиға уйылып ҡала. Был булған хəлде мин бик күп йылдар үтһə лə, бик яҡшы иҫлəйем. Институт тамамлап, яңы ғына эш башлап йөрөгəн мəлдəрҙə булды ул.**

Элек берəйһенең малы ауырып китһə, ярҙам һорап, тура өйгə килə торғайнылар. Бер көндө иртə менəн бергə ҡатнашып йəшəгəн дуҫым килеп инде. "Зəкир, кисə һыйырыбыҙ көтөүҙəн ауырып ҡайтты, барып ҡарай алмаҫһыңмы?" - тине ул иҫе китмəй генə. "Нисегерəк ауырый, эсе ташмағанмы, көйшəйме, ятамы, торамы?" - тип төбəшеп ҡарайым, танышым берҙə генə лə яуап бирергə ашыҡмай. Ахырҙа: "Ярай, Мөбəрəк, һин ҡайта тор, хəҙер дарыуҙар алам да, артынса барып етермен", - тинем.

Дуҫымдың вафатына бик күп йылдар үтте, ауыр тупрағы еңел булһын. Бик тыныс кеше булды ул. Берəй ауыр хəлгə тарыһа ла, ҡыуанысты ваҡиға булһа ла, бошонғанын йə ҡыуанғанын белмəҫһең - бер үк төрлө кисерҙе. Уның менəн малсылыҡта күп кенə йылдар бергə эшлəргə тура килде. Бер ваҡытта ла ашығып йүгереп йөрөгəнен хəтерлəмəйем, шулай булырға тейеш, тиғəн кеүек, көтөү артынан яйлап ҡына атлар ҙа ҡайтыр ине. Мин ферма мөдире булып эшлəгəн саҡта ул колхоз башмаҡтарын ҡараны. Йəйҙең эҫе бер мəлендə был,"Зəкир срочно килеп етһен, башмаҡтар ҡасып таралып бөттө", тип сəлəм əйтеп ебəргəн. Мөбəрəктең ярҙамсы көтөүсеһе менəн икəүлəп йəйлəүгə киттек. Төш ваҡыты. Ҡояш ҡыҙҙыра. Мөбəрəк дуҫым тирлəп-бешеп малсылар йəшəгəн будкала рəхəтлəнеп йоҡлап ята.

- Малдарың ҡайҙа? - тим.

- Башмаҡтар ни, бызыҡайлап ҡасты ла бөттө, - ти был.

- Бөтəһе лə бер ыңғай ҡасмағандыр, моғайын. Ҡалғандарын, исмаһам, кəртəгə бикләргə кəрəк ине. Халыҡтан йыйған малдар ҙа бар, хəҙер уларын ҡалайтып йыйып алаһығыҙ? - тип ныҡышам.

- Эйе шул, шулайтырға кəрəк булған. 20-30-лағаны сығып ҡасҡас, мин ни будкаға индем дə йоҡларға яттым, - ти дуҫым иҫе лə китмəйенсə.

Əле лə Мөбəрəктең ул-был хəлгə артыҡ эсе бошоп бармауын иҫлəп, һыйырҙарына бер нəмə булып ҡуймаһын, тип, тиҙ генə ветеринар сумкаһын артмаҡлап, уларҙың өйөнə ашыҡтым. Мин барғанда Мөбəрəк əле ҡайтып етмəгəйне. Ҡатыны минең шулай оҙаҡлауыма ризаһыҙлыҡ белдерҙе. Ауырып ятҡан һыйырҙы ҡарай башлауға, бошонмаҫ дуҫым да ҡайтып инде. Быҙау яңылыш килгəн дə, һыйыр, бахыр, быҙаулай алмай интегə икəн. "Кисə үк əйтергə кəрəк ине, һуңлағанһығыҙ. Хəҙер һыйырҙы һуйыуҙан башҡа əмəл юҡ", - тинем аптырап. Ысынлап та, хайуандың хəле мөшкөл. Шулай ҙа быҙауҙың тере икəнлеген белгəс, һыйырҙың эсен ярырға батырсылыҡ иттем. Быҙау тере ҡалды.

Ошо ваҡиғанан һуң ике йыл тирəһе ваҡыт уҙғас, һыйыр ауырый, тип, Мөбəрəк дуҫым яңынан килгəн. Малға тейешле ярҙам күрһəткəс, өй хужаһы менəн һөйлəшеп торабыҙ.

- Мөбəрəк, Зəкир ҡайттымы шул? - тип, ҡатыны һорай.

- Ҡайтмағанмын даһа, бына күҙ алдыңда торам. Əллə күрмəйһеңме? - тим, аптырап.

Был икəү көлə башланы. Мин бер ни аңламайым.

- Зəкир, һин анау йылы һыйырҙың эсен ярып, быҙауын алғайның бит, шул быҙауға һинең исемеңде ҡуштыҡ, - тип, Мөбəрəктең ҡатыны Ҡобора барын да аңлатып бирҙе.

Тапҡандар көлөр нəмə, тип, бер аҙ үпкəлəп ҡайтып киттем. Беҙҙең халыҡта малға исем ҡушыу йолаһы бар барлығын. Ғəҙəттə, үгеҙ быҙауҙарҙы Мишка тип исемлəйҙəр, орғасы булһа, Машка тип йөрөтəлəр. Зорька, Марта тиһəлəр, бер асыу. Кеше исемен малға ҡушҡандарын ишеткəнем юҡ ине. Асыуланырлыҡ та шул, хəҙер урамда һайын һыйырҙарын "Зəкир, һəү-һəү" тип саҡырасаҡтар бит. Нисəмə йылдар буйы... Шулай уйланып ҡайтып бара инем, һыйырын ҡыуып ҡайтып килеүсе бер ҡатын, йөнде үртəп:

- Зəкир, кисə Ҡобора һинең бер нəмəңде ҡуймай урам буйлап əрлəп ҡайтып бара ине, əллə ирештегеҙе? - ти.

Бынан алда ла Ҡобораның минең турала насар һүҙҙəр əйтеүе тураһында ишеткəнем бар ине. Баҡтиһəн, минең исемде йөрөткəн таналары көтөүҙəн өйгə ҡайтмайынса, тура баҫыуға һыпырта икəн. Ə Ҡобора таяғын болғай-болғай, "Зəкир, ҡорогор, фəлəн дə төгəн", тип, тегене баҫтыра икəн. Кеше күҙенə күренергə ояла башланым хатта, үəлləһи. Шунан Хоҙайҙан һорай башланым: "Эй, Аллам, шул һыйырҙарына берəй нəмə булһын да, һуйып ҡына алһындар".

Бер көндө эштəн ҡайтыуыма Мөбəрəк дуҫым беҙҙең ҡапҡа төбөндə көтөп ултыра.

-Зəкир, теге һинең исемеңде ҡушҡан тана ауырып китте лə һуйып алдыҡ. Итен тапшырырға справка кəрəк ине, - ти.

- Нисə справка кəрəк, берəүме, икəүме? Кəрəк булһа, бишəү итеп бирəм, - тим ҡыуаныстан.

- Ниңə ул тиклем ҡыуанаһың, əллə бер ни булдымы? - ти дуҫым аптырап.

- Эйе, - тим.

Əммə дуҫым минең ниңə ҡыуанғанды аңламай ҡайтып китте. Шул көндəн мин дуҫымдың ҡатынынан əрлəнеүҙəн ҡотолдом.

**Зəкир НИҒМƏТУЛЛИН.**
**Əбйəлил районы Хəлил ауылы.**

**Əйткəндəй, мал табиптары темаһына тағы ла бер нисə лаҡап тəҡдим итəбеҙ. Былары ла - Əбйəлил районынан.**

## ИҘЕП ЭС

Ике күршенең береһе мал табибы булып эшлəгəн, икенсеһе дауаханала кешелəрҙе дауалаған. Осрашҡан һайын мал табибы күршеһенə зарлана икəн: "Һиңə рəхəт, кешелəрҙəн ҡайһы ере ауыртыуын һорашып белешеп була, ə бына малдар өндəшмəй. Үҙем белеп дауалайым. Бының өсөн ҙур оҫталыҡ кəрəк".

Көндəрҙəн бер көндө мал табибы ауырып киткəн дə баяғы табип күршеһе эшлəгəн дауаханаға килгəн. Табиб бер ни өндəшмəй генə мал табибына аҡ төҫтəге порошок һонған.

- Ə ниңə, ҡайһы ерең ауырта, тип һорамайһың? - тип ныҡышҡан мал табибы.

- Ауырыуының былай ҙа күренеп тора, уның ниməһен һорарға. Ҡайт та ошо порошокты бер биҙрə ашлы һыуға болғап эс, - тиғəн кешелəрҙе дауалаусы табиб.

## КУРИЦА ПОВЕСИЛАСЬ

Мал-тыуар, ҡош-ҡорт үлһə, мал табибтары ғəҙəттə акт төҙөй. Ҡошсолоҡ фермаһындағы бер нисə тауыҡ ҡоймаға осоп менергə маташып, шундағы ярыҡтарға ҡыҫылып үлгəн. Ветеринар оҙаҡ уйлап тормаған, диагнозды үҙенсə яҙған: "Курица повесилась".

## ПРАВИЛЬНО ЯТЫП ҮЛГƏН

Мал-тыуар ҡазаланһа, страховка аҡсаһын алыр өсөн ветеринарҙың справкаһы кəрəк. Ярым наҙан бер əбейгə урыҫсаны икмəк-тоҙлоҡ ҡына белгəн бер ветврач: "Акса позарез кəрəк. Правильно ятып үлгəн был кəзə", тип сыймаҡлап биргəн.

## АКТ - ШИҒЫР

"Ҡыҙыл" колхозы идараһы исеменə яҙылған актты ветврач шиғыр формаһында яҙған:

Үте ташыҡ,
Үпкəһе шешек.
Ветврач -
Шөғөров Шафиҡ.

## АЛА ҺЫЙЫРҘАН ҒАРИЗА

"Март айы етте, ашарға бөттө.
Бесəн һорап, Ала һыйырҙан ғариза" - бынаһы ла булған хəл. Элек бит ғаризалар ғəҙəттə туған телдə һəм иреклe яҙылған. Рəсмилек ҡаты булмағас, шаяртыуға ла урын еткəн. Бөгөн яҙып ҡара - аңламаҫтар.

**Исмəғəм ИСМƏҒИЛЕВ əҙерлəне.**

**Үткән көҙ баш ҡала кинотеатрҙары экрандарына сыҡҡан "Ел аулаусы" фильмы республика донъяһында оло бер ваҡиға булды. Төпкөл ауылдан үлем түшәгендә ятҡан яҡын дуҫы Гөлсирә әбейҙең ейәнен эҙләп ҡалаға килеүсе ел тирмәне һаҡсыһы, ауылдаштары араһында "юлдан яҙған кеше" булараҡ дан алған Әхмәт бабайҙың тарихы күптәрҙең йөрәгенә үтеп инде һәм, үҙебеҙҙә лә бынамын тигән милли колоритлы фильм төшөрөргә мөмкин икән дәһә, тигән ҡыуаныслы һығымталар яһатты. Башҡорт тормошон, милли характер үҙенсәлектәрен сағылдырған был фильм тәнҡитселәр, киноиндустрия эшмәкәрҙәре, кино белгестәре араһында ла ыңғай тәьҫир уятты. Шуға ла ғаилә һәм дөйөм кешелек ҡиммәттәренең мөһимлеге, уларҙың аҡса һәм дан-шөһрәттән өҫтөн тороуы тураһында һөйләгән изге һәм яҡты фильмдың режиссерын редакцияға әңгәмәгә саҡырмайынса ҡала алманыҡ. Әйҙәгеҙ, БР кинематографистары союзы етәксеһе, "Башҡортостан" киностудияһының талантлы режиссер-ҡуйыусыһы Айсыуаҡ ЙОМАҒОЛОВ менән кино төшөрөү серҙәренә төшөнөп ҡарайыҡ, булмаһа.**

# ЕЛ АУЛАУСЫЛАР ҘА...

## ҡасан да булһа бәхеткә өлгәшә ул



### Сәхнә артындағы бала саҡ

Актерҙар ғаиләһендә тыуған һәр бала кеүек, мин дә театрҙа, сәхнә артында үҫтем. Атайым менән әсәйем ете айлыҡ сағымдан уҡ гастролдәргә алып сыҡҡан. Шуға ла минең артист һөнәрен һайлауым бер кемде лә аптыратмағандыр, моғайын. Шулай ҙа тәүге һөнәрем - рәссам-биҙәүсе. Сәнғәт училищеһын тамамлап, әрмелә хеҙмәт итеп ҡайтҡандан һуң З. Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт институтының актерҙар бүлегенә уҡырға ингәс, атайымдың бер аҙ кәйефе төштө. "Рәссам шундай яҡшы һөнәр, үҙеңә-үҙең хужаһың. Ә актер кемгәлер бәйле һөнәр, унда һинең яҙмышың менән башҡалар идара итә", - тине ул. Шулай ҙа фатихаһын бирҙе һәм: "Актер булһаң, гел алдынғы бул, юғиһә, һөнәреңдән йәм тапмаҫһың. Ошо шартты үтәһәң генә һөнәрең һиңә бәхет килтерәсәк", тине. Курста Айрат Абушахманов, Рушанна Бабич, Айһылыу Вәлитовалар менән бергә уҡыным һәм беҙ барыбыҙ ҙа актер балалары булараҡ, һөнәребеҙҙең ауырлығын, иҫ киткес хеҙмәт талап иткәнлеген аңлай инек.

Диплом спектакле итеп Шекспирҙың "Ун икенсе төн" комедияһын һайланыҡ. Мин унда Мальволионы уйнаным. Был спектакль театрҙың репертуарына ла инеп китте һәм ҙур уңыш менән барҙы. Уға йәштәр күп йөрөй торғайны. Беҙҙең, дәрттәре ташып торған йәш актерҙарҙың ниндәйҙер сиктәргә һыймай торған фантазияһы был спектаклдә тулыһынса тормошҡа ашты.

### Театрҙан - киноға

З. Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт институтының актерҙар бүлегендә Рифҡәт Исрафилов курсын тамамлап, Башҡорт дәүләт академия драма театрына эшкә килгәндә, Исрафилов үҙе театрҙа режиссер булып эшләмәй ине инде. Режиссер - ул актерҙы ижад юлынан әйҙәп алып барыусы, уны ситтән күреүсе, етешһеҙлектәрен күрһәтеүсе, һәләттәрен үҫтереүсе кеше. Әгәр ҙә бындай кеше юҡ икән, актер күпмелер ваҡыт үҙ ҡаҙанында ҡайнай-ҡайнай ҙа, үҫеш булмау сәбәпле, һүнеп ҡала.

Ул саҡта театрҙа спектаклдәрҙе төрлө урындарҙан саҡырылған режиссерҙар ҡуя ине. Ә бындай режиссерҙың маҡсаты нимәлә? Тиҙ генә, өс-дүрт көн эсендә спектакль ҡуйырға ла, ҡайтып китергә. Ә актерҙар менән эшләү тураһында һүҙ юҡ. Һөҙөмтәлә, актер спектаклдән спектаклгә үҙе уйлап сығарған ниндәйҙер штамптарҙы уйнап тик йөрөй. Былай йөрөү беҙҙе тиҙ ялҡытты, үҙебеҙҙең мөмкинлектәребеҙҙе тулыһынса тормошҡа ашыра алмау ҙа күңелдә ниндәйҙер эске ризаһыҙлыҡ тыуҙырҙы.

Мин түҙмәнем, хыялдар артынан Мәскәүгә киттем. С. Герасимов исемендәге Бөтә Рәсәй дәүләт кинематография институтында (ВГИК) Башҡортостандан килгән маҡсатлы курс белем ала ине, шуға ла был уҡыу йортоноң ятағына, Салауат Вәхитовҡа барып һыйындым. ГИТИС-ка уҡырға инә алмағас, Салауат мине үҙҙәренә саҡырҙы. Документтарымды ВГИК-ка тапшырҙым һәм имтихандар биреп, документалист-режиссер һөнәрен үҙләштерергә тотондом.

Театр актеры булһам да, киноға ҡарата ҡыҙыҡһыныуым бар ине. 1995 йылда ВГИК-ты тамамлап, Булат Йосопов Өфөлә үҙенең диплом эшен төшөргәйне. Ошо "Быяла юлсы" фильмында мин төп ролде уйнағайным, шуға ла был өлкә менән таныш инем. Уйламағанда театрҙан кино сәнғәтенә күсеп китеүемдән һуң "Тормошта һинең менән булған һәр ваҡиға тик яҡшыға ғына" тигән әйтемдең дөрөҫ икәнлегенә тағы бер тапҡыр инанырға тура килде. Шуға ла нимәлер килеп сыҡмаһа ла ҡайғырмайым, тимәк, был мине икенсе, тағы ла кәрәгерәк һәм мөһимерәк юлға сығарасаҡ.

Уҡыған саҡтағы тәүге фильмым "Карауат" тип атала. Уны Ғафури районы Ташаҫты ауылында төшөрҙөк. Икенсе фильм "Башватҡыс" тип аталды, унда минең атайым Илшат Йомағолов төп геройҙы уйнаны. "Башватҡыс" - ул минең бала сағым тарихы, минең тарихым. Был ваҡиға шул тиклем ныҡ хәтеремдә ҡалған, сөнки мин уның арҡаһында тере ҡалдым. Тап шул саҡта мин кинәт кенә үлемдең нимә икәнлеген аңланым һәм ҡапыл ғына олоғайғанымды тойҙом. Был ваҡиғанан һуң мин элекке бала түгел инем инде. "Төндә мөмкин" тип аталған диплом эше күп фестивалдәрҙә иң яҡшы сценарий, иң яҡшы режиссура, иң яҡшы дебют өсөн махсус приздар алды. Әлегә һуңғы эшем - "Ел аулаусы" фильмы. Кино һөйөүселәрҙең ыңғай баһаһына ҡарағанда, ул яҡшы ғына килеп сыҡты булһа кәрәк.

### "Ел аулаусы"

Фильмды башҡорт баҫмалары "Ел тотоусы", "Елғыуар" һ.б. тип, төрлөсә тәржемә итте, ә дөрөҫө - "Ел аулаусы". Ел - ул яҙмыш. Ел кешегә буйһонмаған тәбиғи көс, стихия булған кеүек, яҙмыш та бер нәмәне лә беҙҙән һорап тормай, ул ҡотолғоһоҙ. Ә төп герой ана шундай тәҡдиргә яҙылған, ҡотолғоһоҙ яҙмышты үҙенең ҡулына алырға тырыша һәм маҡсатына ирешә. Ғүмеренең һуңында булһа ла уға уңыш йылмая, ғаилә бәхетенә өлгәшә. Бындай кешеләр арабыҙҙа, бәлки, күп тә түгелдер, әммә бар икәнлеген дәлилләй ҙә инде фильм.

Төп геройҙар - ҡартайған оло кеше һәм йәш сабый - үҙе үк философик төшөнсә. Әлбиттә, кинола ҡартты һәм баланы күрһәт, тамашасының күҙҙәрендә шунда уҡ йәш барлыҡҡа килә, тигән шаярыу бар. Әммә был фильмда улар кешелә йәлләтеү тойғолары уятыу өсөн һайланмаған, бында күпкә тәрәнерәк мәғәнә йәшеренгән. Быуындар бәйләнеше, ғаилә ҡиммәттәре һәр заманда ла юғары баһаланған һәм бөгөн дә ул үҙенең әһәмиәтен юғалтмаған.

"Ел аулаусы"ны кино сәнғәтенең шедевры, тип атап булмай, шулай ҙа ул тамашасыға бик оҡшаны. Фильмда Марат Башаровтан тыш, төп ролдәрҙе башҡарыусыларҙың береһе лә профессиональ актер булманы. Башаровҡа сценарий оҡшаны, ул бик креатив кеше, уның менән эшләүе лә еңел булды. Мәүлитбай Ғәйнетдиновты Рәсәй кино сәнғәте оҫталары "башҡорт Габбены" тип атаны. Марат Башаров уны күргәс "Был фильмда хатта Джигарханян да былай уйнай алмаҫ ине" тип, үҙ баһаһын бирҙе. Сценарийҙы Айҙар Аҡманов менән Андрей Чернышев яҙҙы. Фильмды Ейәнсура районының Юлдаш ауылында ла йылы ҡабул иттеләр. Мин, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, үҙем бара алманым. "Ауылыбыҙҙы бындай бейеклектән күргәнебеҙ юҡ ине, ҡалай матур икән дәһә", тип һоҡландылар, тинеләр.

Фильм әле төрлө фестивалдәрҙә ҡатнашыуын дауам итә. Ҡаҙанда IV халыҡ-ара мосолман киноһы фестивалендә иң яҡшы сценарий өсөн билдәләнһә, Волоколамскиҙа С. Ф. Бондарчук исемендәге VII "Волоколамский рубеж" хәрби-патриотик фильмдар фестивалендә икенсе дәрәжәләге "Кешенең әхлаҡи матурлығын кәүҙәләндергән өсөн" призына лайыҡ булды. Әле ул Ханты-Мансиҙа үткән "Дух огня" IX халыҡ-ара дебют фильмы фестивалендә ҡатнаша.

### Любезники, любизар...

Әлеге ваҡытта мин Наполеон менән һуғышта Рәсәй еңеүенә оло өлөш индергән башҡорт яугирҙары - "Төньяҡ амурҙары" тураһында фильм өҫтөндә эшләйем, материалдар йыйыу менән булышам, тарихсылар, фольклор белгестәре менән әңгәмәләшәм. 2012 йылда билдәләнәсәк ҙур датаға бағышланған был фильмдың заказсыһы булып республика хөкүмәте тора.

Башта уҡ фильмды Яныбай Хамматовтың "Төньяҡ амурҙары" романы буйынса төшөрөргә тәҡдим булғайны. Белеүегеҙсә, романдың төп геройы - Ҡаһым түрә. Уның буйынса материал йыя башлағас, бер ауырлыҡҡа тарыныҡ. Баҡтиһәң, Ҡаһым түрә тураһындағы легенданан тыш, был шәхес тураһында бер ниндәй ҙә яҙма мәғлүмәттәр юҡ. Ә был эште бик ҡатмарлаштыра, шул уҡ ваҡытта еңелләштерә лә, сөнки сценарий яҙғанда фантазияға ирек бирергә була. Ғөмүмән, тарихи ваҡиға, реаль шәхес тураһында нәфис фильм төшөргәндә фантазияға урын бар, тип иҫәпләйем.

Яңы фильм өҫтөндә эшләгәндә шуны ла аңланым: рус мәктәбендә милли телде, тарихты уҡытмаған урында белем алған минең быуын кешеләре, бигерәк тә ҡалала үҫкәндәре, күп нәмә юғалтҡан икән. Өйҙә башҡортса һөйләштек, телде шуға беләм, ә бына тарихты, фольклорҙы мин үҙ аллы өйрәнергә тейеш булғанмын. Бала саҡта гел китапҡа ғына текләп ултырып булмай, үҙегеҙ аңлайһығыҙ. Шуға ла әле йыйып йөрөгән материалдар минең өсөн бик яңы әйбер, үҙемсә ниндәйҙер асыштар яһап, белемемде камиллаштырып, халҡымдың батырлығына мөкиббән китеп йөрөгән көнөм. Был өлкәне яҡшы белгән кешеләр ҙә миңә ихлас ярҙам итә.

Актерҙар йәһәтенән проблемалар бар, сөнки уларҙың барыһы ла драма актерҙары. Сәхнәлә уйнау бер, ә киноға төшөү бөтөнләй икенсе нәмә. Мәҫәлән, мин әлегә Ҡаһым түрәне йәки Буранбайҙы уйнай алырлыҡ актер күрмәйем. Бигерәк тә оло быуын актерҙары араһында киноға төшөргә яраҡлыларын табыуы ауыр. Быны үҙ тәжрибәмдән беләм. "Төндә мөмкин" фильмында ла төп геройҙы актер түгел, ә яҙыусы Мәүлит Ямалетдинов уйнаны. "Ел аулаусы"ның төп геройы Мәүлитбай Ғәйнетдинов 30 йыл Башҡорт дәүләт филармонияһында эшләһә лә, актер түгел. Уны миңә әсәйем тәҡдим итте. Танышып, бер аҙ аралашып, тәүге репетиция һынауҙарҙы үткәргәс, уның тыумыштан актер булғанлығы күренде. Ҙур табыш булды инде беҙҙең өсөн Мәүлитбай ағай.

### Кино - тәрбиә сараһы ла

Заказдан заказға фильм төшөрөү - Башҡортостанда кинематография бар, тигәнде аңлатмай. Биш йылға бер тапҡыр фильм төшөрөү эш түгел инде ул. Фильмдар әҙ төшөрөлә, сөнки насар финанслана. "Башҡортостан" киностудияһы 20 йыл эшләп килһә лә, уның әлегәсә етерлек матди базаһы юҡ. 8 Март поселогында ҙур павильондар менән тотош кинокомплекс төҙөү хыялы бар, әлбиттә. Хатта төҙөлөштө башларға тигән ҡарар ҙа булғайны, әммә илдәге иҡтисади көрсөк быға ҡамасауланы.

Беҙҙең илдә, ғәҙәттә, бюджетты бар өлкәләргә бүлеп бөтәләр ҙә, ҡалғанын мәҙәниәткә бирәләр. Ә мәҙәниәт өлкәһендә киноға ҡалдыҡ-боҫтоҡтар эләгә. Шуға ла Рәсәйҙә кино сәнғәте юҡ, тип әйтһәң дә була һәм бындай мөнәсәбәт менән бер ҡасан да булмаясаҡ.

2009 йылда "Кинематографияны үҫтереү тураһында" ҡарар проекты ла ҡабул ителгәйне. Әгәр ҙә уны асып ҡараһаҡ, дәүләт кинотеатрҙарына ултырғыстар һатып алыу, унда барҙар ойоштороу ҡаралған, ә кино төшөрөү өсөн ниндәйҙер тиндәр генә бүленгән. Шунан был кинотеатрҙар нимә күрһәтәсәк һуң? Америка фильмдарынмы? Үҙебеҙҙең сериалдарҙы, фильмдарҙы, унда таныш йөҙҙәрҙе күрмәйбеҙ икән, был халыҡтың әхлаҡи һәм рухи торошона ла йоғонто яһамай ҡалмай. Мәҙәниәт үҫешенең был төрө киҫелеп ташлана, кешеләр, бигерәк тә йәштәр ниндәй фильмдар бар, шуны ҡарай һәм бөтөнләй икенсе төрлө тәрбиә ала. Был юҫыҡтан ҡарағанда, бөгөнгө хәлебеҙ бигерәк аяныслы. Бөтә донъяла кино коммерция иҫәбенә үҫешә, тик милли фильм коммерция сығанағы була алмай, сөнки милли аудитория бәләкәй. Әммә был беҙҙең милли фильмдар булмаҫҡа тейеш, тигәнде аңлатмай. Рәсәй күп милләтле дәүләт, һәр халыҡтың әйтер һүҙе бар. Шуға ла уны дәүләт ҡайғыртырға тейеш. Шул сағында мин дә ғаиләмде туйындырыу хаҡына милиция тураһында сериал төшөрөп, ситтә йөрөмәҫ инем.

**Ләйсән НАФИҠОВА яҙып алды.**

ИНТЕРНЕТТАН



# РЕКЛАМАҒА ҠАРАП ТА...

## туйып була икән

■ Белгестәр әйтеүенсә, тап цивилизация ҡаҙаныштары кешегә ҙур зыян килтерә. Бөгөнгө кешенең тормошонда гигиена ла, комфорт та бар, әммә сәләмәт булыу өсөн иң кәрәклеһе булған - хәрәкәт юҡ. Хатта балалар ҙа хәрәкәтле уйындарға ҡарағанда компьютер уйындарын хуп күрә. Бөтөн донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы (ВОЗ) үткәргән тикшеренеүҙәрҙән күренеүенсә, Евросоюз илдәрендәге бөтә үлемдәрҙең 10 проценты - аҙ хәрәкәтләнеүҙән. Бындай хәл бөгөн күп илдәрҙә күҙәтелә. Кеше көндәлек тормошонда ни тиклем заманса ҡоролмаларҙы күберәк һәм йышыраҡ ҡуллана, шул тиклем аҙыраҡ хәрәкәт итә. Бындай шарттарҙа, әгәр ҙә кеше үҙенә-үҙе ярҙам итмәһә, фән дә, медицина ла ярҙам итмәйәсәк, ти белгестәр.

■ Вандербилт университеты мәғлүмәттәре буйынса, активлаштырылған күмер ҡабул итеү бөйөрҙәре сирле ауырыуҙарҙы йөрәк-ҡан тамырҙары проблемаларынан ҡотҡара. Бөйөр сирҙәре атеросклерозға һәм йөрәк ауырыуҙарына килтереүе күптән билдәле булһа ла, әлегә тиклем уны дауалауҙың анығ ҡына ысулы юҡ ине. Активлаштырылған күмер, ғәҙәттә, организмды ағыулы матдәләрҙән таҙартыу өсөн ҡулланыла. Нефрологтар фекеренсә, ул бөйөрҙәре сирлеләрҙең һаулығына ыңғай тәьҫир итәсәк. Ғалимдар һынауҙар барышында сирлеләрҙең артериаль баҫымы, холестерин күрһәткесе яҡшырған һәм ҡан тамырҙары шеше ҡайтыуы күҙәтелгән.

■ Ҡулды йылы һауа ағымында киптергән саҡта тирелә микробтар тупланыуы тағы ла арта, тип белдерә Брэдфорд университеты тикшеренеүселәре. Тикшереү барышында белгестәр ҡулдарҙы йыуғандан һуң ҡоротмау ҙа микробтарҙың артыуына килтереүен асыҡлаған. Шуға ла эксперттар дөйөм ҡулланылыштағы урындарҙа ҡул йыуырға тура килһә, уларҙы бер тапҡыр ҡулланыла торған таҫтамал менән һөртөргә тәҡдим итә.

■ Мөһим ҡарарҙарҙы ятып хәл итеү яҡшыраҡ, тип белдерә Австралия ғалимдары. Экспериментта төрлө интеллектуаль һәм белем кимәле төрлө булған 20 кеше ҡатнаша. Уларға 32 башватҡыс тәҡдим ителә, уларҙың яртыһын тороп, яртыһын ятып сисергә кәрәк була. Тикшеренеүҙәр һуңында горизонталь торош иң продуктив, тип табыла. Ғалимдар быны шулай тип аңлата: кеше баҫып торған саҡта унда таныш-белеү һәләте менән бәйле эшмәкәрлек өсөн кәрәк булған норадреналин бүленеп сыға, ул, үҙ сиратында ижади фекерләүҙе аҡрынайта. Ә ятҡан саҡта был матдә аҙыраҡ бүленә һәм мейе яҡшыраҡ эшләй башлай.

■ Британия ғалимдары раҫлауынса, балалар араһында һимереү сиренең күбәйеүенә телевизорҙан күрһәтелгән рекламалар ҙа ғәйепле. Тикшеренеүҙәрҙә ҡатнашыусыларҙың реклама ҡарарға яратыусылары зарарлы аҙыҡты күберәк ашағанлығы һәм шуның арҡаһында һимереүе асыҡланған. Психологтар әйтеүенсә, реклама роликтарындағы рекламаланған аҙыҡ-түлекте ҡулланыусы геройҙар һәр ваҡыт матур, көслө, аҡыллы итеп күрһәтелә. Балалар бигерәк тә йәнһүрәт геройҙары ҡатнашҡан, фантастик сюжетҡа ҡоролған рекламаларҙы яратып ҡарай.

АУЫР ҺОРАУ

# СӘЙӘСӘТКӘ БӘЙЛӘМӘЙЕК-

## ислам ауыр минуттарҙа мөрәжәғәт итә алырлыҡ рухи дин ул

**Һуңғы йылдарҙа беҙҙең йәмғиәттә, киң мәғлүмәт сараларында экстремизм, ваһһабизм, радикаль исламсылар һәм башҡа шундай йүнәлештәр тураһындағы хәбәрҙәргә йыш юлығабыҙ. Гәзит уҡыусылар һорауы буйынса Рәсәй Фәндәр академияһы Философия институты ғилми хеҙмәткәре, философия фәндәре докторы, яҡташыбыҙ Илшат Рәшит улы НАСИРОВ ошо йүнәлештәр тураһында бер аҙ аңлатма бирә.**

### Экстремизм нимә һәм экстремистар кемдәр улар?

Экстремизм - иң киҫкен ҡараштарҙы яҡлау, бигерәк тә ғәмәли эшмәкәрлектә (мәҫәлән, сәйәсәт өлкәһендә). Экстремистарға йәмғиәттә йәшәп килгән ҡағиҙәләргә, нормалар һәм законларға ҡырҡа ҡаршы тороу хас. Экстремизм яҡлылар үҙ маҡсатына өлгәшеү өсөн демагогия, тәртипһеҙлек, граждандыҡ буйһонмауы акттары ярҙамында йәшәп килгән йәмғиәт структураһын тотороҡһоҙландырырға тырыша. Шул уҡ ваҡытта улар көс ҡулланыу алымын киң файҙаланып, власты һәм халыҡты ҡурҡытыу өсөн террористик акттар ойоштора, һәм башҡалар. Улар власть органдары менән үҙ-ара ташламаларға нигеҙләнгән һөйләшеүҙәрҙән, ниндәй ҙа булһа килешеүҙәрҙән һәм компромистарҙан ҡырҡа баш тарта.

### Нимә ул ваһһабизм һәм ваһһабиттар кемдәр?

Ваһһабизм - ул ислам фундаментализмының, йәки "исламдың нигеҙҙәренә ҡайтыу" идеологияһының бер сағылышы. Ваһһабиттар исламдың башланғыс сафлығына ҡайтырға саҡыра, сөнки, улар уйлауынса, мосолман йәмғиәте Мөхәммәт бәйғәмбәр һәм мосолмандарҙың тәүге өс быуыны йәшәгән осорҙағы тәртиптән ситләшә бара. Ваһһабиттарҙың төп маҡсаты - ислам дине традицияларынан башҡа ҡараштарҙы юҡҡа сығарыу. Ҡөрьәндә үҙҙәренсә аңлатыуҙы улар иң дөрөҫө тип раҫларға тырыша. Ислам динен "зарарлы яңылыҡтар"ҙан таҙартыуҙы үҙҙәренең төп бурысы һанап, ваһһабиттар динебеҙҙәге башҡа йүнәлештәрҙең идеяларын һәм ғәмәли яҡтарын (мәҫәлән, мосолман реформаторлығы йәки суфыйсылыҡ) тәнҡитләйҙәр. Ләкин был мосолманлыҡтың үҙ тәбиғәте менән яраша алмай. Ислам диненең теге йәки был йүнәлешенә дөйөм ислам дине ҡиммәттәренә нигеҙләнеп һәм исламда бөтә йүнәлештәрҙең дә тиң хоҡуҡлы булыуынан сығып баһа бирергә кәрәк. Ислам динендә ниндәйҙер бер йүнәлеш дөрөҫ, ә ҡалғандары дөрөҫ түгел, тип билдәләүсе сиркәү кеүек учреждение юҡ. Билдәләнеүенсә, ислам дине күп яҡлы һәм ул фекерҙәр төрлөлөгөн күҙ уңында тота, уның бөтә йүнәлештәре лә тиң хоҡуҡлы. Ә бөтә мосолмандар өсөн берҙәм "идеаль" модель, "дөрөҫ булған" һәм "дөрөҫ бумаған" ислам дине юҡ икән, тимәк, ислам динен ҡабул иткән һәр кем мосолман булып һанала ала, һәм "хаҡ" мосолман йәки "хаҡ булмаған" мосолман тип бүлергә бер ниндәй ҙә нигеҙ юҡ.

Ваһһабизм, ысынлап әйткәндә, ислам дине принциптарын инҡар итеү, исламдың күп кенә нигеҙҙәренең абруйын төшөрөү ул. Атап әйткәндә, исламда тышҡы һәм эске дини иректе таныу бар, ә ваһһабиттар үҙҙәре менән риза булмаған мосолмандарҙы ғәйепләп, уларға ҡаршы сыға.

### Нимә ул радикаль экстремизм? Кемдәр улар радикаль исламистар?

Ҡағиҙә булараҡ, дини нигеҙҙәге экстремизм сәйәсәт менән бәйләнгән, шуға күрә белгестәр "дини-сәйәси экстремизм" тигән терминды ҡуллана. Был - дәүләт ҡоролошон көс менән үҙгәртеүгә йәки власты көс менән ҡулға төшөрөүгә йәки дәүләт суверенитетын һәм территориаль бөтөнлөгөн ҡаҡшатыуға, ошо маҡсатта дини дошманлыҡ һәм күрә алмаусанлыҡ ҡуҙғытыуға йүнәлтелгән дини үҙгәртелгән эшмәкәрлек. Бындай экстремизм демагогия, ялған дини фразеология менән бәйләнгән, сиктән тыш аяуһыҙлыҡҡа һәм агрессияға нигеҙләнгән. Радикаль экстремистар үҙ идеяларына тоғролоҡто раҫлау өсөн хатта ғүмерен бирергә лә әҙер, ләкин бер ниндәй ғәйебе булмаған тыныс граждандарҙы үлтереүҙе ҡаһарманлыҡҡа һанауы ҡыйын.

Ислам экстремистары 2001 йылдың 11 сентябрендә Нью-Йорктағы "игеҙәк" бейек йорттарҙы шартлатҡандан һуң бөтә донъяның киң мәғлүмәт саралары (телевидение, радио һәм гәзиттәр) ислам фундаментализмы һәм ислам терроризмы тураһында һөйләй башланы. Көн дә ошо хаҡта тыңлай торғас, ҡайһы бер кешеләрҙә һәр мосолман үҙ-үҙен үлемгә дусар итеүсе һәм ер йөҙөндәге башҡа диндәр араһында ислам дине экстремизмды таратыусы тигәнерәк ҡараш тыуа.

Иң беренсе сиратта, "фундаментализм" төшөнсәһенең йөкмәткеһенә нимә һалыныуын асыҡларға кәрәк. Был аңлатма, йәки "фундаментализм" догматик, социаль, сәйәси йәки дини нормаларҙы ҡайтанан ҡарау йәки баһалауға юл ҡуймаҫҡа ынтылыуҙы билдәләй. Был тәңгәлдә фундаментализм бик күп диндәрҙә урын алған. Бөгөнгө көндә ислам фундаментализмы нығыраҡ таныш. Уны йышыраҡ ислам терроризмы менән йәнәш ҡуйып ҡарайҙар. Бындай баһа дөрөҫ түгел. Беренсенән, ниндәй генә өлкәлә булмаһын, фундаментализм ҡуйылған маҡсаттарға ирешеү өсөн мотлаҡ рәүештә экстремизм сараларын ҡулланыуҙы талап итмәй. Икенсенән, дини фундаментализм тик ислам диненә генә хас, тип иҫәпләүселәр яңылыша.

Мәҫәлән, Америка Ҡушма Штаттарының үҙендә Библияны төрлөсә тәнҡитләүҙе йәки уның положениеларына яңы үҙгәрештәр индереүҙе инҡар иткән протестант фундаментализмы бик көслө. Шулай уҡ үҙенең маҡсатына ирешеү өсөн тәрбиә алымы итеп террор тактикаһын алған Ирландия республика армияһы (ИРА) католик фундаменталистарынан тора. Хәҙерге Һиндостанда террористик эшмәкәрлеккә мосолман радикалдары ғына түгел, ә һинд радикалдары ла ҡушыла. 1992 йылда һинд радикалдары Айодхье ҡалаһындағы мәсетте емерә. Израилдә лә йәһүд фундаменталистары бар. 1995 йылда ультра уң йәһүд дини һәм сәйәси экстремисы Игаль Әмир Израилдең премьер-министры Ицхаҡ Рабинды үлтерә.

Фундаменталистар ойошмаһы эшмәкәрлегенә өҫтән-мөҫтән генә яһалған күҙәтеү ҙә бер генә дин дә дини уҡыуҙы үҙенә кәрәкле формала боҙоп үҙгәрткән экстремистик ағымдарҙан азат түгеллеген күрһәтә. Ләкин, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ислам диненең асылы тураһындағы ысынбарлыҡты белмәгән хәбәрселәр, һуңынан инде дәүләт чиновниктары йыш ҡына ислам дине башта уҡ агрессив булды, тигән һымағыраҡ фекерҙәр әйтә. Киреһенсә, Ҡөрьәнебеҙ Аллаһы Тәғәлә бөтә кешеләрҙе лә (барыһының да атаәсәһе Әҙәм һәм Һауа) тигеҙ итеп яратҡан, тип раҫлай. Шунлыҡтан, ислам дине универсаль, толерантлы һәм ирекле дин ул.

Шуның өсөн дә дини фундаментализм менән уйҙырма ислам фразеологияһына ышыҡланып эш иткән хәҙерге радикаль ислам экстремистары араһында ҙур айырма бар. Һәр фундаменталист та радикал, йәғни террорсы түгел, һәм һәр террорсы ла дини йәки сәйәси фундаменталист идеялары яҡлы түгел.

Хәҙерге донъяла ислам диненең сәйәси әүҙемлеге, бәхәсһеҙ, үҫә бара. Ләкин бөгөнгө көндә сәйәси яҡтан әүҙем мосолмандар дәүләт менән үҙ-ара килешеп эшләү кәрәклеген талап итеүселәргә һәм дәүләткә ҡаршы ҡаты көрәш алып барыу юлына баҫыусыларға бүленгән. Тәүгеләре үҙҙәренең идеалдарын ер йөҙөндә тыныслыҡ эволюцияһы юлы менән бойомға ашырырға теләһә (динде таратыуҙы легалләштереү иҫәбенә), ҡаршы яҡтар, ислам радикалдары, икенсе динде тотоусы дәүләттәргә (ислам динен тотмаған барлыҡ илдәргә) ҡаршы ҡораллы һуғыш алып барырға әҙер. Улар урталыҡты тотоусы мосолмандарҙы йәки мосолман йәмғиәтендә күпселекте алып торғандарҙы мосолман дине тотмаған дәүләттәрҙең йәмәғәт һәм сәйәси тормошонда ҡатнашырға әҙер булғаны өсөн ғәйепләй.

Шулай булғас, ислам радикалдарына килгәндә инде, бөгөнгө көндә урталыҡты тотоусы исламсылар менән фанаттарса түҙемһеҙ, секталарға бүленгән, көс ҡулланыуға әҙер булған сәйәси, радикал исламсылар араһында ҡапма-ҡаршылыҡ бара. Ә Ҡөрьән көс ҡулланыуға ҡырҡа ҡаршы бит: "Динде мәжбүр итеп тотоу юҡ" ( "Әл-Баҡара", 256-сы аят). Йәғни, ислам диненең сәйәсәткә яҡынлашыуы дини-сәйәси экстремизмдың үҫеүенә ярҙам итә.

Бөгөнгө йәмғиәтебеҙҙә социаль-иҡтисади көрсөк, коррупция арҡаһында сәйәси структураның үҙгәреүе, Африка, Азия, Латин Америкаһындағы үҫешкән илдәрҙең ҙур ғына өлөшөндә йәшәү кимәлененң насарайыуы, властың дини һәм башҡа фекерҙәргә баҫым яһауы, сәйәси оппозиция, милли һәм дини билдәләр буйынса дискриминациялау, ҡуйған бурыстар һәм маҡсаттарын тиҙерәк тормошҡа ашырырға ынтылыусы (ҡайһы берҙә уйҙырма, йәғни тормошҡа ашмаҫлыҡ)

***✓ Башҡорттар - дини фанатлыҡтан азат кешеләр. Башҡорт халҡының Салауат Юлаев, Әхмәт Зәки Вәлиди кеүек танылған вәкилдәре динде бер ҡасан да ыҙғыш-талаш, бер-береһенә ҡаршы тороу сараһына әүерелдермәне.***

сәйәси берекмәләр һәм дини төркөмдәр лидерҙарының власты яратыуы, мин-минлеге һәм башҡалар дини-сәйәси экстремизмға илтеүсе объектив сәбәптәр булып тора.

Шулай итеп, мосолман донъяһында һәм Рәсәйҙә дини-сәйәси экстремизмдың көсәйеүенә булышлыҡ итеүсе сәбәптәр араһында власть вәкилдәре тарафынан дини һәм милли әҙселектең хоҡуҡтарын боҙоуҙы, элек-электән килгән этник конфликттар, власть органдарындағы коррупция, көс структураһы вәкилдәренең баш-баштаҡлығы, хоҡуҡи нигилизм, шулай уҡ диндәр араһындағы ҡаршылыҡтарҙы көсәйтергә тырышыусы сит ил дини эшмәкәрҙәренең эшмәкәрлеген дә һанап китергә мөмкин. Халыҡтың социаль яҡтан насар йәшәгән өлөшө, бигерәк тә эшкә урынлашыуға мөмкинлеге булмаған эшһеҙ йәштәр ислам радикалы булып китә.

Йәмғиәт һәм дәүләт дини-хоҡуҡи экстремизмға ҡаршы көрәш алып барырға тейеш. Иң беренсе сиратта дәүләт социаль-иҡтисади һәм сәйәси шарттарҙы (эшһеҙлек, коррупция, хоҡуҡ һаҡлау структураһы вәкилдәре тарафынан законлылыҡты боҙоу һәм башҡалар) яҡшыртырға һәм бөтә законлы алымдар ярҙамында экстремистарҙың йәшертен эшмәкәрлегенә ҡаршы көрәшергә тейеш. Йәмғиәтебеҙ йәмәғәт һәм дини берекмәләр йөҙөндә дини-сәйәси экстремизмға ҡаршы граждандлыҡ ҡиммәттәрен (динде ирекле тотоу, асыҡлыҡ һәм килешеүсәнлек) яҡлау юлы менән көрәшергә тейеш. Динден гуманлы булырға тейешлеген аңлатыу эше алып барыу фарыз.

### Ислам ышығында экстремистар нимәгә өлгәшергә ынтыла?

Дини-хоҡуҡи экстремистар яҡлыларға килгәндә инде, үрҙә әйтеп үтелгәнсә, уларҙың эшмәкәрлеге көс ҡулланып дәүләт ҡоролошона үҙгәрештәр индереүгә, дәүләттең суверенитетын һәм территориаль бөтөнлөгөн боҙоуға, ошо маҡсатта дини дошманлыҡ һәм күрә алмаусанлыҡ уятыуға йүнәлтелгән. Ислам радикалдары хәрәкәтенең маҡсаты - бөтә донъя Ислам дәүләте (Хәлифәт) төҙөү. Икенселәй әйткәндә, белә тороп, тормошҡа ашмаҫ идея яҡлылар хәҙерге илдәр урынына, иң беренсе сиратта, мосолман динен тотоусылар менән бик ҙур Ислам дәүләте төҙөмәк була. Бында бөгөнгө бойондороҡһоҙ илдәрҙең территориаль бөтөнлөгөн боҙорға тырышыу ҙа күҙҙә тотола.

### Йәштәргә нимәнән һаҡланырға кәрәк?

Һуңғы ваҡытта таралып киткән төрлө "ислам белгестәре" менән аралашыуҙан һаҡланырға кәрәк. Ысынын әйткәндә, уларҙың күптәре ислам дини тәғлиматтәре өлкәһендә белгес түгел, ғәрәп телен белмәйҙәр, шулай булғас, ислам дине ғилемен һәм хоҡуҡтарының ике төп сығанағы булған Ҡөрьәнде һәм Сөннәне (бәйғәмбәребеҙ Мөхәммәттең һүҙҙәре һәм эшләгән эштәре тураһында риүәйәттәр йыйынтығы) лә белмәйҙәр. Ләкин улар үҙҙәренә уҡымышлы ҡиәфәт бирә белеүсе, үҙҙәренең өгөт-нәсихәттәренә Ҡөрьәндән өҙөктәр һәм Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең хәҙистәрен ҡыҫтырып ебәрә алған яҡшы ғына психологтар. Уларҙы күркәм генә ислам ҡиәфәтенән танырға була (матур итеп үҫтерелгән һаҡал, Урта Азия йәки ғәрәп илдәрендә кейелгән кейем). Ғәрәп телен өҫтәнмөҫтән генә белгән йә иһә бөтөнләй белмәгән был "белгестәр" Ҡөрьәндең тәржемәһенә ҡарап үҙҙәренең "фекерен" һөйләй башлай.Беҙҙең күпселек граждандарыбыҙҙың үҙ диненең база нигеҙҙәрен белмәүе арҡаһында ғына улар үҙ ҡараштарын пропагандалауҙа ниндәйҙер уңышҡа өлгәшә ала. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, 70 йыл буйы халыҡты көсләп атеист итеп, элекке СССР мосолмандары ислам дине һәм мәҙәниәте буйынса белемһеҙ ҡалды.

Мәсеткә йөрөүҙән баш тартыуға сәбәптәр юҡ. Киреһенсә, мәсет - дин тотҡан кешенең үҙенең фекерҙәштәре менән осрашып, үҙ диненең коллектив йолаларын башҡарыу урыны ул. Кешеләр мәсеткә йөрөүҙән ҡурҡмаһын, күп кенә мәсеттәр (мәҫәлән, Өфө ҡалаһының Туҡай урамындағы) ҡартатайҙарыбыҙ һәм ҡартәсәйҙәребеҙ йөрөгән мәсет бит. Мәсеттәребеҙҙе ситтән килгән ялған исламсыларға йәки урындағы халыҡ араһынан сыҡҡан уларҙың ҡуштандарына һатыуға юл ҡуймаҫҡа кәрәк. Иң беренсе сиратта исламда һәр ағым да тигеҙ хоҡуҡлы икәнен оноторға ярамай һәм "хаҡ мосолмандар" һәм "хаҡ булмаған мосолмандар"ға бүлеүҙе ислам дине инҡар итә. Шуға күрә, "хаҡ ислам дине" һәм "хаҡ түгел ислам" тураһында кемдәрҙәндер раҫлауы һәм мосолмандарҙы бер-береһенә ҡаршы ҡуйырға тырышыу ислам динендә була торған хәл түгел. Был бәйләнсек "ислам белгестәре"нән ислам диненә ҡайҙа уҡыуҙарын, юғары ислам уҡыу йорттарын тамамлау тураһында дипломдарын, ғәрәп телен белеү-белмәүҙәрен, өҫтәмә гуманитар йәки техник белемдәре булыу-булмауы тураһында туранан-тура һорарға кәрәк. Ҡағиҙә булараҡ, уларҙың күпселеге ошондай ябай ғына тест-имтиханды ла күтәрә алмай.

Һәм һәр ваҡыт шуны иҫтә тоторға кәрәк, башҡорттар - дини фанатлыҡтан азат кешеләр. Башҡорт халҡының Салауат Юлаев, Әхмәт Зәки Вәлиди кеүек танылған вәкилдәре динде бер ҡасан да ыҙғыш-талаш, бер-береһенә ҡаршы тороу сараһына әүерелдермәне. Салауат Юлаев мосолмандарҙың һаҡалы ниндәй оҙонлоҡта йәки түбәтәйҙе нисек кейергә тип һүҙ көрәштергән өсөн түгел, ә ул үҙ халҡын батша залимдарынан һаҡлағаны, унын ерҙәрен, хоҡуғын яҡлағаны өсөн милли герой тип танылды. Әхмәт Зәки Вәлиди исламды тормоштоң ауыр минуттарында мөрәжәғәт итә алырлыҡ рухи дин тип иҫәпләне һәм динде сәйәсәткә бәйләүгә ҡырҡа ҡаршы сыҡты. Ул диненә, милләтенә һәм сәйәси ҡараштарына ҡарамаҫтан, закон алдында бар халыҡтың да тиң булыуы яҡлы булды.

**Ринат ИМАНҒОЛОВ**
**әңгәмәләште.**

МОСОЛМАН ДОНЪЯҺЫ

# ИСМИ ӘҒЗӘМ ДОҒАҺЫ

**Аллаһы Тәғәләнең Ҡөрьән китабында: "Минән донъя, Әхирәт хәжәттәрегеҙҙе һорағыҙ, Мин һеҙҙең теләктәрегеҙҙе ҡабул итермен", тигән вәғәҙәһе бар. Бәйғәмбәребеҙ бер хәҙисендә: "Аллаһы Тәғәләнең 99 күркәм исем сифаттары бар, шул исемдәрҙе әйтеп доға ҡылығыҙ, ул исемдәр араһында шундай исемдәр йәшерелгән, әгәр бәндә уны зекер итеп доға ҡылһа, теләге, һис шикһеҙ, ҡабул булыр", - тиелә. Был хәҙистә халҡыбыҙ тарафынан күп йылдар буйына яратып уҡылған Исми Әғзәм доғаһы тураһында һүҙ бара. Был доғаны гәзитебеҙҙә бирә килдек, бынығы - аҙаҡҡыһы, йомғаҡлау һүҙе. Уны мөмкинлек булған һайын ҡабатларға тырышығыҙ.**

"Бисмилләһир-рахмәнир-рахим!

Йәә Аллааһү, йәә Рахмәәнү йәә Аллааһү, йәә Рахиимү йәә Аллааһү, йәә Мәлиикү йәә Аллааһү, йәә Ҡүддүүсү йәә Аллааһү, йәә Сәләәмү йәә Аллааһү, йәә Мүьмиинү йәә Аллааһү, йәә Мүһәймиинү йәә Аллааһү, йәә Ғәзиизү йәә Аллааһү, йә Жәббәәрү йәә Аллааһү, йәә Мүтәкәббирү йәә Аллааһү, йәә Хааликү йәә Аллааһү, йәә Бәәрийү йәә Аллааһү, йәә Мусаүүирү йәә Аллааһү, йәә Ғаффәәрү йәә Аллааһү, йәә Ҡаһһәәрү йәә Аллааһү, йәә Үәһһәәбү йәә Аллааһү, йәә Раззәәҡү йәә Аллааһү, йәә Фәттәәхү йәә Аллааһү, йәә Ғәлиимү йәә Аллааһү, йәә Ҡаабидү йәә Аллааһү, йәә Бәәситү йәә Аллааһү, йәә Хафииҙү йәә Аллааһү, йәә Раафиғү йәә Аллааһү, йәә Мүғиззү йәә Аллааһү, йәә Мүзиллү йәә Аллааһү, йәә Сәмииғү йәә Аллааһү, йәә Басиирү йәә Аллааһү, йәә Хәкәәмү йәә Аллааһү, йәә Ғәдүүлү йәә Аллааһү, йәә Латиифү йәә Аллааһү, йәә Хәбиирү йәә Аллааһү, йәә Хәлиимү йәә Аллааһү, йәә Ғәзиимү йәә Аллааһү, йәә Ғафүүрү йәә Аллааһү, йә Шәкүүрү йәә Аллааһү, йәә Ғәлийү йәә Аллааһү, йәә Кәбиирү йәә Аллааһү, йәә Хафиизү йәә Аллааһү, йәә Муҡиитү йәә Аллааһү, йәә Хәсиибү йәә Аллааһү, йәә Жәлиилү йәә Аллааһү, йәә Кәриимү йәә Аллааһү, йәә Раҡиибү йәә Аллааһү, йәә Мужиибү йәә Аллааһү, йәә Үәсииғү йәә Аллааһү, йәә Хәкиимү йәә Аллааһү, йәә Үәдүүдү йәә Аллааһү, йәә Мәжиидү йәә Аллааһү, йәә Бәәғисү йәә Аллааһү, йәә Шәһиидү йәә Аллааһү, йәә Хәәҡҡү йәә Аллааһү, йәә Үәкиилү йәә Аллааһү, йәә Ҡәүийү йәә Аллааһү, йәә Мәтиинү йәә Аллааһү, йәә Үәлиийү йәә Аллааһү, йәә Хәмиидү йәә Аллааһү, йәә Мүхсийү йәә Аллааһү, йәә Мүбедийү йәә Аллааһү, йәә Әхәәду йәә Аллааһү, йәә Мүғиидү йәә Аллааһү, йәә Мүхийййү йәә Аллааһү, йәә Мүмиитү йәә Аллааһү, йәә Хәийү йәә Аллааһү, йәә Ҡәйүүмү йәә Аллааһү, йәә Үәәжидү йәә Аллааһү, йәә Мәәжидү йәә Аллааһү, йәә Үәхиидү йәә Аллааһү, йәә Әхәәдү йәә Аллааһү, йәә Самәәдү йәә Аллааһү, йәә Ҡадиирү йәә Аллааһү, йәә Мүктәәдирү йәә Аллааһү, йәә Мүҡәәддәәмү йәә Аллааһү, йәә Мүәхиирү йәә Аллааһү, йәә Әүүәәлү йәә Аллааһү, йәә Әәхиирү йәә Аллааһү, йәә Ҙаһиирү йәә Аллааһү, йәә Бәәтийнү йәә Аллааһү, йәә Үәлииү йәә Аллааһү, йәә Мүтәғәәлииү йәә Аллааһү, йәә Баррийү йәә Аллааһү, йәә Тәүүәәбү йәә Аллааһү, йәә Мүнтәҡҡиимү йәә Аллааһү, йәә Ғәфүү йәә Аллааһү, йәә Рауфүү йәә Аллааһү, йәә Мәәлиикәл-мүлки йәә Аллааһү, йәә Ҙүл-Жәләәли үәл Иҡраам йәә Аллааһү, йәә Муҡсиитү йәә Аллааһү, йәә Жәмииғү йәә Аллааһү, йәә Ғәнийү йәә Аллааһү, йәә Мүғнииү йәә Аллааһү, йәә Мәәнииғү йәә Аллааһү, йәә Дарриү йәә Аллааһү, йәә Нәәфииғү йәә Аллааһү, йәә Нууру йәә Аллааһү, йәә Һәәдийү йәә Аллааһү, йәә Бәдииғү йәә Аллааһү, йәә Бәәҡийү йәә Аллааһү, йәә Үәәриисү йәә Аллааһү, йәә Рашиидү йәә Аллаһү, йәә Сабууру йәә Аллааһү.

Аллааһүммә инниии әсъәлүкә бихәҡҡи һәәҙиһил әсмәәү күллиһәә әң түсаллийә ғәләә Мүхәммәдиү-үә ғәләә әәли Мүхәммәд үәрхәм Мүхәммәдәү-үә ғәләә әәли Мүхәммәд үәрхәм мүхәммәдәү-үә ғәләә әәли Мүхәммәд кәмәә сал-ләйтә үә сәлләмтә үә бәәрактә ғәләә Ибрааһиимә үә ғәләә әәли Ибрааһиимә фил ғәәләмииин.

Раббәнәә иннәкә хәмииддүм мәжиид. Бирахмәтикә йәәәә әрхәмәр-раахимииин. Амин".

УҢЫШ ҠАҘАН



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Һеҙҙе тотҡарлаусы хәүефтән һәм фобиянан арыныу

Бер ни тиклем асыҡлыҡҡа эйә булғас, тормошоғоҙ көндән-көн яҡшыра барасаҡ. Теләктәрегеҙ шул тиклем тиҙ тормошҡа ашасаҡ, хатта һеҙ быны тоймаясаҡһығыҙ ҙа. Һуңғы хәл-торошоғоҙ элекке алама ғәҙәттәрҙе икенсе төрлө программалаштырыуға бәйле буласаҡ. Насар ғәҙәттәр йоғонтоһонан арынығыҙ һәм шунда уҡ алға китәсәкһегеҙ. Һеҙҙе нимә шикләнеүсән, тынғыһыҙ итә, шулар алға китешегеҙҙе, асылышығыҙҙы тотҡарлай.

Бына һеҙҙең көндәлек хәл-тороштар. Уларҙың ҡайһыһылыр башҡаларына ҡарағанда әҙерәк оҡшай икән, уны билдәләгеҙ йәки үҙегеҙгә хас булғандарын исемлектә ҡалдырығыҙ.

- Һеҙ самолетта осаһығыҙ
- Һеҙ бик бейектән ҡарайһығыҙ
- Һеҙ бәләкәй генә бүлмәләһегеҙ
- Һеҙ аудиторияға мөрәжәғәт итәһегеҙ.
- Һеҙ кем менәндер мөхәббәт мөнәсәбәттәренә инәһегеҙ
- Һеҙ үҙегеҙгә ниндәйҙер йөкләмә алаһығыҙ
- Һеҙ аҡса туҙҙыраһығыҙ
- Һеҙ яңы кешеләр менән осрашаһығыҙ.

Был хәл-тороштоң бер-нисәһе генә, әммә тормошта улар йөҙҙәрсә булыуы мөмкин. Әгәр атап үтелгәндәр һеҙҙә кире тойғолар тыуҙырмай икән, яҡшылап уйлағыҙ, нимә һеҙҙең уйҙарығыҙҙа тәртипһеҙлек тыуҙырыуы мөмкин. Бындай ҡурҡыуҙың сәбәптәре нимәлә һуң?

1. Һеҙ күңелле булмаған ваҡиға кисергәнһегеҙ.
2. Кем менәндер насар нәмә булған.
3. Һеҙгә бындай хәлдең үҙегеҙ менән дә булыу ихтималлығын әйткәндәр.

Әгәр был сәбәптәрҙе үҙегеҙҙең башығыҙҙа эҙләһәгеҙ, тиҙҙән табырһығыҙ ҙа, сөнки улар төпкө анда - "өйөгөҙҙә" (соланда, подвалда) һаҡланыуы мөмкин. Шундай урынды табығыҙ, юҡ икән, уны бар тип күҙ алдына килтерегеҙ. Хәҙер инде һеҙгә ни бары тулы ҡанлы тормош менән шатланырға, Илаһ менән бәйләнешкә инергә ҡамасаулаған барлыҡ ҡурҡыу һәм фобия сәбәптәрен һепереп түгергә генә кәрәк буласаҡ.

Көсөргәнештән арынып һәм "өйөгөҙҙәге" ҡурҡыу тойғоһон иҫкә төшөрөп тороусы бер генә сүпте лә ҡалдырмайынса таҙартҡанһығыҙ икән тип күҙаллағыҙ. Түбәндәге инструкцияны яҡшылап уҡығыҙ, нимә эшләргә кәрәклеген иҫегеҙҙә ҡалдырығыҙ.

**Ҡурҡыуҙы һәм фобияны бөтөрөү өсөн күнекмә:**

- Уңайлы итеп ултырығыҙ, өс тапҡыр тәрән итеп тын алығыҙ һәм бер нисә тыныс картинаны күҙ алдығыҙға килтерегеҙ.
- Үҙегеҙҙе соланығыҙҙа йәки подвалығыҙҙа икәнмен һәм унда сүп-сар таҙалайым тип уйлағыҙ. Һеҙ таҙартҡан сүп-сар үҙендә нимәнән ҡурҡаһығыҙ, шуның эҙен һаҡлай. Башҡа сүп-сарҙы ла шулайтып таҙалағыҙ.
- Таҙалап бөткәс, эшегеҙ менән һоҡланығыҙ. Сүп-сарҙан ҡотолоу күңелгә рәхәтлек, еңеллек килтергәнен тойоғоҙ.
- "Хәҙер ҡурҡыу тойғом кәмегәндән-кәмей. Мин һәр көндө тыныс һәм хәүефһеҙ үткәрә алам. Мин үҙемә тулыһынса ышанам. Һәм был ысынлап та шулай", - тип үҙ алдығыҙға ҡабатлағыҙ. Был һүҙҙәргә изге тойғолар һалығыҙ.
- Ҡурҡыуығыҙ кәмегәненә ышаныс тойоп күҙҙәрегеҙҙе асығыҙ.

Күнекмәне бер нисә тапҡыр ҡабатлағыҙ. Хәҙер тормошоғоҙ яҡтыраҡ була башлар. Һеҙ тағы ла асығыраҡ булдығыҙ.

**Роберт СТОУН.**

*БЕЛЕМ УСАҒЫ*

# ҮҘГӘРЕШТӘРГӘ...

## алдан әҙерлән

**Киләһе ике йыл сығарылыш уҡыусыларына БДИ-ла буласаҡ үҙгәрештәргә әле үк әҙерләнә башлау хәйерле. 2012 йылға тиклем кәмендә биш фәндән етди үҙгәрештәр көтөлә. Нигеҙҙә БДИ тестары ҡатмарлашасаҡ. Былтыр уҡ әле БДИ биремдәрендә һиҙелерлек үҙгәрештәр булғайны. Мәҫәлән, мотлаҡ булған төп предметтарҙың береһе - математиканан имтихандың өс өлөштән икәүҙе генә ҡалдырҙылар. Хәҙер уның тәүге өлөшө мәктәпте тамамлаусыларҙың бөтәһе өсөн дә тәғәйенләнә, уны тапшырыу дөйөм урта белем тураһында аттестат алыу өсөн кәрәк. Ә икенсе өлөшө бер аҙ ҡатмарландырылып, вузға уҡырға барыусылар өсөн тәғәйенләнә.Киләсәктә төҙәтмәләр индереү дауам итәсәк, ләкин бының өсөн ваҡыт кәрәк, шуға күрә ул бер-ике йылдан тип көтөлә. Әлегә нигеҙҙә техник йәһәттән үҙгәрештәр әҙерләнә. Быйыл рус теленән имтихандың өсөнсө бүлеген баһалау принцибы ҡәтғиләштереләсәк: хәҙер тикшереүселәр иғтибарынан бер генә хата ла күренмәй тороп ҡалмаясаҡ.**

● Рус теленән имтихандың С өлөшө, мәғлүм булыуынса, бирелгән темаға инша-фекерләү яҙыуҙы талап итә. Быйылдан алып уны ике бойондороҡһоҙ эксперт тикшерәсәк (элек бер генә белгес ине).

Яңы төр баһалама тексты орфография һәм пунктуация йәһәтенән тикшереүҙе көсәйтеү йәһәтенән индерелә. Әгәр эксперттарҙың береһе осраҡлы рәүештә ниндәйҙер хатаны үткәреп ебәргән хәлдә, икенсеһе уны күрмәйенсә ҡалмаясаҡ. Тестың өсөнсө өлөшө өсөн иң юғары баһа - 23 балл, ә бөтә заданиелар өсөн 60 балдан да юғары баһа алып булмай. Тимәк, С өлөшө үҙе генә лә дөйөм эштең өстән бер өлөшөн тәшкил итеп тора.

● Киләһе йыл үҙгәрештәр тарих буйынса биремдәргә ҡағыласаҡ. Бөтә һорау - мәсьәләләрҙе лә бер үк осор ваҡытына туплап, формаль эссе рәүешендә биреү ҡарала. Әлегә иһә тарих буйынса БДИ-ның иң ҡатмарлы өлөшөндәге биремдәр төрлө осор ваҡиғаларына ҡағыла. Ул саҡта уҡыусыларҙың тәҡдим ителгән бер нисә теманан үҙе һәйбәт белгән вариантты һайлап алыу мөмкинлеге була.

Тарих буйынса бик күп объектив һорауҙары булған тәүге ике өлөшөнән айырмалы рәүештә, С өлөшөндә мәғлүмәттәргә түгел, ә һәр кемдең үҙ фекеренә бәйле биремдәр булыуы ихтимал. Шулай уҡ теге йәки бы хәлде анализлаған һәм төрлө факттар һәм хәлдәрҙе сағыштырыуға нигеҙләнгән һорауҙар ҙа буласаҡ. Төшөнсәне асыҡлау буйынса биремдәр ҙә урын аласаҡ. Һөҙөмтәлә имтихан биреүсенең тулы яуаптары эссе рәүешендә ҡабул ителәсәк. Бындай һорауҙар белемде тикшереүҙән бигерәк уҡыусының белеклелеген, булдыҡлылығын асыҡлауға йүнәлтеләсәк.

● 2012 йылда сит телдән БДИ-ла телмәр өлөшө булдырыласаҡ. Имтихан биреүселәргә телдән һөйләү күнекмәләрен күрһәтергә тәҡдим ителәсәк. Ихтимал, элек классик имтихандарҙағы кеүек үк, берәй темаға "топик" һөйләргә ҡушыласаҡ. Имтихан биреүселәрҙең бөтәһен дә тыңларға кәрәк булғанлыҡтан, "телмәр" өлөшө төп имтихандан айырым рәүештә, бәлки, яҙ үткәрелер, ә һөҙөмтәлә имтихандың бөтә өлөштәре өсөн дә балл һандары бергә ҡушып иҫәпләнәсәк.

Белгестәр, "һөйләшеү" блогын индереү оҙайлы әҙерлек талап итә, тип билдәләй. Беренсенән, бының өсөн айырым көн бүлергә, унан имтихан ҡабул итеү пункттары ойошторо у кәрәк буласаҡ. Икенсенән, имтихан тапшырыусыларҙың телмәрен баһаларға тейешле эксперттар кәрәк. Шуға күрә сит телдән был үҙгәрештәр киләһе йылдан да иртәрәк көтөлмәй.

● Тағы ике йылдан физика һәм химиянан имтихан биргәндә, биремдәргә яуаптарҙан тыш, тәжрибәләр үткәрергә лә тура киләсәк. Йәғни теория өлөшө практик ғәмәлдәр менән тулыландырыласаҡ.

Мәҫәлән, алдан әҙерләп ҡуйылған материалдарҙы файҙаланып, имтихан биреүсе тәжрибә үткәрә белергә тейеш. Күренеүенсә, имтихан ҡабул итеүсе пункттар тәжрибә үткәреүгә әҙер булырға тейеш, ә бының өсөн тағы ла ваҡыт кәрәк. Әҙерлек өсөн, тимәк, ике йыл самаһы ваҡыт китәсәк.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА әҙерләне.**

*ҮӘТ, ШУЛАЙ!*

# ПОЛИЦЕЙСКИЙҘАРҘЫҢ...

## милиционерҙарҙан айырмаһы

**1 марттан "Полиция тураһында" яңы Федераль закон үҙ көсөнә ингәндән һуң беҙҙең хоҡуҡ һаҡлаусылар ниндәй булыр?**

**Ул үҙен танытырға хоҡуҡлы.** Ябай кеше менән аралашҡан ваҡытта полицейский үҙенең вазифаһын, исем-фамилияһын, званиеһын әйтергә һәм граждан талап итһә, эш таныҡлығын күрһәтергә бурыслы. Был ҡағиҙәләр элек тә бар ине, тик иптәш милиционерҙар уны бик теләмәй генә үтәне. Тиҙҙән полицейский исем-фамилиялы жетондар йөрөтәсәк, тип вәғәҙә итәләр, ләкин ошо йылдың аҙағына тиклем Эске эштәр министрлығының бындай сығымдарҙы сығарыуы икеле. Юғиһә, полицейскийҙарҙы хатта яңы таныҡлыҡтар менән тик икенсе кварталда ғына тәьмин итәсәктәр, тиҙәр.

**Шылтыратыу хоҡуғы бирергә тейеш.** Полиция хеҙмәткәре гражданға уны ҡулға алыу сәбәптәрен аңлатып бирергә хоҡуҡлы. Полиция хеҙмәткәре тарафынан ҡулға алынған граждан, әгәр ҙә быға тиклем хоҡуҡ һаҡсыларынан ҡасып йөрөгән булмаһа һәм ауыр енәйәтселектә ғәйепләнмәһә, үҙенең яҡындары менән өс сәғәт буйы телефондан һөйләшеү хоҡуғына эйә.

Был Америка тәжрибәһенән үҙләштерелгән. Шулай ҙа бер бәләкәй генә айырма бар. АҠШ-та кешене ҡулға алған ваҡытта уның хоҡуҡтарын уҡып ишеттермәһәләр, бөтә ҡалған ғәйепләүҙәр үҙ көсөн юғалта. Беҙҙә иһә ошо ҡағиҙә үтәлмәгән ваҡытта ла бер ниндәй ҙә хоҡуҡи эҙемтәләр ҡаралмаған.

**Ауырлыларҙы туҡмай алмай.** Яңы закондың күп ҡағиҙәләре уға законға нигеҙләнгән акттарҙан күскән. Полиция хеҙмәткәрҙәренә хатта санкцияланмаған митингыларҙы ла (әгәр улар юлды ҡаплап тормаһа һәм учреждение эшенә ҡамасауламаһа) суҡмарҙар (дубинка), газдар менән тарҡатыу тыйыла. Шулай уҡ "әсә буласағы билдәле ҡатын-ҡыҙға, инвалидтарға һәм сабыйҙарға ҡарата махсус ҡоралдар ҡулланыу тыйыла. Ләкин бында ла "граждандарҙың һәм полиция хеҙмәткәрҙәренең ғүмеренә һәм һаулығына ҡурҡыныс янаған күмәкләп йәки башҡа төрлө һөжүмдәр булмаған осраҡта" тигән иҫкәрмә иҫәпкә алынған.

**Өйҙәргә кеше ғүмеренә ҡурҡыныс янағанда ғына баҫып инергә мөмкин.** Ҡаршылыҡлы нормаларҙың береһе - полицейскийҙарҙың йортҡа хужаның йәки унда булған кешеләрҙең рөхсәтенән тыш инеү хоҡуғына эйә булыу осрағына барып ҡағыла. Закондың һуңғы тексында полицейскийҙарҙың быны эшләй алыуы тураһында аныҡ осраҡтар билдәләнгән. Бер яҡтан ҡараһаң, улар ни бар 4 кенә:

- ➔ граждандарҙың ғүмерен һәм мөлкәтен ҡотҡарыр, күп кеше булған сыуалыштарҙа һәм ашығыс хәлдәрҙә уларҙың хәүефһеҙлеген тәьмин итер өсөн;
- ➔ енәйәт ҡылыуҙа ғәйепләнгән кешеләрҙе тотор өсөн;
- ➔ енәйәтте туҡтатыр өсөн;
- ➔ бәхетһеҙлек осраҡтары торошон аныҡлар өсөн.

Ләкин бындай ҡағиҙәләрҙең полицейскийҙарҙың фантазияһына күпме ирек ҡалдырасағын тик ваҡыт ҡына күрһәтер. Шундай эш башланғандан һуң 24 сәғәт эсендә полицейскийҙарҙың үҙенең етәксеһенә һәм прокурорға рапорт бирергә тейеш булыуы ғына бер аҙ тынысландыра.

**Бизнес-тикшереүҙәр алып барасаҡтар.** Полиция эшендә рәсми коммерция ойошмаһына ла (органдарға элеккесә килешеү буйынса мөлкәтте һ.б. һаҡларға рөхсәт бирелгән), һалым буйынса ла тикшереүҙәр ҡалған. Был йүнәлештең ришүәтселеккә яҡшы нигеҙ һалыуы һәм эске эштәр министрлығы эшен үҙгәртергә тигән өмөттө юҡҡа сығарыуы мөмкин. Шулай ҙа өмөт итәйек, закон авторҙары уның ғәмәлдә нисек эшләүен күҙәтер, һәм, әгәр кәрәк булһа, төҙәтмәләр индерер.

**Граждандарға досье булдырыу.** Яңы законда полицейскийҙарҙың хоҡуғы күҙгә күренеп киңәйтелгән, һәм элек прокурорҙың йәки суд ҡарарының рөхсәте талап ителгән күп эштәргә: шул иҫәптән ойошмаларҙа һалым серҙәре тураһында ла, граждандарҙың персональ билдәләре тураһында ла мәғлүмәттәр һорауҙа ла улар ғәҙәти эш барышындағы кеүек хоҡуҡ ала. Ә мәғлүмәттәре полиция мәғлүмәт базаһына индерелгән кешеләрҙең категория теҙмәләренән баш әйләнеп китерлек - унда барыһы 22 категория һаналып кителгән: улар араһында водитель таныҡлығы алыусылар ҙа, реабилитацияланғандары ла, кеше көнөнә ҡалғандары ла, административ хоҡуҡ боҙоусылар ҙа бар.

**Халыҡ алдында отчет биреү.** Берҙән-бер өмөт - законда полиция эшмәкәрлеге йәмәғәтселектең күҙәтеүе аҫтында барасаҡ, тип аныҡ яҙылған. Полиция закон буйынса власть органдары һәм граждандар алдында отчет бирергә бурыслы, ә бына отчет биреүҙең тәртибен, ваҡытын һәм хатта отчет өсөн вәкилдәрҙе лә әлеге лә баяғы полиция үҙе билдәләргә тейеш.

## ҠОТЛАЙБЫҘ!

Ҡырмыҫҡалы районының Иҫке Бәпес ауылында йәшәүсе ҡәҙерлеләрҙән-ҡәҙерле һеңлебеҙ **Абдуллина (Байтурина) Фирүзә Дәүләтша ҡыҙын** 50 йәшлек күркәм юбилейы менән ысын йөрәктән ихлас ҡотлайбыҙ. Һөйөклө һеңлебеҙгә ныҡлы һаулыҡ, күңел тыныслығы, ырыҫлы, мул тормош теләйбеҙ. Киләсәктә лә шулай көслө рухлы, алсаҡ, көләс йөҙлө, шат күңелле булып ҡал, тормоштан йәм табып, яҡындарыңдың ҡәҙер-хөрмәтенә төрөнөп, хөрмәтле кейәүебеҙ Фидаиль Фәрәхетдин улы менән тик ҡыуаныстар кисереп йәшәргә яҙһын. Күҙ ҡараһындай Гөлшат һәм Гөлнар ҡыҙҙарыңа Хоҙай бәхет һәм һаулыҡ бирһен. Әле һинең алмалай бешкән, сейәләй өлгөргән, күҙ ҡыуандырырлыҡ гүзәл мәлең. Ошо булмышыңды юғалтмай оҙон-оҙаҡ йылдар һөйөклө ҡатын, изге әсәй, яҡындарыңа хәстәрлекле туған, милләтебеҙгә, илебеҙгә лайыҡлы шәхес булып бәхетле ғүмер кисереүеңде теләйбеҙ.

**Баймаҡ районында, Магнитогорск ҡалаһында йәшәүсе апайҙарың Сәлимә, Мәрйәм, Мәрзиә, Вәсимә, Фәүзиә, ағайҙарың Рәшит, Ришат, Ғаяз исеменән Сибай ҡалаһында йәшәүсе Зәһүрә апайың.**

*ИҒЛАН*

**"ТВОЙ АЛЬБИОН" үҙәгендә инглиз телендә ирекле аралашыуға өйрәтәбеҙ.** Уҡытыуҙың 80 проценты практика аша ғәмәлгә ашырыла. Телефон: **266-13-43. www.youralbion.ru.**

**"ЗДРАВУР" -**

**сәләмәтлек нигеҙе**

Сифатлы аҙыҡ-түлек - сәләмәтлек нигеҙе. Шуға ла күптәр өҫтәлендә "таҙа", тәмле йомортҡа, һөт, ит булһын өсөн хужалығында мал-тыуар аҫырай. Әммә бында ла бер нисә шартты үтәргә кәрәк. Беренсенән, "таҙа" продукцияны һау, иммунитеты яҡшы булған, матдәләр алышыныуы боҙолмаған мал һәм ҡош-ҡорт ҡына бирә ала. Икенсенән, үҙеңдең хужалығыңдағы аҙыҡ-түлек файҙалы булһын өсөн мал ашаған аҙыҡ мөһим элементтарға, бигерәк тә витамин һәм микроэлементтарға бай булырға тейеш. Тик ябай мал аҙығы менән быға ирешеү мөмкин түгел. Шуға ла белгестәр витамин-минераль өҫтәмәләр - премикстар ҡулланырға тәҡдим итә. Был премикстар малдың рационын байыта, уларҙың сәләмәтлеген нығыта, матдәләр алышыныу процесын көйләй. **"Здравур Несушка", "Здравур Буренька", "Здравур Му-Му", "Здравур Козочка", "Здравур Цып-Цып"** премикстары менән Рәсәйҙең төрлө төбәктәрендә ҡулланалар. Мал-тыуар үрсетеү менән булышҡан йөҙ меңләгән хужалыҡ етәкселәре һәм белгестәр был өҫтәмәләрҙең файҙалы һәм сифатлы булыуын үҙ тәжрибәһендә асыҡлаған. "Здравур" премикстары витамин һәм микроэлементтарҙан тыш, аминокислоталар һәм ферменттарға ла бай. Аминокислоталар аҡһымдар алышыныуын яҡшырта, малдарҙың һаулығын нығыта. Ферменттар мал аҙығының үҙләштерелмәй торған матдәләрен еңелерәк формаға әйләндерә, аш һеңдереүҙе яйға һала. Был премикстарҙы ҡулланғанда мал аҙығының бер грамы ла юғалмай, тауыҡтар йомортҡаны күберәк һала башлай, мал ауырлыҡты тиҙерәк йыя. **"ЗДРАВУР"** премикстары ҡулланғандан һуң йомортҡа, ит, һөт витаминдарға байый, уларҙың тәме яҡшыра. Премикстарҙа гормондар, антибиотиктар юҡ.

**"ЗДРАВУР"** - өҫтәлегеҙҙә тик сифатлы аҙыҡ ҡына булһын!

**Почта бүлексәләрендә һорағыҙ.**

**Сертификацияланған.**

**www.vhoz.ru**

✓ Будда йылмая һәм шулай ти: "Эйе, шулайҙыр. Бына мин һеҙҙең мыҫҡыллау һәм ҡарғауҙарҙы ла алмайым, үҙегеҙгә кире ҡайтарам. Һеҙ ул йөктө ни эшләтерһегеҙ икән?"



ЗАУЫҠ

Лариса АБДУЛЛИНА

# КӨЛӘ-КӨЛӘ ШИҒЫР ЯТЛАНЫМ МИН, ИЛАЙ-ИЛАЙ ШИҒЫР ҺӨЙЛӘНЕМ...

### Илем ҡайҙа?

Мин илһөйәр милләт ҡыҙы булам,
Ҡанда йәшәй ерем хәтере.
Ошо тойғо беҙҙе халыҡ итә,
Бөгөн бармы асыл ҡәҙере?

Есенинлы Рәсәй ҡайҙа һуң ул?
Ахматова унда яҡланған.
Даһиҙары хөкөм ителеп тә,
Килер быуын уны аҡлаған.

Бөгөн нимә?
Аҡлау, яҡлау түгел,
Нәфрәт хисе хатта ҡалмаған.
Әйтерһең дә, илде иргәйелдәр,
Битарафтар, ҡолдар яулаған.

Һеҙ алмағыҙ минән һөйөү хисен!
Таламағыҙ минең еремде!
Рәсәй офоҡтары сикһеҙ ине,
Хәҙер, гүйә, сите күренде.

"Башҡортостан!"- тиеп башым эйәм,
Мин терәйем уға иңемде.
Ҙур Ватанда берәҙәклек шомо -
Тоймайым мин артта илемде...

### Дуҫлыҡ ҡәҙере

Күптәр менән хәҙер мин дуҫ түгел,
Мин күптәргә түгел әхирәт.
Шаҡымайым дуҫлыҡ ҡапҡаларын,
Вәғәҙәләр биреү - әкиәт.
Юҡ, кәрәкмәй эштә әшнә булыу,
Башты башҡа терәп сер бүлеү,
Абынғанды ғына көттә бәрәү,
Был көн булды - үлеп терелеү.
Бисә төҫлө ҡай бер ирҙәре лә,
Ир холоҡло бәғзе ҡатындар.
Мин белгәйнем дуҫлыҡ ҡәҙерҙәрен,
Дәғүәгә лә шуға хаҡым бар.
Хәйер, хәҙер ниндәй дәғүә инде,
Шаҡымайым дуҫлыҡ ҡапҡаһын.
Тойғо ҡәҙерҙәрен белмәгәндәр
Минең ишекте лә ҡаҡмаһын.

### Алдау

Әгәр һеҙгә алдашмайым, тиһәм,
Кем һуң, әйтсе, минә ышаныр?
Тел һөйәкһеҙ, күңел дөрөҫлөгөн
Күптәр ҡотопторға тышаны.

Теле телгә йоҡмай анттар әйткән
Түрәләрҙән халыҡ алданды.

"Ышанмаҫҡа ине", - ти улары,
Аңлап ҡара: дөрөҫ, ялғанды...

Һүҙгә һүҙҙән һәйкәл ҡойоусы ла
Һүҙҙе тәләфләүсе - был дәүер!
Алданыуың хәҙер бер ни түгел,
Алдашмайса йәшәү - бик ауыр.

Алдашыусы үҙен алдай тигәс,
Мәсеттәге изге муллалар,
Ышыҡ булды иман юлы,
Бары
Изге йортҡа юлды боралар...

Бөтәһен дә, барын алдаһаң да,
Үҙ-үҙеңде булмай һис алдап.
Беҙҙең ялған беҙҙең менән йәшәй,
Ә хаталар саба гел алдан.

### Аҫалы балаҫ

Нәнәйемдең туй бүләге бит ул -
Фатир түрҙәрендә балаҫы.
Ете төҫтә балҡып ята ана,
Хәҙер уны ҡайҙан алаһың?

Һәр төҫөнә мәғәнәләр биреп,
Һуҡтырғандыр әле нәнәйем.
Мин бит уның балаһынан былай
Үҙ янында үҫкән тәнәйе.

Үҙе көткән һарыҡтарҙың йөнөн
Сағыу төҫкә манған саҡтарҙа
Изге теләктәрен теләгәндер
Мин булһам да алыҫ яҡтарҙа.

Аҫалы ла балаҫ алған ҡыҙҙың
Аҫыл була, имеш, яҙмышы.
Рәхмәттәрең, нәнәй, - балаҫыңда,
Яҙмышымда һинең алғышың.

Өфө түрҙәренә элерлек ул,
Мең алғышлы булыр был ҡала.
Үҙ ҡыйығын табып төпләнерҙәр
Ауылдарҙан сыҡҡан һәр бала.

Борондан уҡ нәнәйҙәре шулай
Ҡәҙер иткән бала балаһын.
...Үҙең күрмәһәң дә төҫөң булып,
Фатирымды биҙәй балаҫың.

### Бишенсе тараф

Онотолоу донъяларын беләм,-
Ул хыялға инеп юғалыу,
Төҫһеҙләнгән мәлдә төҫтәр эҙләү,
Булмышыңдан үҙен уҡ алыу.

Онотолған мәлдәр яуап көтә
Бушап ҡалған саҡта дүрт тараф.
Ә бишенсе тараф арбай, әйҙәй
Намыҫыңа тура, төҙ ҡарап.

Әйтерһең дә, терегөмөш кеүек
Тараланһың...
Йәнә һин бөтөн.
Тик һүҙ менән яҙып булыр кеүек
Шул бишенсе тараф һүрәтен.

### Бабичка

Шиғырҙарың "кейеп" ҡараным мин,
Шиғриәтең йәнем яуланы.
Ғәййәр рухың бик килешеп китте,
Мөхәббәтле моңоң яраны.

Көлә-көлә шиғыр ятланым мин,
Илай-илай шиғыр һөйләнем.
Йән ҡылдарын мандолина итеп,
Шул дәүерҙең көйөн көйләнем...

Ни ғәләмәт!
Мең ғазапка сумып,
Мең бәхеткә шул саҡ төрөндөм.
Һинең йырың уртаҡ бер юл булып,
Айың яҡтыһында күренде.

Нур сәсерлек усаҡ ҡабынғанда,
Ҡабул ҡыла шағир яҙмышын.
Быуындарҙы быуындарға бәйләп,
Быуаттарға быуаттарҙы бәйләп,
Милләт үҙе йырҙар яҙышыр.

Бөтәһе лә үтә икән, беләм,
Тик йыр ҡала!
Ҡала мөхәббәт!
Шиғырҙарың "кейеп" ҡарағайным,
Йөрәгемдә ҡалды йәрәхәт...
Бер йәнемдә мең-мең йәрәхәт!

### Һинең ҡулдар

Һис үпкәм юҡ, йәнем, ҡулдарыңа-
Улар мине күккә күтәрҙе.
Теге хәтәрҙә лә үпкын аша
Ептәй күпер аша үткәрҙе.

Нисек итеп рәнйеп булһын инде
Сәскә бүләк иткән ҡулдарға!
Улар мине генә бәүелтмәне,
Сәнгелдәктәр элде уларға.

Был ҡулдарҙың ниндәй ғәйебе бар?
Сәстәремдән улар наҙланы.
Был һөйөүҙән күңел үҫте генә,
Был һөйөүҙән күңел аҙманы.

Һинең ҡулдар, йәнем, - һинеке,
Һәр ҡылығын шуға - минеке...

### Тик бер һүҙең

Тик бер һүҙең етә,
Бер ҡарашың -
Ҡоштай осоп, күккә талпынам.
Меңәрләгән өшөгәндә хатта
Йылытырлыҡ эске ялҡыным.

Тик бер һүҙең етә,
Бер ҡарашың -
Тере мәйет кеүек буламын.
Ҡанаттарым һынып, ергә ауам,
Йәйге селләләрҙә туңамын.

Аһ, ул һүҙҙәр!
Нисек кенә итеп
Һәр ымына әҙер булырға?
Йылы һүҙең йыйып-йыйып барып,
Туңған мәлдә шунда тулырға...

## ҺЫЙЛАМАҒА ҺЫЙЫҢ БУЛҺЫН!

### "Сыбар турама"

50 гр сыр, 30 гр алма, бешкән 2 йомортканы турап, татлы боростоң эсен алып ташлап, оҙонсалап турағас, мандарин йәки афлисунды бүлкәттәргә бүлгеләп ҡушырға. Өҫтөнә йогурт, бал, лимон һуты, саҡ ҡына гәрсис ҡушып яһалған соус ҡойорға.

### Ябай турама

Һутлы кишерҙе ҡырғыстан үткәргәс, әнис менән петрушканы, бешкән 1 йомортканы, 1 алманы турап, саҡ ҡына үҫемлек майы ҡушып болғатырға. Турама көс бирә, бигерәк тә ябығыусылар өсөн файҙалы.

### Тиҙ бешә торған торт

2 йомортка, 2 йомортка нарыһын стакан ярым шәкәр менән күпертәкәнсе туҡырға, 250 гр иретелгән май (әҫе булмаһын), стакан ярым йәҙем, шул уҡ күләмдә он ҡушып болғатҡас, майлы табаға ҡойоп, еүеш ҡул менән тигеҙләгәс, эҫе духовкала бешереп алырға.

**Флора БИКЕМБӘТОВА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә әйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ҠОЛДАР БУЛҒАС...

## ул ил ирекле түгел

Аҡсаға барыһын да һатып алып була, тик кеше йөрәгенең йылыһын түгел.

**(Тит Ливий).**

Тыңлауһыҙға һүҙ әйтһән, тыңлай-тыңлай артыһан йүгерерһең.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Бер генә бүлкәтендә тутыҡ булһа ла, сынйырҙың ныҡлығына шик тыуа. Бер генә ҡоло булһа ла, ул илде ирекле тип атап булмай.

**(Элла Уилкюс).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Бер саҡ Будда үҙенең шәкерттәре менән буддасыларға ҡаршы булған ауыл эргәһенән үҙып барған. Ауыл кешеләре уларҙың юлына ҡаршы сыҡҡан һәм төрлө һүҙҙәр менән әрләй, хурлай башлаған. Шәкерттәр ҙә үҙҙәрен әрләүселәргә ҡаршы һүҙ әйтергә уҡталған да Будданың тыныс йөҙөн күреп, һүрелгән. Шул саҡ Будда үҙенең шәкерттәренә табан әйләнгән дә былай тигән: "Һеҙ мине төңөлдөрә яҙҙығыҙ. Был кешеләр бит үҙ эшен эшләй. Улар асыулы. Улар мине үҙҙәренең диненең дошманы тип уйлай. Шуға ла улар мине мыҫҡыллар тырыша, был тәбиғи. Ләкин ни өсөн һеҙ асыуланаһығыҙ? Уларға асыуланып, һеҙ үҙегеҙҙе уларға бойондороҡло итәһегеҙ. Һеҙ ирекле кешеләр түгелме ни?" Ауыл кешеләре быйндай реакцияға аптырап, тынып ҡалған. Ошо тынлыҡтан файҙаланып, Будда халыҡҡа боролған да, былай тигән: "Һеҙ барыһын да әйтеп бөттөгөҙмө? Әйтеп бөтмәһәгеҙ, беҙ сәйәхәтебеҙҙән ҡайтышлай тағы һеҙҙең ауыл аша үтербеҙ, шунда барыһын да әйтеп бөтөп ҡуйырһығыҙ". Ауыл кешеләре аптырашып: "Һуң беҙ һине мыҫҡыл иттек бит, ни өсөн һин беҙгә асыуланмайһың?"- тип һораған. "Һеҙ ирекле кешеләр һәм һеҙ ҡылған ҡылыҡ - ул һеҙҙең хоҡуғығыҙ, - тигән уларға Будда. - Ләкин мин һеҙҙең мыҫҡыллауҙарға асыуланмайым, сөнки мин дә ирекле кеше. Мине бәреү ҙә асыуланырға, шуның менән үҙенә бойондороҡло булырға мәжбүр итә алмай. Мин үҙ ҡылыҡтарымдың һәм тойғоларымдың хужаһы. Ә хәҙер мин һеҙгә шундай һорау бирергә теләйем. Һеҙҙең күрше ауылда йәшәүселәр мине матур итеп сәләмләне, минә еләк-емеш, сәскәләр килтерҙе. Ә мин уларға:**

**"Бүләктәрегеҙ өсөн рәхмәт, тик беҙ уларҙы үҙебеҙ менән бергә алып йөрөй алмайбыҙ, шуға ла уларҙы үҙ фатихам менән үҙегеҙгә кире ҡайтарам", - тинем. Шул саҡ ауыл кешеләренең береһе: "Улар, моғайын, был күстәнәстәрҙе өйҙәренә алып ҡайтып, балаларына өләшкәндер..."- тип һүҙ ҡыҫтыра. Будда йылмая һәм шулай ти: "Эйе, шулайҙыр. Бына мин һеҙҙең мыҫҡыллау һәм ҡарғауҙарҙы ла алмайым, үҙегеҙгә кире ҡайтарам. Һеҙ ул йөктө ни эшләтерһегеҙ икән?"**


1158221891100 6

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Таһир ИШКИНИН,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Беҙҙең адрес:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 6206
Заказ 702